ЭРНЕСТ ХЕМИНГУЭЙ



# КАРТ МЕНӘН ДИҢГЕҘ

ЭРНЕСТ ХЕМИНГУЭЙ

# КАРТ менән ДИҢГЕҘ



ӨФӨ · 2015

ББК 84 (7Сое) — 444
УДК 821.111 — 312.9
Х 37

*Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм «Инеш» нәшриәтенең уртаҡ проекты сиктәрендә «Урал» хәйриә фонды иғәнәһенә сығарыла.*

**Хемингуэй Э.**
Х37 ҠАРТ МЕНӘН ДИҢГЕҘ / Руссанан тәржемә. — Өфө: Инеш, 2015. — 96 бит.

ISBN 978-5-903622-39-9

12 йәштән өлкәнерәк балалар өсөн.

ББК 84 (7Сое) — 444
УДК 821.111 — 312.9

**ISBN 978-5-903622-39-9**

© Ғиззәтуллина Г.М., башҡортсаға тәржемә, 2001
© Ҡостин А.А., һүрәттәр, 2001
© Ишимбаева Г.Г., һуңғы һүҙ, 2015
© Ҡүзбәкова Р.А., һуңғы һүҙҙең тәржемәһе, 2015
© «Инеш» нәшриәте, биҙәлеш, 2015

Ҡарт кәмәһе менән Гольфстримда япа-яңғыҙ балыҡ ҡармаҡлай ине. Бына һикһән дүрт көн инде ул диңгеҙгә сыға, тик әлегәсә бер балыҡ та тота алғаны юҡ. Тәүге ҡырҡ көндә уның менән бергә бер малай булды. Әммә көн һайын буш ҡул менән ҡайтҡас, ата-әсәһе малайға, ҡарт хәҙер salao, йәғни, даланһыҙ, тине һәм диңгеҙгә икенсе кәмәлә сығырға ҡушты. Ысынлап та, ул кәмә тәүге аҙнала уҡ өс елле балыҡ алып ҡайтты.

Ҡарттың көн дә ҡоро ҡул менән ҡайтыуын күреү малайға ифрат ҡыйын ине. Шуға күрә ул, яр буйына төшөп, ҡарттың кәмәһенән багор, елкән, гарпун кеүек нәмәләрҙе күтәрешеп алып менә. Ҡырҡмаһа-ҡырҡ еренән ямау һалынған киндер елкән, мачтаға уралғас, һуғыш майҙанында тар-мар ителгән ғәскәрҙең байрағын хәтерләтә.

Балыҡсы ҡарт — үтә ябыҡ һәм таушалған кеше. Муйынын тәрән-тәрән йыйырсыҡ баҫҡан, яңағын ҡыҙғылт таптар ҡаплаған. Көньяҡ океаны өҫтөндә сағылған ҡояш нурҙарынан аҙған был таптар ҡарттың яңағынан алып муйынына тиклем һуҙылған.

Ҡулында ҙур балыҡты тартып сығарғанда еп ҡырҡҡан яраларҙың тәрән йөйҙәре беленеп тора. Яңылары күренмәй әле. Ә иҫкеләре әллә ҡасан кипкән сүлдәге ер ярыҡтары кеүек. Күҙҙәренән башҡа бөтә ерҙәре лә туҙған ҡарттың. Ә күҙҙәре иһә, хас та диңгеҙ кеүек, зәп-зәңгәр булып, ҡайғы-хәсрәткә бирешмәйсә ҡалған.

— Сантьяго, — тине уға малай, причалда торған кәмә янынан яр буйындағы юл буйлап икәүләшеп өҫкә күтәрелгәндә. —



*Балыҡсы ҡарт — үтә ябыҡ һәм таушалған кеше. Муйынын тәрән-тәрән йыйырсыҡ баҫҡан, яңағын ҡыҙғылт таптар ҡаплаған.*

Мин йәнә һинең менән диңгеҙгә сыға алам. Беҙ аҙыраҡ аҡса эшләнек инде.

Ҡарт малайҙы балыҡсылыҡҡа өйрәткәйне. Малай уны бик ярата ине.

— Юҡ, — тине ҡарт. — Һин бәхетле кәмәгә эләктең. Ҡал шунда.

— Хәтереңдәме, һин бер йылды һикһән ете көн буйы диңгеҙгә сығып бер нәмә лә тота алманың, унан һуң беҙ өс аҙна буйы көн һайын бер ҙур балыҡ алып ҡайттыҡ.

— Иҫемдә, — тине ҡарт. — Һин бит миңә ышанмаған өсөн китмәнең, мин быны яҡшы аңлайым.

— Атайым ҡушты бит. Ә мин малай ғына әле, уның һүҙен тыңларға тейешмен.

— Беләм, — тине ҡарт. — Шунһыҙ ярамай.

— Ә ул һиңә бик ышанып етмәй.

— Эйе, — тине ҡарт. — Ә бына беҙ ышанабыҙ. Дөрөҫмө?

— Әлбиттә. Теләйһеңме, мин Террасала һине һыра менән һыйлайым. Әйберҙәрҙе шунан алып барырбыҙ.

— Әйҙә һуң, — тине ҡарт. — Балыҡсы балыҡсыны һыйларға теләй икән...

Улар Террасаға инеп ултырҙы. Балыҡсыларҙың күбеһе ҡарттан көлһә лә, уның быға хәтере ҡалмай. Ә өлкәнерәк балыҡсылар, ҡартты йәлләһәләр ҙә, тойғоларын йөҙҙәренә сығармайҙар, көндәрҙең нисек булыры, һыу ағымы, ҡармаҡ ебен ниндәй тәрәнлеккә төшөрөүҙәре, диңгеҙҙәге хәлдәр хаҡында һөйләшәләр. Был көндә кәсептәре уңышлы булғандары, инде ҡайтып, тотҡан марлиндарының эстәрен таҙартҡандар, икешәр оҙон таҡтаға арҡыры һалып, таҡта баштарынан икешәр кеше күтәреп, балыҡ келәтенә ташыйҙар. Унан балыҡты рефрижераторҙа Гаванаға баҙарға алып китәсәктәр.

Акула тотҡан кешеләр иһә үҙ табыштарын диңгеҙ ҡултығының икенсе яғындағы акула эшкәртеү заводына тапшыра. Унда, акула түшкәләрен сылбырҙарға аҫып, бауырҙарын алалар, йөҙгөстәрен киҫеп, тиреһен тунайҙар. Ә итен тоҙлар өсөн йоҡа киҫәктәргә телгеләйҙәр.

Ҡөнсығыштан иҫкән ел акула фабрикаһынан һаҫыҡ еҫ алып килә. Тик бөгөн ул еҫ һиҙелмәй, сөнки ел төньяҡҡа күсте, унан тынды. Террасала ҡояшлы һәм рәхәт ине.

— Сантьяго, — тип өндәште малай.

— Әү, — тине ҡарт. Ул үҙенең һыралы стаканына ҡарап күптән үткән көндәрҙе иҫенә төшөрә ине.

— Иртәгәлеккә һиңә сардина тотам, йәме?

— Борсолма. Һин бар, бейсбол уйна. Мин үҙем дә ишкәк ишә алам әле. Йәтмәне ташларға Роджелио ярҙам итер.

— Юҡ, миңә рөхсәт ит. Һинең менән балыҡҡа сығырға ярамағас, исмаһам, берәй ярҙамым тейһен.

— Һыра менән һыйланың бит, — тине ҡарт. — Һин хәҙер еткән егетһең бит инде.

— Һин тәүге тапҡыр диңгеҙгә алып сыҡҡанда, миңә нисә йәш ине?

— Биш. Һин шунда саҡ иҫән ҡалдың. Мин һөйрәп сығарған балыҡ кәмәне селпәрәмә килтерә яҙҙы, хәтерләйһеңме?

— Хәтерләмәй ни! Ҡойроғо менән бәреп ултырғысты ватҡас, һин уны күҫәгең менән туҡманың. Ә мине кәмә моронона — еүеш ауҙар өҫтөнә бырғаның. Кәмә дер һелкенә, һинең күҫәгең ағас ҡырҡҡандағы кеүек туҡылдай, тирә-яҡта уҡшытҡыс ҡан еҫе.

— Ысынлап та быларҙың бөтәһен дә иҫләйһеңме, әллә һуңынан мин һөйләнемме?

— Мине диңгеҙгә алып сыҡҡан тәүге көндән алып барыһы ла хәтеремдә.

Ҡарт уға ҡояшҡа ҡыҙарып шешмәкләнгән ышаныусан күҙҙәре менән яратып ҡараны.

— Әгәр ҙә минең улым булһаң, һине әле үҙем менән алырға тәүәккәлләр инем. Тик һинең атайың менән әсәйең бар, табышлы кәмәгә лә эләктең.

— Шулай ҙа мин һиңә сардина тотайым әле. Дүрт маймысты ҡайҙан алырға ла беләм.

— Бөгөнгөләре лә бар әле. Мин уларҙы тоҙло йәшниккә һалып ҡуйғайным.

— Мин һиңә тағы дүртте алып киләм.

— Берҙе, — тип ҡаршы төштө ҡарт.

Ул былай ҙа киләсәккә өмөтөн дә, ышанысын да юғалтмай торғайны, әле иһә малайҙың һүҙҙәре ҡарттың күңелен тағы ла күтәреп ебәрҙе, әйтерһең дә, диңгеҙҙән саф ел иҫеп ҡуйҙы.

— Икене, — тине малай.

— Ярар, икене, — тип ризалашырға мәжбүр булды ҡарт. — Ә һин уларҙы берәй ерҙән сәлдермәнеңме?

— Кәрәк булһа, сәлдерер ҙә инем. Тик мин уларҙы һатып алдым.

— Рәхмәт, — тине ҡарт.

Үҙ хәленә ҡасан күнгәне тураһында уйлар өсөн ул артыҡ хәйләһеҙ ине. Әммә кешелек баһаһын юғалттырмай ғына ҡартлыҡ күндәмлеге килгәнен белә ине ул.

— Ағым үҙгәрмәһә, көн һәйбәт буласаҡ, — тине ҡарт.

— Һин балыҡты ҡайһы ерҙәрәк тотмаҡсыһың?

— Ярҙан алыҫтараҡ, ә ел үҙгәргәс, ҡайтырмын. Таң атҡансы уҡ сығам.

— Минең хужаны ла алыҫҡараҡ китергә өгөтләргә кәрәк. Һиңә ғәләмәт ҙур балыҡ эләкһә, беҙ ярҙам итербеҙ.

— Һинеке ярҙан алыҫ китергә яратмай.

— Эйе, — тине малай. — Тик мин ул күрә алмаған берәй нәмәне — әйтәйек, аҡсарлаҡтарҙы күргән булырмын да шунда барырға өндәрмен. Шул саҡта уны алтын тәңкәле макрель артынан алыҫҡараҡ китергә әүрәтеп буласаҡ.

— Күҙҙәре шулай насар күрәме ни?

— Бөтөнләй тиерлек һуҡырайҙы.

— Ғәжәп. Ул бит гөбөргәйел артынан йөрөмәне. Күҙ күбеһенсә шунан насарлана.

— Ә бына һин нисәмә йыл буйы Москит ярына гөбөргәйел тоторға йөрөгәнһең, шулай ҙа күҙең яҡшы күрә.

— Мин бит ябай ҡарт түгел.

— Ә бик ҙур балыҡ эләкһә, көсөң етерме һуң?

— Етер, тип уйлайым. Бындай саҡта хикмәт көстә түгел, таһылда.

— Әйҙә, әйберҙәреңде алып ҡайтайыҡ. Аҙаҡ мин йәтмә алып сардина тоторға китермен.

Улар кәмәләге әйберҙәрҙе йыйып алып сыҡты. Ҡарт мачтаны яурынына һалды, малай һаплы гарпун, багор менән ҡармаҡ бауҙары һалынған әрйәне күтәрҙе. Ҙур балыҡты тартып сығарғанда һуғып миңрәтә торған күсәк менән ем һауыты кәмәлә ҡалды. Билдәле, ҡарттың әйберҙәренә тейергә бер кемдең дә ҡулы бармаç ине. Шулай ҙа елкән менән ҡармаҡ бауҙарын таңғы ысыҡта еүешләнмәһен өсөн алып ҡайтып ҡуйыу яҡшыраҡ. Ҡарт әйберҙәренә бер кемдең дә теймәйәсәгенә ышанһа ла, багор, гарпун кеүек нәмәләрен алып ҡайтып ҡуйыуҙы ҡулайыраҡ күрә.

Һуҡмаҡ буйлап менделәр ҙә шар асыҡ ишектән ҡарттың аласығына инделәр. Ҡарт елкән уралған мачтаны стенаға һөйәне. Малай ҙа алып килгән әйберҙәрен шунда ҡуйҙы. Король пальмаһы япрағынан (был яҡтарҙа уны guano тип атайҙар) һалынған был аласыҡтың эсе мачта һыйырлыҡ ҡына ине. Бер тимер карауаты, өҫтәле һәм ултырғысы бар, уртала ер иҙәнгә бәләкәс кенә утъяҡҡыс ҡаҙылған. Сүсле япраҡтарҙан ҡыҫып һалынған һорғолт-көрән стеналарға «Алла йөрәге» һәм «Santa Maria del Cobre» һүрәттәре эленгән. Был рәсемдәр ҡарттың ҡатынынан ҡалған. Ҡасандыр стенала ҡатынының үҙенең төҫлө фотоһы ла эленеп тора торғайны; тик һуңынан ҡарт уны йәшереп ҡуйҙы, сөнки гел күҙ алдында тороуы ныҡ болоҡһота ине. Хәҙер фото мөйөштәге кәштәлә таҙа күлдәк аҫтында ята.

— Сантьяго, киске ашҡа нимәң бар? — тип һораны малай.

— Балыҡ менән бер һауыт һары дөгө. Ашағың киләме?

— Юҡ, өйҙә ашармын. Ут тоҡандырайыммы?

— Кәрәкмәй. Торараҡ үҙем яндырырмын. Бәлки, дөгөнө былай ғына, һалҡын килеш ашармын.

— Йәтмәне алайыммы?

— Ал, ал.

Дөрөҫөн әйткәндә, бер ниндәй ҙә йәтмә юҡ ине. Йәтмәнең күптән һатылғанын малай яҡшы хәтерләй. Әммә икеһе лә уны бар тип һанай. Ҡарттың ашарына дөгөлө балығы ла юҡ, малай быны ла белә.

— Һикһән биш — бәхетле һан, — тине ҡарт. — Әгәр ҙә иртәгә мең фунт тартҡан балыҡ тотһам, нишләйбеҙ?

— Мин йәтмәне алып сардина тоторға барып киләйем. Һин бер аҙ тупһала ултырып тор, унда ҡояш сыуаҡлай.

— Ярар. Мин кисәге гәзитте ҡараштыра торам. Бейсбол тураһында уҡырмын.

Малай уның гәзите ысынлап та бармы, әллә быныһы ла уйҙырмамы, тип уйлауға, ҡарт карауат аҫтынан ниндәйҙер гәзит тартып сығарҙы.

— Миңә уны шарап кибетендә Перико бирҙе, — тип аңлатты ул.

— Мин сардина тотоп киләм. Үҙемдекен дә, һинекеләрҙе лә бергә боҙға һалып торам. Иртәнсәк бүлешербеҙ. Ҡайтҡас, миңә бейсбол тураһында һөйләрһең, йәме.

— «Янкиҙар» еңелергә тейеш түгел.

— Кливлендтың «Индеецтар»ы дөмбәҫләмәһә инде!

— Ҡурҡма, улым. Бөйөк Ди Маджионы иҫеңә төшөр.

— Мин «Индеецтар»ҙан ғына түгел, Детройттың «Юлбарыҫтар»ынан да ҡурҡам.

— Былай барһа, һин тиҙҙән Цинциннатиҙың «Ҡыҙыл тәнлеләр»енән дә, Чикагоның «Аҡ ойоҡтар»ынан да шөрләй башламағайың.

— Гәзит уҡы ла, урап килгәс, миңә һөйләрһең!

— Әллә һикһән биш һаны булған лотерея билеты һатып алайыҡмы? Иртәгә бит һикһән бишенсе көн.

— Ниңә алмаҫҡа? — тине малай. — Бәлки, һикһән ете һанлыны алһаҡ яҡшыраҡ булыр? Үткән юлы һикһән ете көн булғайны бит.

— Бер нимә лә ике тапҡыр ҡабатланмай. Ә һин һикһән биш һанлы билет ала алырһыңмы?

— Һорармын.

— Бер мәртәбә генә уйнай торғанын. Ике доллар ярым торғанын. Ҡемдән бурысҡа алып торайыҡ икән?

— Уныһы ваҡ мәсьәлә! Ике ярым долларҙы мин теләһә кемдән һорап тора алам.

— Һорауын мин дә һорар инем, тик бурысҡа инмәҫкә тырышам. Тәүҙә үтескә һорайһың, унан — хәйер...

— Ҡара уны, ҡарт, һалҡын алдыра күрмә. Тышта сентябрь.

— Сентябрҙә эре балыҡ килә. Май айында балыҡты кем дә тота ул...

— Ярар, мин сардина тоторға киттем, — тине малай.

Малай ҡайтҡанда, ҡояш байығайны инде. Ҡарт ултырғысында килеш йоҡлап киткән. Малай, карауат өҫтөндәге иҫке һалдат одеялын алып, ҡартҡа япты. Инде өлкән булыуына ҡарамаҫтан, ҡарттың яурындары киң, ҡеүәтле, муйыны ла көслө ине. Башын эйеп йоҡлағанға күрә, муйынындағы йыйырсыҡтары ла яҙылған. Ҡарттың күлдәге лә, нәҡ елкәне кеүек үк, ямау өҫтөнә ямау һалынып, төрлөһө төрлө ваҡытта уңғанға, ҡорама юрған төҫлө. Шулай ҙа уның йыйырсыҡлы йөҙө үтә ҡарт күренә, күҙе йомоҡ булғанға, хатта йәнһеҙ кеүек. Ул тубығына төшкән гәзитен, ел осормаһын өсөн, терһәге менән ҡыҫҡан. Аяҡтары яланғас.

Малай уны уятырға ҡыймайынса сығып китте. Бер аҙҙан кире әйләнеп килде, тик ҡарт һаман да йоҡлай ине әле.

— Сантьяго, уян әле! — Малай ҡулы менән ҡарттың тубығына ҡағылды.

Ҡарт күҙҙәрен асты, иҫенә килә алмағандай, бер килке өндәшмәй торҙо. Унан йылмайып ҡуйҙы.

— Һин нимә алып килдең?

— Ашарға. Хәҙер ашайбыҙ.

— Минең әллә ни ашағым да килмәй.

— Әйҙә, ашайыҡ. Ас көйө балыҡҡа барып булмай.

— Тура килгеләнe, — тине ҡарт, урынынан ҡуҙғалып. Ул гәзитен бөкләп, одеялын төрөп ҡуйҙы.

— Одеялыңды яурыныңдан алма, — тине малай. — Үҙем иҫән саҡта, һиңә ас көйөнсә балыҡҡа сығырға ирек бирмәм.

— Улайһа, үҙеңде һаҡла ла мөмкин тиклем оҙағыраҡ йәшә, — тине ҡарт. — Нимә ашайбыҙ?

— Дөгө менән ҡара борсаҡ, ҡурылған банан һәм быҡтырылған һыйыр ите.

Малай аҙыҡты Террасалағы ресторандан тимер һауыттарға һалып алып килгәйне. Ә сәнске, ҡалаҡ, бысаҡтарҙы, һәр береһен ҡағыҙ салфеткаға төрөп, кеҫәһенә һалған.

— Һиңә быларҙы кем бирҙе?

— Мартин, ресторан хужаһы.

— Уға рәхмәт әйтергә кәрәк булыр.

— Борсолма, мин әйттем инде, — тине малай.

— Ҙур балыҡ ҡапҡас, иң итләс ерен уға бирермен, — тине ҡарт. — Ул беҙгә беренсе тапҡыр ғына изгелек эшләмәй.

— Эйе, беренсе тапҡыр ғына түгел.

— Улайһа, итле ере генә аҙ булыр. Ул беҙгә күп ярҙам итте.

— Бөгөн бына һыра ла бирҙе.

— Мин консервалағы һыраны ныҒыраҡ яратам.

— Беләм. Тик бөгөн ул шешәлеһен бирҙе. Бушағас, шешәләрен кире алып барырмын.

— Рәхмәт инде һиңә. Әйҙә, ашайыҡ.

— Мин һиңә күптән инде аша тип тылҡыйым, — тип яратып ҡына битәрләне уны малай. — Һинең өҫтәл артына ултырғаныңды көтәм, ризыҡ һыуынмаһын өсөн, һауыттарҙың ҡапҡасын асмайым.

— Әйҙә һуң. Миңә йыуынырға кәрәк ине бит әле.

«Ҡайҙа йыуыныр инең икән? — тип уйланы малай. Һыуалғыслка тиклем ике квартал барырға кәрәк ине. — Уға һыу, һабын, яҡшы ғына таҫтамал әҙерләп ҡуйырға кәрәк. Нисек мин был хаҡта элегерәк уйламаным икән? Уға яңы күлдәк, ҡышҡы куртка, аяҡ кейеме, бер одеял да кәрәк булыр».

— Ите тәмле, — тип маҡтаны ҡарт.

— Миңә бейсбол тураһында һөйлә әле.

— Америка лигаһында «Янкиҙар» еңә тип әйттем бит инде мин һиңә.

— Эйе, тик бөгөн уларҙың кәрәктәрен бирҙеләр бит.

— Быныһы ваҡ мәсьәлә. Уның ҡарауы, бөйөк Ди Маджио яңынан бына тигән итеп уйнай башлаған.

— Командала ул бер үҙе генә түгел бит.

— Дөрөҫ. Шулай ҙа уйынды ул хәл итә. Бруклиндар менән филадельфиялар уйнаған икенсе лигала тик бруклиндарҙың ғына өмөтө бар. Хәйер, Дик Сайзлерҙың нисек уйнағанын иҫләйһеңме? Тегендә, иҫке паркта уйнағанда ҡайһылайыраҡ һуға торғайны ул.



*Ул, үҙенең һыралы стаканына ҡарап, күптән үткән көндәрҙе иҫенә төшөрә ине.*

— Юғары класс! Ул бөтәһенән дә алыҫҡараҡ бәрә.

— Уның Террасаға килгәне хәтерендәме? Балыҡҡа саҡырғым килгәйне лә, тик уңайһыҙландым. Һиңә ҡушҡайным, һин дә тартындың.

— Иҫләйем. Алйот булғанмын. Бәлки, ул риза булыр ине. Ғүмерлеккә иҫтә ҡалыр ине.

— Бына үҙең менән бөйөк Ди Маджионы диңгеҙгә алып сыҡһаң ине ул, — тине ҡарт. — Уның атаһы балыҡсы булған, тиҙәр. Кем белә, бәлки, ул үҙе лә беҙҙең кеүек ярлы булғандыр әле, бергәләшеп балыҡҡа барыуҙан баш тартмаҫ ине.

— Ә бөйөк Сайзлерҙың атаһы бер ваҡытта ла ярлы булмаған. Ул минең йәштә үк ысын командаларҙа уйнаған.

— Һинең йәшеңдә мин, юнга булып, елкәнле карапта Африкаға бара инем. Кистәрен арыҫландарҙың яр буйына төшкәнен күрә торғайным.

— Һөйләгәйнең шул.

— Нимә тураһында һөйләшәйек: Африка хаҡындамы, бейсболмы?

— Бейсбол тураһында. Бөйөк Джон Мак-Гроу хаҡында һөйлә әле.

— Ул да элек беҙҙең Террасаға ингеләй торғайны. Эсеп алды ниһә инде, тотоп тыйып булмай ине. Ул бейсбол менән бер рәттән сабыш аттарын да яратты. Кеҫәһендә һәр ваҡыт бәйгеләр программаһы йөрөтә, ҡайһы атҡа ҡуйғанын телефон аша әйтә.

— Ул шулай уҡ һәйбәт тренер ҙа булған, эйеме? — тип һораны малай. — Атайым әйтә, ул донъялағы иң бөйөк тренер, ти.

— Сөнки ул уны башҡаларға ҡарағанда күберәк күргән. Әгәр Дюроше ла беҙгә йыл һайын килһә, атайың уны донъялағы иң бөйөк тренер тип иҫәпләр ине.

— Ә һинеңсә иң бөйөк тренер кем? Люкмы, әллә Майк Гонсалесмы?

— Минеңсә, улар икеһе лә бер-береһенә торошло.

— Ә донъяла иң шәп балыҡсы — һин.

— Юҡ, мин үҙемдән оҫтараҡ балыҡсыларҙы беләм инем.

— Que va!* — тине малай ғәжәпләнеп. — Ер йөҙөндә яҡшы балыҡсы күп, бына тигәндәре лә барҙыр. Әммә һинең кеүегеге бер ҡайҙа ла юҡ.

— Рәхмәт. Мине шулай ҙурлауыңа шатмын. Тик миңә артыҡ ҙур балыҡ ҡаба күрмәһен, юҡһа, был уйыңдың үҙгәреүе бар.

— Әгәр ҙә элекке көсөң ҡалған булһа, донъяла һин еңә алмаҫлыҡ балыҡ юҡтыр.

— Бәлки көсөм үҙем уйлағанға ҡарағанда кәмерәктер. Әммә минең оһолом бар, түҙемлегем дә етерлек.

— Инде һин ятып йоҡла, иртәгәгә тиклем көс йый. Ә мин һауыт-һабаны алып барам.

— Ярар. Тыныс йоҡо. Иртәгә һине үҙем уятырмын.

— Һин минең өсөн уятҡыс сәғәт кеүек, — тине малай.

— Ә минең уятыусым — ҡартлыҡ. Ни өсөн ҡарттар шулай иртә уяна? Ҡалған көндәре оҙаҡҡараҡ һуҙылһын өсөнмө?

— Белмәйем, — тине малай. — Тик шуны ғына әйтә алам: йәштәр оҙаҡ та, тыныс та йоҡлай.

— Уныһын мин хәтерләйем, — тине ҡарт. — Һине ваҡытында уятырмын.

— Ниңәлер теге хужамдың уятҡанын яратмайым. Әйтерһең, минең унан берәй яғым кәм.

— Аңлайым.

— Тыныс йоҡо, Сантьяго.

Малай китте. Улар ут ҡабыҙмай ғына ашағайны. Ҡараңғыла ҡарт салбарын сисеп төрҙө, эсенә гәзитен тыҡты ла мендәр урынына баш аҫтына һалды. Унан карауаттағы ҡаҡ пружинаға түшәлгән иҫке гәзит өҫтөнә ятып, одеялын бөркәнде.

Ул шунда уҡ йоҡоға талды. Төшөнә үҫмер сағында күргән Африканың алтын төҫлө ҡомло яр буйҙары инде. Күҙ сағылдырырлыҡ ап-аҡ һайлыҡтар, текә ҡаялар, бейек ҡоңғорт тауҙар күрҙе. Ул төн һайын шулай төшөндә Африка ярҙарына барып сыға, океан тулҡындарының шаулай-шаулай урындағы халыҡтың кәмәләрен ярға ҡағыуын күрә, караптағы һумала менән сүс еҫен тоя, Африканың иртәнге ел килтергән эҫе тынын һулай.

* Que va! *(исп.)* — Һин нимә!

Ғәҙәттә бына ошо һулыш килеү менән ул уяна ла малайҙы уятырға китә. Әммә бөгөн уға Африка еҫе бик иртә килгәндәй тойолдо. Ул быныӊ төштә икәнен аӊланы һәм диӊгеҙ ситенән аҡ ҡая таштарыныӊ һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә күтәрелеүен, унан Ҡанар утрауҙарыныӊ гавань һәм бухталарын күрер өсөн йоҡоһон дауам итте.

Хәҙер уныӊ төшөнә дауылдар ҙа, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ҙур балыҡтар ҙа, көрәшеү-көс һынашыуҙар ҙа, ҡатыны ла инмәй ине инде. Хәҙер ул алыҫ илдәрҙе, эӊер ҡараӊғылығында яр буйында бесәй балаларылай уйнап ятҡан арыҫлан көтөйҙәрен генә күрә. Ҡарт уларҙы малайҙы яратҡан кеүек ярата. Тик малай үҙе бер ваҡытта ла уныӊ төшөнә кермәй ине.

Ҡарт йоҡоһонан ҡапыл ғына уянды ла асыҡ ҡалған ишектән айға ҡараны. Баш аҫтындағы салбарын алып кейҙе.

Ишек алдына сыҡҡас йомошон атҡарҙы ла, малайҙы уятырға тип, тар юлдан өҫкә менеп китте. Иртәнге һалҡында бер аҙ өшөттөрә, тик ҡарт быныӊ тиҙҙән уҙасағын, ишкәккә ултырғас, бөтөнләй йылынасағын белә.

Малай торған йорттоӊ ишеге асыҡ ине. Ҡарт яланаяҡ йомшаҡ ҡына баҫып өйгә инде. Малай алғы бүлмәлә карауатта йоҡлай. Ҡарт айҙыӊ зәғиф яҡтыһында уны тиҙ шәйләне. Йомшаҡ ҡына итеп аяғынан тотто ла уяныи салҡан әйләнгәнсе ебәрмәне. Ҡарт уға баш ҡаҡты. Малай, ултырғыстағы салбарын алып, ултырған ерҙән кейә башланы.

Ҡарт ишек алдына сыҡты, малай уға эйәрҙе. Ҡарт һаман ныҡлап уяна алмаған малайҙы яурынынан ҡосаҡланы:

— Ҡисер мине, — тине.

— Que va! — тип яуапланы малай. — Ир кешенеӊ яҙмышы шулай инде. Нишләйһеӊ.

Улар аҫҡа, ҡарттыӊ аласығына юл тотто. Ҡараӊғы булыуға ҡарамаҫтан, юлда кәмәләренеӊ мачталарын күтәргән кешеләр байтаҡ ине.

Аласыҡҡа төшкәс, малай ҡармаҡ ептәре һалынған кәрзинде, гарпун-багорҙарҙы алды, ҡарт елкән уралған мачтаны яурынына һалды.

— Кофе эсәһеӊме? — тип һораны малай.

— Тәүҙә кәрәк-ярaҡты кәмәгә һалайыҡ, шунан эсербеҙ.

Улар балыҡсылар өсөн бик иртә асыла торған бәләкәй кафела кәнсир ҡалайҙан кофе эсте.

— Һәйбәт йоҡланыңмы, Сантьяго? — тип һораны малай. Йоҡоһонан һаман буленгеһе килмәһә лә, ул бөтөнләй тиерлек уянғайны инде.

— Бик яҡшы, Манолин. Бөгөн юлым уңырына ышанам.

— Мин дә, — тине малай. — Хәҙер мин сардина менән маймыстарыңды алып киләм. Минең хужа кәрәк-ярaҡтарын үҙе төшөрә. Әйберҙәренә башҡалар тейгәнде яратмай.

— Ә беҙ һинең менән улай түгел. Мин һиңә биш йәшеңдән алып ҡорамалдарҙы йөрөтөргә рөхсәт иттем.

— Беләм, — тине малай. — Көтөп тор, мин хәҙер киләм. Тағы кофе эс. Беҙгә бында үтескә бирәләр.

Малай, ваҡ таштар өҫтөнән яланаяҡ атлап, емгә тигән балыҡтарын алырға һыуытҡысҡа китте.

Ҡарт ашыҡмай ғына кофе эсә. Уға бөгөн бүтән ашарға тура килмәйәсәк, шуға күрә кофены туйғансы эсергә кәрәк. Ҡарт ашау-эсеү менән маташыуҙан күптән ялҡҡан. Шуға ла диңгеҙгә ризыҡ алып сыҡмай. Кәмә моронона һыулы шешә ҡуя — кискә тиклем уға шул етә.

Малай, сардиналарҙы һәм гәзиткә төрөлгән емләгес балыҡтарҙы тотоп, кире килде.

Балыҡсылар аяҡ аҫтарындағы ваҡ таштарҙы шаптырҙатып ҡоя-ҡоя һуҡмаҡ буйлап яр ситенә төштө. Яр буйына төшөп еткәс, ҡарт менән малай кәмәнең башын күтәрә-күтәрә һыуға этте.

— Уңыш теләйем һиңә, Сантьяго.

— Һиңә лә.

Ҡарт ишкәктең элмәктәрен ишкәк сөйө тимерҙәренә электерҙе лә, алға иңкәйә төшөп, ҡараңғыла кәмәһен сығара башланы. Башҡа һай ерҙәрҙән дә кәмәләр берәм-берәм диңгеҙгә сыҡты. Ай тауҙар артына байығанлыҡтан, ҡарт уларҙы күрмәне, ишкәктәрҙең шапылдауын ғына асыҡ ишетте.

Ваҡыт-ваҡыт әле бер, әле икенсе кәмәлә һөйләшкән тауыштар яңғырай. Әммә кәмәләрҙең күбеһендә тынлыҡ хө-

көм һөрә һәм ишкәктәрҙең сәпелдәүе генә ишетелә. Оҙаҡ та үтмәне, диңгеҙ ҡултығынан сыҡҡан кәмәләр төрлөһө төрлө яҡҡа һибелде һәм һәр балыҡсы, үҙе ҡайҙа балыҡ осратырға өмөт итһә, шунда йүнәлде.

Ҡарт бөгөн алдан уҡ алыҫҡараҡ китергә ҡарар иткәйне, ер еҫтәрен артта ҡалдырып, кәмәһен океандың иртәнге саф һулышына табан тотто. Балыҡсылар «Бөйөк ҡоҙоҡ» тип атаған ерҙән уҙғанда, тәрәндә диңгеҙ үҫемлектәренең ялтырауын күрҙе. Был урында океан ҡапыл тәрәнәйеп, төбө ете сажинға* етә, һәм һыу ағымы, океан төбөнөң текә ярҙарына бәрелеп, көслө өйрөлтмәк барлыҡҡа килтерә. Бында креветкаларҙың һәм ваҡ балыҡтарҙың ҙур-ҙур көтөүҙәре, ә иң тәрән ерендә иһә ҡайһы берҙә каракатицалар йыйыла. Төндә улар һыу өҫтөнә сыға һәм ашарға эҙләнеп йөрөгән балыҡтарға ем була.

Ҡараңғы булһа ла, ҡарт таң яҡынайыуын һиҙҙе, ишкәк ишкәндә ара-тирә зырылдаған тауыштар ишетелде — был осар балыҡтарҙың, һыуҙан сығып, үткер ҡанаттары менән һауа һыҙғыртып кәмә тирәһенән ҡасыуы ине. Ҡартҡа осар балыҡтар бик оҡшай — океанда саҡта улар ҡарттың иң яҡын дуҫтары. Ә ҡоштарҙы, бигерәк тә бер туҡтауһыҙ аҙыҡ эҙләп тә, бер ни ҙә таба алмаған кескәй генә диңгеҙ ҡарлуғастарын, ул ысын күңелдән ҡыҙғана. «Ҡош яҙмышы беҙҙекенә ҡарағанда ла ауырыраҡ; ҡоҙғон менән бөркөт кеүек көслө ҡоштарҙы иҫәпкә алмағанда. Бик йыш рәхимһеҙ ҡыланған океан өҫтөндә осоп йөрөгән ул ҡарлуғастарҙы Аллаһы тәғәлә ни өсөн былай ярҙамһыҙ һәм көсһөҙ итеп яратты икән? Дөрөҫ, океан мәрхәмәтле һәм гүзәл, тик ҡайһы берҙә ул шул тиклем аяуһыҙ булып китә. Ризыҡ эҙләп сума-сума, көсһөҙ, ҡайғылы тауыш менән сырҡылдашып диңгеҙ өҫтөнән осоп йөрөгән бәләкәй ҡоштарға бигерәк ауырға тура килә».

Уйында ғына ул диңгеҙҙе һәр ваҡыт яратып испандар кеүек la mar тип атай. Ә бит ҡайһы берәүҙәр диңгеҙҙе ятһа ла, уны күберәк ҡатын-ҡыҙ тураһында һөйләгән кеүек яманлап һөйләй. Ҡалҡыуыс урынына буй ҡулланған һәм акула бауы-

* Диңгеҙ сажины тураһында һүҙ бара.

ры ҡиммәт саҡта һатып алған моторлы кәмәләрендә йөрөгән йәшерәк балыҡсылар диңгеҙҙе ир енесендә кеүек күреп *el mar* тип атай. Уны ҙур киңлек, көндәш итеп, хатта ҡайһы ваҡытта дошман күреп һөйләйҙәр. Ҡарт иһә һәр ваҡыт диңгеҙҙе ҡатын-ҡыҙ кеүек хөрмәт итә. Диңгеҙ бит нәҡ ҡатын-ҡыҙ кеүек, һиңә ҙур байлыҡтар бирә, йә бөтөнләй кире ҡаға, ә ҡайһы ваҡыт артығыраҡ шашып, уйламайынса әллә ниҙәр ҡылып ташлай икән — нишләмәк кәрәк, уның тәбиғәте шундай инде. «Күктәге ай диңгеҙҙе ҡатын-ҡыҙ кеүек тулҡынландыра», — тип фекер йөрөтә ҡарт.

Ул һалмаҡ ҡына ишә, сөнки океандың өҫтө, ағым өйрөлтмәк яһаған урындарынан башҡаһы, тип-тигеҙ. Ҡарт эшенең өстән бер өлөшөн ағымға тапшырҙы. Таң һыҙылғанда ул яр буйынан үҙе фараз иткәнгә ҡарағанда байтаҡ алыҫҡараҡ киткәнен күрҙе.

«Аҙна буйы тәрән урындарҙа йөрөнөм, бер нимә лә тота алманым, — тип уйланы ҡарт. — Бөгөн бонито менән альбакоре көтөүҙәре йөрөгән ерҙә бәхетемде һынап ҡарайым әле. Бәлки, шунда ҙур балыҡ йөрөйҙөр?»

Яҡтырып та өлгөрмәгәйне, ул иһә емләгән ҡармаҡтарын ырғытып ағым ыңғайына яй ғына йөҙә ине инде. Ҡармаҡтарҙың береһе ҡырҡ сажин, икенсеһе етмеш биш, ә өсөнсөһө менән дүртенсеһе йөҙ һәм йөҙ ҙә егерме биш сажин тәрәнлегенә төштө.

Ем итеп кейҙерелгән балыҡтар баштүбән тора, ҡармаҡтың үҙәге балыҡтың эсенән үтеп сыҡҡан һәм өҫтән еп менән бәйләп ҡуйылған. Ҡорос ҡармаҡтың бөгөлөп киткән урынынан үткер теленә тиклем, күҙе аша үткәрелеп, ваҡ сардиналар теҙелгән, ҡармаҡ гирлянда кеүек булған. Ҙур балыҡ ҡармаҡҡа яҡынайыу менән тәмле емдең еҫен һиҙер ҙә уны ауыҙ итеп ҡарамай ҡалмаҫ кеүек ине. Малай уға яңы тотолған ике тунец балығы биргәйне. Ҡарт улар менән иң оҙон епле ҡармаҡтарҙы емләне, ә ҡалған икеһенә ҙур зәңгәр макрель менән һары умбрица кейҙерҙе. Ҡарт уларҙы үткән юлы бер тапҡыр файҙаланғайны инде, ләкин ем балыҡтары һаман тере кеүек, өҫтәүенә, сардиналар ҙа һаплағас, теләһә ниндәй балыҡты ҡыҙыҡтыра

алырлыҡ булып тойола. Ҙур ғына ҡәләм йыуанлығындағы ҡармаҡ бауы беше ҡармаҡ сыбығына бәйләнгән. Балыҡ емгә ҡағылыу менән, ҡармаҡ сыбығы һыуға бөгөләсәк. Бауҙың икенсе осо ҡырҡ сажинлы тағы бер йомғаҡҡа тоташҡан. Ә ул йомғаҡты, кәрәк булһа, кәмәләге икенсе йомғаҡҡа бәйләргә була. Әгәр ҡармаҡҡа ҙур балыҡ ҡапһа, уны өс йөҙ сажиндан да күберәккә ебәреп була ине.

Хәҙер ҡарттың күҙе ҡармаҡ сыбығында: кәмә ситенә табан бөгөлмәйме, ҡармаҡ ептәре һыуға тура ғына батҡанмы тип ҡарай, ә үҙе аҡрын ғына ишә. Бөтөнләй яҡтырҙы, бына-бына ҡояш сығырға тейеш.

Иртәнге ҡояш диңгеҙ ситенән үҙенең нурҙарын һибеү менән, ҡарт башҡа кәмәләрҙе лә шәйләп алды: улар ағымдың бөтә киңлеге буйынса һыуға бата биреп ултыра, әммә барыһы ла ярға яҡыныраҡ ине. Офоҡ ситенән әкрен генә ҡояш күтәрелде. Уның нурҙары һыу өҫтөндә төрлө төҫкә инеп сағыла башланы. Ә ҡояш бөтөнләй күтәрелгәс, был нурҙар һыуҙа сағылып, туп-тура күҙгә бәрә ине. Ҡарт, һыуға ҡарамаҫҡа тырышып, ҡармаҡ бауы батҡан урында диңгеҙҙең ҡараңғы төбөнә текәлде. Уның ҡармаҡ бауы һәр саҡ һыуға башҡа балыҡсыларҙыҡы менән сағыштырғанда тураҡ бата һәм ем балыҡты төрлө тәрәнлектә, тап тәғәйенләнгән урында көтә. Ә бүтән балыҡсыларҙың ҡармаҡтары һыу ағымы менән ауышып, йөҙ сажинға самалап һалынһа ла, күп ваҡыт алтмыш сажинда ғына була.

«Ә мин, — тип уйланы ҡарт, — ҡармаҡтарымды һәр ваҡыт йәтеш ырғытам. Һуңғы ваҡытта ырыҫым ғына юҡ. Шулай ҙа, кем белә, бәлки, бөгөн бәхет йылмайыр. Юлың гел генә уңып торһа, яҡшы, әлбиттә. Әммә мин үҙ эшемдә теүәллекте яратам. Ә инде бәхет килһә, мин уға һәр ваҡыт әҙермен».

Ҡояш сыҡҡанға ике сәғәт уҙҙы. Көнсығышҡа ҡарауы үтә ҡыйын түгел ине инде. Хәҙер ҡарт өс кенә кәмә күрә; улары ла һыуға бөтөнләй иңеп, яр буйында ғына торалар кеүек.

«Ғүмерем буйы иртәнге ҡояш күҙемде ҡырҡты, — тип уйланы ҡарт. — Шулай ҙа яҡшы күрәм. Хатта киске ҡояшҡа

туп-тура ҡарай алам, күҙ алдымда ҡара таптар һикерешмәй. Ә бит кис көнө ҡояш көслөрәк яҡтырта. Тик бына иртәнге ҡояш күҙемде нығыраҡ ауырттыра».

Шул саҡ ул үҙенән алдараҡ, ҡара оҙон ҡанаттарын йәйеп, күктә өйөрөлгән фрегат ҡошто абайланы. Ҡош ҡанаттарын артҡа ташлап, ҡапыл һыу өҫтөнә йомолдо ла, яңынан һауаға күтәрелеп, әйләнә башланы.

— Тикмәгә осмай, — тип һөйләнеп ҡуйҙы ҡарт. — Табышын аңдый.

Ҡарт, һалмаҡ ҡына ишеп, ҡош өйөрөлгән яҡҡа йүнәлде. Ул һыуҙағы ҡармаҡ бауҙарының текә торошон мөмкин тиклем үҙгәртмәҫкә тырышты. Шулай ҙа уның кәмәһе һыу ағымына ҡарағанда ҡыҙыуыраҡ бара башланы. Ҡарт барыһын да еренә еткереп эшләһә лә, кәмә хәҙер ҡошто күргәнгә тиклемгенән аҙ ғына булһа ла ҡыҙыулағайны.

Фрегат өҫкә күтәрелде, киң ҡанаттарын йәйеп, йәнә баш өҫтөндә әйләнә башланы. Унан ҡапыл һыуға ташланды. Шул мәлде һыуҙан осар балыҡ атылып сыҡты ла диңгеҙ өҫтөнән зырылдап кәйелеп китте.

— Макрель, — тип ҡысҡырып ҡуйҙы ҡарт. — Ҙур алтын макрель.

Ул ишкәктәрен һыуҙан сығарҙы ла кәмә моронондағы таҡта аҫтынан ҡармаҡ бауы алды. Уның бер осона тимер сыбыҡ менән бәләкәс кенә ҡармаҡ тағылғайны. Ҡарт шуға сардина кәптереп һыуға ташланы, икенсе осон ҡойроҡтағы божраға бәйләне. Икенсе ҡармаҡҡа ла ем һаплап, уны ураулы килеш күләгәлә, таҡта аҫтында ҡалдырҙы. Унан яңынан ишкәктәренә тотоноп, һыу өҫтөндә генә осоп йөрөүсе оҙон ҡанатлы ҡара ҡошто күҙәтә башланы.

Ҡош, ҡанаттарын арҡаһына һуҙып, һыуға сумды һәм шунда уҡ кире сыҡты, ҡанаттарын ашыға-ашыға ҡағып, осар балыҡты баҫтырырға кереште. Нәҡ шул ваҡытта ҡарт диңгеҙ һыуының күбекләнеп урғылыуын күрҙе — был осар балыҡты тоторға маташыусы алтын макрель ине. Макрель, осар балыҡтың юлына арҡыры төшөр өсөн, ҙур тиҙлек менән уның һыуға килеп төшәсәк еренә ашыға ине.



*Фрегат өҫкә күтәрелде, киң ҡанаттарын йәйеп, йәнә баш өҫтөндә әйләнә башланы.*

«Был тирәлә макрель көтөүе менән йөрөй, ахырыһы, — тип уйланы ҡарт. — Улар бер-береһенән алыҫтараҡ йөҙә, шуға күрә балыҡтың ҡотолор сараһы юҡ тиерлек. Ҡоштоң иһә уны тоторға һис кенә лә әмәле юҡ, сөнки осар балыҡ уның өсөн артыҡ ҙур ҙа, етеҙ ҙә».

Ҡарт осар балыҡтың һыуҙа һикергәләгәнен, ә ҡоштоң уны ибәтәйһеҙ итеп тоторға маташҡанын күҙәтте. «Макрель минән китте, — тип уйланы ул. — Ул, үтә етеҙ йөҙөп, бик алыҫҡа һыпырта шул. Ҡем белә, бәлки, минең ҡармаҡҡа көтөүенән айырылған берәйһе килеп ҡабыр. Бәлки, был тирәлә миңә тигән ҙур балыҡ та йөҙөп йөрөйҙөр? Ҡайҙалыр бер ерҙә булырға тейеш бит инде ул».

Инде болоттар тау теҙмәләрен хәтерләтеп юғарыраҡ мендe, ә яр иһә оҙон йәшел таҫма кеүек күренә, ярҙан арыраҡ һоро-зәңгәр ҡалҡыулыҡтар күтәрелә. Диңгеҙ һыуы ҡуйы зәңгәр, хатта фиолет төҫкә инде. Ҡарт һыуға ҡарағас, ҡараңғы тәрәнлектә планктондың ҡыҙғылт төҫкә инеп ҡояш нурҙарында сағылыуын күрҙе. Ул ҡармаҡ ептәренең һыуға туп-тура батып китеүен күҙәтте, тирә-яҡта планктондың күплегенә ҡыуанды, сөнки был хәл балыҡ барлыҡҡа ишаралай ине. Ҡояш юғарыраҡ күтәрелгәс, нурҙарҙың һыуҙа ғәжәйеп сағылыуы ла, аҫылынып торған болоттарҙың торошо ла көндөң яҡшы буласағын күрһәтә ине. Әммә ҡош ҡайҙалыр алыҫҡа олаҡты.

Диңгеҙ өҫтөндә хәҙер ҡояшҡа уңып һарғайған көлтә-көлтә саргасс һыу үҫемлектәре һәм кәмә үткәндә ауып ҡалған португал физалияһының ҡояш нурында алһыу-зәңгәр булып йылҡылдаған һерелдек ҡыуыҡтарынан башҡа бер нәмә лә күренмәй ине. Бына физалия янтайҙы, шунан тағы элекке хәленә ҡайтты. Ул һабын ҡыуығы кеүек ҡояшта ялтырап күңелле йөҙә, ә артынан бер ярд самаһы һуҙылып ағыулы зәңгәрһыуал ҡармауыстары һөйрәлеп бара.

— Ах һин, кәнтәй! — тине ҡарт.

Ишкәктәрен еңелсә ишкән килеш ул тәрәнгә үрелеп ҡараны һәм унда һыуҙа һөйрәлгән ҡармауыстар төҫөнә ингән ваҡ балыҡтарҙы күрҙе. Улар әлеге ҡармауыстар араһынан ҡыуыҡ күләгәһе ышығында йөҙә. Физалияның ағыуы уларға

зыян итмәй. Әгәр шул лайлалы ҡармауыстар ҡармаҡ ебенә йәбешеп, балыҡ тартып сығарғанда ҡулға тейһә, кеше шунда уҡ ағыулана. Ҡулдар терһәккә тиклем йәрәхәтләнеп, сыбыртҡы менән һыҙырылған кеүек һыҙлай башлай.

Йәйғор кеүек емелдәгән ҡыуыҡтар ифрат матур. Әммә диңгеҙҙә уларҙан да мәкерле ғәләмәт юҡтыр. Ҡарт шул физалия ҡыуыҡтарын ҙур диңгеҙ гөбөргәйелдәре ашағанын күҙәтергә ярата. Физалияларҙы күреүгә, күҙҙәрен йомоп, ҡаршыларына киләләр ҙә, тотошлай, хатта ҡармауыстарын да ҡалдырмай, ашап бөтәләр. Ҡарт үҙе лә штормдан һуң яр буйында ҡалған физалия ҡыуыҡтарына һөйәлле үксәһе менән баҫа-баҫа шартлағандарына ҡолаҡ һалып йөрөргә ярата. Йәшел гөбөргәйелдәрҙе ҡарт етеҙлектәре һәм нәфислектәре өсөн яҡын күрә. Өҫтәүенә, улар ҡиммәт тә. Ә бына күҙҙәрен йомған килеш португал физалияларын ашаусы килбәтһеҙ һәм алйот биссаларҙы эшкә һанамай. Өҫтәре һары броня менән ҡапланған был гөбөргәйелдәр мөхәббәт эштәрендә лә сәйер була.

Гөбөргәйел ауларға оҙаҡ йылдар буйы йөрөһә лә, ҡартта уларға ҡарата бер ниндәй ҙә хөрәфәт тойғоһо юҡ. Балыҡсы уларҙы, хатта луты тип йөрөтөлгән һәм оҙонлоғо кәмә буйы, ауырлығы тоннаға еткән ҡалҡанһыҙ гөбөргәйелдәрҙе лә ҡыҙғана.

Ҡешеләрҙең күбеһе гөбөргәйелдәргә ҡарата рәхимһеҙ. Ә бит гөбөргәйелдең йөрәге, йәнлектең үҙен үлтереп, киҫәктәргә тураҡлағандан һуң да бик оҙаҡ тибә. «Минең дә бит шундай уҡ йөрәк, — тип уйлай ҡарт. — Ҡулдарым менән аяҡтарым иһә шул тиклем уларҙың тәпәйҙәренә оҡшаған». Ҡарт ҙур балыҡ ҡаба торған сентябрь, октябрь айҙарына көс йыйып ҡалыр өсөн тотош май буйы гөбөргәйел йомортҡаһы ашай. Шулай уҡ ул көн һайын берәр сынаяҡ акуланың бауыр майын эсә. Был май күпселек балыҡсылар үҙҙәренең ҡаралтыларын ҡуя торған һарайҙа ҙур мискәлә тора. Уны теләгән бер балыҡсы эсә ала. Күбеһе майҙың тәмен ауыҙға алғыһыҙ, уҡшытҡыс тиһә лә, уны эсеү таңдан тороп балыҡҡа сығыуға ҡарағанда еңелерәк инде. Өҫтәүенә, бауыр майы һалҡын тейеүҙән һаҡлай, күҙгә бик файҙалы.

Ҡарт күккә ҡараны ла фрегаттың йәнә диңгеҙ өҫтөндә өйөрөлгәнен күрҙе.

— Балыҡ тапҡандыр, — тип ҡуйҙы ҡарт.

Диңгеҙ өҫтө көҙгө кеүек тигеҙ һәм тын. Унда бер генә осар балыҡ та, ваҡ балыҡтар ҙа шәйләнмәй. Әммә ҡарт ҙур булмаған тунецтың ҡапыл ырғылып сығыуын һәм, осоп барған ыңғайға баштүбән әйләнеп, йәнә диңгеҙгә сумыуын абайланы.

Ҡояшта ялтлап күренгән әлеге тунец артынан башҡалары ла күренде. Улар, төрлөһө төрлө яҡҡа ырғышып, һыу өҫтөн ап-аҡ күбеккә әйләндерҙе. Һикереп-һикереп ваҡ балыҡты аулайҙар, төрлө яҡтан әйләнешеп, уларҙы алға ҡыуалайҙар.

«Әгәр ҙә үтә тиҙ йөҙмәһәләр, мин уларҙың тотош көтөүен ҡыуып етә алам, — тип уйлап ҡуйҙы ҡарт, аҡ күбектәргә ҡарап. Ә ҡош иһә, сума һалып, тунецтарҙан ҡурҡып өҫкә ҡалҡырға мәжбүр булған ваҡ балыҡтарҙы эләктерә.

— Ҡош — балыҡсыға тоғро ярҙамсы, — тип ҡуйҙы ҡарт.

Шул саҡ кәмәнең ҡойроғонан төшөрөлгән ҡыҫҡа ҡармаҡ ебе тартылып ҡуйҙы. Уның бер осона ҡарт аяғы менән баҫып ултыра ине. Балыҡсы, ишкәктәрен ташлап, епкә тотондо, уны үҙенә һауа башланы. Ептең тартылыуына ҡарап, ҡармаҡҡа бәләкәс кенә тунец ҡапҡанын самаланы. Балыҡ ҡармаҡ ебен ҡапыл-ҡапыл тартып тирбәтте. Ниһайәт, һыуҙан балыҡтың зәңгәр һырты менән алтынланып йылҡылдаған кәүҙәһе күренде. Ҡарт уны шунда уҡ кәмәгә тартып сығарҙы. Бына ул ҡойолған ҡурғаш кеүек тығыҙ тәнле бәләкәс кенә тунец, мәғәнәһеҙ күҙҙәрен аҡайтып, ҡойроғо менән һуғыла-һуғыла йәшәү менән хушлаша. Ҡарт, йәлләп, балыҡтың башына ҡундырҙы ла аяғы менән кәмә ҡойроғондағы таҡта аҫтына этте.

— Альбакоре, — тип ҡуйҙы ҡарт. — Ун фунт тирәһе булыр, һис тә кәм түгел.

Ул ҡасандан бирле үҙ-үҙе менән һөйләшә башлағанын хәтерләмәй инде. Элегерәк, яңғыҙ ҡалғанда, ул йырлай торғайны. Елкәнле карапта төнгө вахтала торғанда ла, гөбөргәйелгә ауға йөрөгәндә лә йырланы. Үҙ-үҙе менән, малай китеп, япа-яңғыҙ тороп ҡалғас, ҡысҡырып һөйләшә башлағандыр, моғайын. Хәҙер иҫләмәй ҙә. Дөрөҫ, улар бергә булғанда ла күп һөйләш-

мәй торғайнылар, йә төндә, йә көн боҙолғанда эшһеҙлектән генә гәп һаталар. Диңгеҙҙә, ғөмүмән, кәрәкһеҙгә һүҙ буткаһы бешереү хупланмай. Ҡарт үҙе лә быны килештермәй, йоланы ла хөрмәт итә. Ә бына хәҙер үҙенең фекерҙәрен ҡысҡырып ҡат-ҡат ҡабатлай — уларҙан бер кемгә лә зыян юҡ таһа.

— Минең былай үҙ алдыма һөйләнгәнемдә берәйһе ишетһә, был тилергән икән, тиер ине, — тине ҡарт. — Тик мин аҡылымдан яҙмағанмын икән, кемдең ни эше бар? Байҙарға рәхәт: уларҙың кәмәһендә һөйләшергә һәм бейсбол тураһында яңылыҡтар һөйләргә радиолары бар.

«Хәҙер бейсбол тураһында уйлар ваҡыт түгел, — тине ҡарт үҙенә. — Хәҙер бер нәмә тураһында ғына уйларға кәрәк. Мин нимә өсөн тыуғанмын, шул турала. Ҡайҙалыр, ошо тунецтарҙың көтөүе янында, бәлки, минең ҙур балығым йөҙәләр. Мин әле ни бары бер альбакоре ҡаптырҙым, уныһы ла көтөүенән айырылып ҡалғайны. Ә улар ярҙан ныҡ алыҫта һунар итә, үҙҙәре бик шәп йөҙә. Бөгөн миңә ни генә осрамаһын, барыһы ла етеҙ йөҙә, үҙҙәре бөтәһе лә төньяҡ-көнсығышҡа табан ағыла. Бәлки, тәүлектең был мәлендә гел шулай булалыр, ә, бәлки, көн боҙолоуғалыр, мин генә ундай һынамышты белмәйемдер?»

Ҡартҡа инде ярҙың йәшел юлағы күренмәй; алыҫта зәңгәр тауҙарҙың баштары ғына шәйләнә, улары бындай алыҫлыҡтан аҡ булып күренә. Улар өҫтөндәге болоттар ҙа бейек ҡарлы тауҙарға оҡшаған. Диңгеҙ ҡараңғыланып китте. Ҡояш нурҙары һыуға үтеп инмәй хәҙер. Тәрәндә емелдәгән планктондың бихисап осҡондары һүнеп, ҡояш нуры һыу өҫтөндә йәйғор кеүек емелдәй. Ҡарт бына шул нурҙарҙы, тәрәнгә киткән ҡармаҡ бауҙарын ғына күрҙе. Ә тәрәнлек был тирәлә бер милгә яҡын ине.

Тунецтар көтөүе (балыҡсылар балыҡтарҙың был төрөнөң барыһын да тунец тип йөрөтә, тик баҙарға алып сыҡҡанда йәки ем өсөн һатҡанда ғына үҙ исеме менән атай) яңынан аҫҡа китте. Нәҡ баш өҫтөнә тиерлек күтәрелгән ҡояш ҡыҙҙырғандан-ҡыҙҙыра. Ҡарт яурынының бешкәнен тойҙо. Ишкән саҡта тир юлаҡ-юлаҡ булып арҡаһынан ағып төшә.

«Ағым буйлап китергә лә, ваҡытында уяныр өсөн епте бармаҡҡа бәйләп, йоҡлап алырға булыр ине, — тип уйланы ҡарт. — Тик бөгөн һикһән бишенсе көн, шуға күрә уяу булырға кәрәк».

Тап шул мәлдә ул йәшел ҡармаҡ сыбығының береһе тертләп киткәнен һәм һыуға эйелгәнен абайланы.

— Бына, — тине ул. — Бына! — Һәм, кәмәне һелкетмәҫкә тырышып, һыуҙан ишкәктәрҙе тартып алды.

Ҡарт ынтылып ҡармаҡ бауын уң ҡулының баш һәм имән бармағы менән һаҡ ҡына тотоп ҡараны. Ләкин әле епте һис кем тартмай ҙа, йолҡмай ҙа. Шул саҡ бау яңынан тартылды. Был юлы көсһөҙ, йомшаҡ ҡына тартылһа ла, ҡарт быны серен яҡшы аңлай: йөҙ сажин тәрәнлектә йөҙгән марлин ҡармаҡ остарына ҡаҙалған сардиналарҙы ашай ине.

Ҡарт, һул ҡулы менән үрелеп, бауҙы һабынан ысҡындырҙы. Хәҙер бау уның бармаҡтары араһынан, балыҡҡа һиҙҙермәйенсә, еңел генә һауыла ала ине.

«Ярҙан шул тиклем алыҫта, өҫтәүенә, йылдың был миҙгелендә. Балыҡ, моғайын, ғәләмәт ҙурҙыр. Аша, балыҡ, аша. Аша инде, зинһар. Ҡисә генә тотолған сардиналар. Ә һиңә һыуҙа, алты йөҙ фут тәрәнлегендә, шул тиклем һыуыҡ, ҡараңғы. Ҡараңғыла тағы бер әйлән дә, артҡа боролоп, аша!»

Ул еңелсә генә тартҡанды тойҙо, унан көслөрәген — күрәһең, сардиналарҙың береһен ҡармаҡтан йолҡоп алыу ҡыйынраҡ булды. Шунан барыһы ла тынды.

— Йә инде, тағы бер урап кил, — тине ҡарт. — Еҫкә. Улар шул тиклем тәмле. Сардинанан һуң тунецты ауыҙ итерһең! Ул шундай тығыҙ, һалҡын ғына, ҡапһаң — телеңде йоторлоҡ. Тартынма, балыҡ, рәхәтләнеп аша.

Ҡармаҡ бауын бармаҡтары араһына ҡыҫтырған килеш, ул балыҡтың сирткәнен көттө. Мәгәр башҡа ҡармаҡтарҙы ла иҫенән сығарманы. Сөнки елле балыҡтың береһенән икенсеһенә күсеүе ихтимал ине. Ҡапыл ул ҡармаҡ бауының һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә булып яңынан дерелдәүен тойҙо.

— Сиртә бит, — тип мығырҙаны ҡарт ауыҙ эсенән генә. — Сиртә, хоҙай уға һаулыҡ бирһен!

Тик балыҡ сиртмәне. Ҡитеп юғалды. Ҡармаҡ бауы хәрәкәтһеҙ ҡалды.

— Уның былай ғына китеүе мөмкин түгел, — тине ҡарт. — Хоҙай үҙе шаһит: ул алыҫ китмәҫ. Бер әйләнер ҙә яңынан килер. Бәлки, уның быға тиклем ҡармаҡҡа ҡапҡаны барҙыр ҙа шуны хәтерләйҙер.

Шул саҡ ул тағы бауҙың еңелсә дерелдәүен тойҙо, күңеленә рәхәт булып китте.

— Әйттем бит урап ҡына килергә булғандыр тип, — тине ҡарт. — Ә хәҙер ул сиртәсәк!

Балыҡтың бауҙы әкрен генә тирбәтеүе ҡартҡа кинәнес бирҙе. Ҡапыл ул бауҙың осонда ғәжәп ауырлыҡ һиҙҙе. Ул, ғәйәт дәү балыҡтың ауырлығын тойоп, бауҙы иркенә ҡуйҙы. Бау тәрәнгә ағыла ла ағыла. Запас йомғаҡ та һүтелә лә һүтелә. Ҡарт, бармаҡ араһынан шыуған бауҙы бушаҡ ҡына итеп тотһа ла, ҡармаҡҡа эләккән балыҡтың иҫ киткес ауыр икәнен һиҙә.

— Үәт балыҡ! — тип һөйләнде ул. — Ҡармаҡты ирене менән эләктерҙе лә хәҙер уны ситкә алып китергә теләй.

«Юҡ, ул барыбер боролоп, ҡармаҡты йотоп ебәрәсәк», — тине ҡарт. Быныһын балыҡҡа күҙ тейҙермәҫ өсөн күңеленән генә әйтте. Ул балыҡтың ни тиклем ҙур икәнен тойҙо, хатта уның, ҡараңғы һыу эсендә ауыҙына тунецты арҡыры ҡапҡан килеш, йөҙөп ситкә китеүен күҙ алдына килтерҙе. Бау шыуыуҙан бер тынға туҡталып торҙо. Ләкин ундағы ауырлыҡ ҡартҡа барыбер һиҙелә ине. Унан балыҡ йәнә тартыла башланы һәм ҡарт яңынан бауҙы ысҡындырҙы. Бармағы менән саҡ ҡына тотоңҡорағайны, бау кинәт тартылып, батып китте.

— Ҡапты, буғай, — тине ҡарт. — Әйҙә хәҙер туйғансы мөнйөһөн инде.

Ул, бармаҡ араһынан шыуған бауҙы үҙ көйөнә ҡуйып, һул ҡулы менән ике запас йомғаҡтың осон икенсе ҡармаҡтың запас йомғаҡтарына ялғаны. Инде барыһы ла әҙер ине. Балыҡ эләккән бауҙан тыш, ҡырҡар сажинлы йәнә өс йомғаҡ бау бар ине.

— Тартынма, балыҡ, — тине ул. — Тағы бер аҙ сәйнә.

«Ҡармаҡтың ырғағы йөрәгенә ҡаҙалып үлтерерлек итеп аша, — тип уйланы ул. — Үҙең ҡалҡып сыҡ та миңә гарпун менән сәнсергә ирек бир. Һин әҙерме? Туйғансы ашаныңмы?»

— Тәүәккәлләргә ваҡыт, — тине ул, тауышын күтәрә биреп. Ҡармаҡ бауын ҡуш ҡуллап ҡапыл ғына үҙенә табан тартты. Бер ярд самаһы сығарғас, беләк көсө менән түгел, бөтөн кәүҙә мускулдарын егеп, ҡармаҡ бауын әле уң, әле һул ҡулы менән һөйрәне.

Тырышыуы бушҡа булды. Балыҡ әкрен генә китеүен белде. Ҡарт уны бер дюймға ла яҡынайта алманы. Ул ҙур балыҡтар тотоу өсөн тәғәйенләнгән йыуан һәм ныҡ бауҙы иңенә һалып, йән көсөнә һөйрәй башланы, хатта ныҡ тартылған бау өҫтөндә ваҡ тамсылар сәсрәп, зыңғылдап ҡуйҙы. Ҡарт, бауҙы һаман ебәрмәйенсә, тубыҡтарын кәмәнең ултырғысына терәп, бөтөн кәүҙәһе менән артҡа тартылды. Кәмә, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә урынынан ҡуҙғалып, төньяҡ-көнбайышҡа табан китә башланы. Ә балыҡ ҡарттың кәмәһен тартып барған килеш йөҙҙө лә йөҙҙө. Башҡа ҡармаҡтар һыуҙа булһа ла, ҡарт бер ни ҙә ҡыла алмай ине инде.

— Янымда малай булһасы! — тине ул. — Был балыҡ кәмәне былай тартып йөрөтмәҫ, мине буксирға әйләндермәҫ ине. Ҡармаҡ бауын кәмәгә генә бәйләп ҡуйып була-булыуын. Тик балыҡтың ысҡынып китеүе бар. Бауҙы ныҡ итеп тоторға ла кәрәк саҡта ебәрергә тейешмен. Ярай әле балыҡ бик аҫҡа китмәйенсә бер тәрәнлектә генә йөҙөп бара... Әгәр ҙә ул аҫҡа китеп, шунда йән бирһә, нишләрһең? Ярар, күҙ күрер әле. Йән биргәнгә йүн биргән!

Ул, ҡармаҡ бауын яурынына һалған килеш, бауҙың һыуға аушайып батҡанын, кәмәнең әкрен генә төньяҡ-көнбайышҡа йүнәлгәнен күҙәтте.

«Балыҡ былай оҙаҡ түҙә алмаҫ, йән бирер, — тип уйланы ҡарт. — Мәңге шулай йөҙә алмай бит инде ул».

Тик дүрт сәғәт үтте, ә балыҡ һаман бирешмәне, бер ниндәй арыу-талыуҙы белмәй кәмәне диңгеҙ эсенә һөйрәне, ә ҡармаҡ бауын яурынына һалған ҡарт, аяҡтарын кәмә ултырғысына терәгән килеш, ултыра бирҙе.

— Ул ҡапҡанда төш ине, хәҙер кис етеп килә, ә минең әлегә тиклем уны күргәнем юҡ, — тине ҡарт.

Балыҡ эләкмәҫ борон уҡ ул һалам эшләпәһен маңлайына ныҡ батырып кейгәйне. Хәҙер эшләпә ауырттырып, тиреһен ҡырҡып алып барған кеүек. Ҡарт сарсап киткәнен тойҙо. Бауҙы һелкетмәҫ өсөн һаҡ ҡына тубыҡланып, кәмәнең моронона табан мүкәйләне. Үрелеп, һыңар ҡулы менән таҡта аҫтындағы шешәне алды ла, тығынын асып, бер нисә йотом һыу эсте. Унан моронға һөйәлеп ял итеп алды. Ул елкән төрөлгән мачтаға ултырған килеш, көсөн һаҡлар өсөн бер нимә лә уйламаҫҡа тырышып, хәл йыйҙы.

Бер аҙҙан ҡарт артына боролоп ҡараны ла ерҙең бөтөнләй күҙҙән юғалғанын абайланы. «Зарар юҡ, — тип уйланы ул. — Гавананың уттарына ҡарап ишһәм, һәр саҡ ҡайта алам. Ҡояш байырға ике сәғәт ҡалды, бәлки, уға тиклем балыҡ та өҫкә сығыр. Юҡ икән, бәлки, ай яҡтыһында ҡалҡыр. Кем белә, бәлки, таң атҡас ҡына. Ҡулым тартышмай, көсөм етерлек. Ҡармаҡты мин түгел, ул йотҡан бит әле. Тик кәмәне шул тиклем һөйрәрлек ниндәй балыҡ һуң был?! Күрәһең, тимерсыбыҡты ныҡ ҡыҫҡан. Һыңар күҙ менән генә күрһәң ине үҙен, ул саҡта ниндәй ғифрит менән эш иткәнемде белер инем».

Ҡарттың йондоҙҙарға ҡарап самалауынса, балыҡ, йүнәлешен үҙгәртмәйенсә, төнө буйы йөҙҙө. Ҡояш байығас, һалҡынайтты. Арҡаһындағы, яурынындағы һәм ҡарт аяҡтарындағы тирҙәре кипкәс, балыҡсы өшөй башланы. Емләү өсөн алынған балыҡтарҙың йәшниген ҡаплаған тоҡто көндөҙ ҡояшҡа киптерергә түшәгәйне. Эңер төшкәс, шуны алып, муйынына ураны ла, иңендәге ҡармаҡ ебе аҫтынан һаҡ ҡына үткәреп, арҡаһын япты. Хәҙер ҡармаҡ ебе лә баяғы кеүек киҫеп бармай. Кәмә моронона һөйәлеберәк ултырғас, хатта яйлы ғына булып киткән кеүек тойолдо. Дөрөҫөн әйткәндә, был хәлендә саҡ ҡына уңайлыраҡ ине, әммә ҡарт үҙ-үҙен, ифрат йәтеш, тип ышандырырға тырышты.

«Мин балыҡты бер нимә лә эшләтә алмайым, тик ул да минең менән бер ни ҡыла алмай, — тине ҡарт. — Тора-бара берәй хәйлә генә уйлап тапмаһа».

Бер тапҡыр ул кәмә сите аша кесе ярау итергә һәм йондоҙҙарға ҡарап йүнәлеште билдәләргә аяғүрә баҫты. Ҡармаҡ ебе унын яурыны аша туп-тура һыуға төшкән нескә нур кеүек кенә күренә. Хәҙер кәмә яйыраҡ бара һәм, күрәһең, ағым уларҙы көнсығышҡа алып китә ине. «Гавана уттары юғалғас, тимәк, беҙ башлыса көнсығышҡа барабыҙ, — тип уйланы ҡарт. — Әгәр балыҡ йүнәлешен үҙгәртмәгән булһа, уттарҙы бер нисә сәғәт күрер инем әле. Ҡыҙыҡ, бөгөнгө матчтар нисек бөттө икән? Кәмәлә радиоң булһа ине лә бит!» Ләкин шунда уҡ уйҙарын бүлде: «Юҡ-бар уйлама. Эшеңде генә бел. Берәй алйотлоҡ ҡылып ташламау хаҡында уйла». Әммә үҙе ишетерлек итеп:

— Йәл, малай эргәмдә түгел. Ул миңә ярҙам да итер, барыһын да үҙ күҙҙәре менән күрер ҙә ине, — тип ҡуйҙы.

«Ҡарт көнөндә кеше яңғыҙ ҡалырға тейеш түгел, — тип уйланы ул. — Тик нишләйһең, был — ҡотолғоһоҙ. Теге тунецты еҫләнгәнсе ашап ҡуйырға кәрәк. Миңә бит көстө юғалтырға ярамай. Хатта асыҡтырмаһа ла, уны иртәнсәк ашап ҡуйырға кәрәк булыр. Тик был хаҡта онотмаҫҡа ине», — тип ҡабатланы ул үҙ-үҙенә.

Төндә кәмә янына ике диңгеҙ сусҡаһы йөҙөп килде. Ҡарт ата сусҡаның ауыр мышнауын һәм инәһенең көрһөнгән кеүегерәк ауаз сығарып ҡуйыуын ишетте.

— Уларға рәхәт, — тине ҡарт. — Уйнайҙар, шаяралар, бер-береһен яраталар. Улар ҙа бит, осар балыҡтар кеүек, беҙгә туған.

Ҡармағына ҡапҡан ҙур балыҡ йәл булып китте ҡартҡа. «Мөғжизә тимә инде был балыҡты! Уның был донъяла нисәмә йыл йәшәгәнен тик бер Алла ғына белә. Миңә әле бер ваҡытта ла бындай ҡеүәтле балыҡ эләккәне юҡ ине. Уйлап ҡына ҡара: үҙен ҡайһылай сәйер тота ул! Бәлки, бик аҡыллы булғанға ырғымайҙыр ҙа. Әгәр ҙә һикерһә, йәки бар көсөнә алға ынтылһа, мине һәләк итер ине. Ә, бәлки, уның ҡармаҡты беренсе тапҡыр ғына ҡармауы түгелдер. Шуға күрә йәшәү өсөн ошолай көрәшеүҙең ҡулайыраҡ икәнен аңлай торғандыр. Үҙенә ҡаршы бер генә кеше торғанын, уныһының да ҡартайған әҙәм икәнен

ул ҡайҙан белһен? Ә бит үҙе ниндәй ҙур балыҡ, ите лә тәмле булһа, күпме табыш килтерәсәк. Ул ем балыҡты хас та ата балыҡ кеүек эләктерҙе, әле кәмәне ата балыҡ шикелле тартып бара, минең менән дә ата балыҡтай ҡурҡыуһыҙ көрәшә. Ҡыҙыҡ, ул нимә эшләргә кәрәклеген аңлаймы, әллә минең ише үк башы һуҡҡан яҡҡа йөҙәме?»

Ҡарт ҡасандыр ҡармағына инә марлинды ҡаптырғанын иҫенә төшөрҙө. Ата балыҡ һәр ваҡыт аҙыҡҡа инә балыҡты алдан ебәрә. Ҡармаҡҡа эләккәс, инә балыҡ, ҡурҡышынан аяуһыҙ көрәшкә ташланып, үрле-ҡырлы һикерә башланы һәм бик тиҙ хәлдән тайҙы. Ә ата балыҡ бер ҡайҙа ла китмәйенсә, һаман диңгеҙ өҫтөндә, уның тирәһендә, өйөрөлдө. Ҡарт ата балыҡтың яҡын килеп, үҙенең ураҡҡа оҡшаған һәм шулай уҡ хәтәр үткер ҡойроғо менән ҡармаҡ ебен өҙә ҡырҡыуынан ҡурҡты. Шуға күрә инә марлинды багор менән эләктерә һалып, ҡылыс кеүек осло, ҡытыршы ситле ауыҙын шаҡара тотоп, башын, күҙгөнөң артын буяй торған амальгама төҫөнә ингәнсе, күҫәк менән төйҙө лә төйҙө. Ата марлин улар малай менән икәүләшеп инә балыҡты кәмәгә тартып мендергәндә лә яҡын-тирәлә уралды. Ҡарт ҡармаҡ ебен урап алып гарпунын әҙерләй башлағас, ата балыҡ тормош юлдашы менән ниҙәр булғанын белер өсөн кәмә эргәһендә бейеккә ырғыны ла тәрәнгә сумды. Һыуҙа уның асыҡ сирень төҫөндәге ҡанаттары, күкрәк йөҙгөстәре һәм арҡаһындағы таҫмалары ап-асыҡ күренде. Ҡарт уның матурлығын һәм тоғролоғон оҙаҡ онота алманы. Ата марлин бит үҙенең тормош юлдашын һуңғы минутына тиклем ташламаны. «Бынан да ҡайғылыраҡ хәлде минең диңгеҙҙә ошоғаса бер ҙә күргәнем булманы, — тип уйланды ҡарт. — Малайға иһә бик болоҡһоу булып китте. Беҙ инә марлиндан ғәфү үтендек тә тиҙерәк уның эсен ярып таҙартыу яғын ҡараныҡ».

— Малайҙың эргәмдә булмауы йәл, — тип ҡуйҙы ҡарт. Ул кәмә моронондағы йомро таҡталарға йәтешләберәк терәлде. Ҡарт яурынын баҫып килгән бау аша туҡтауһыҙ үҙенең ниндәйҙер маҡсатына ынтылған бәһлеүән балыҡтың бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡеүәтен тойҙо.



*Ҡарт яурынын баҫып килгән бау аша туҡтауһыҙ үҙенең нин-дәйҙер маҡсатына ынтылған бәһлеүән балыҡтың бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡеүәтен тойҙо.*

— Бер уйлаһаң, иҫең китер, минең мәкерем арҡаһында уға үҙенең ҡарарын үҙгәртергә тура килде!

«Уның яҙмышы һәр төрлө тоҙаҡтан, алдатҡыстарҙан һәм кешеләрҙең мәкеренән алыҫта, океандың ҡараңғы тәрәнлегендә йәшәү ине. Ә минең яҙмышым япа-яңғыҙ уның артынан барыу һәм бер кеше лә үтеп инмәгән тәрәнлектә уны табыу булды. Бер кеше лә үтеп инмәгән ерҙән... Хәҙер беҙ төш мәленән алып бер-беребеҙгә бәйле. Миңә лә, уға ла ярҙам итеүсе юҡ».

«Бәлки, миңә балыҡсы булырға кәрәкмәгәндер? — тип уйланы ул. — Әммә мин шуның өсөн тыуғанмын бит. Яҡтырғас, онотмай ғына тунецты ашарға кәрәк».

Ҡояш сығыр алдынан уның артындағы ҡармаҡтарҙың береһенә балыҡ ҡапты. Ул ҡармаҡ сыбығының һынғанын һәм əптең һыуға шыуып төшә башлағанын ишетте. Ҡараңғыла бысағын ҡынынан сығарҙы ла, балыҡтың бөтә ауырлығын һул яурынына күсереп, артҡа ҡайырылды; төпкә һауыла барған епте киҫеп ебәрҙе. Унан, эргәһендәге бауын киҫеп, остарын запас йомғаҡтарға бәйләне. Ҡарт быларҙың барыһын да йәтеш кенә итеп һыңар ҡулы менән эшләне, төйөндәрен, йомғаҡҡа аяғы менән баҫып, төйнәне. Хәҙер киҫкән ептән ҡалған йомғаҡтар менән балыҡ ҡапҡан епте лә иҫәпләгәндә, запаста барлығы алты йомғаҡ булып, улар барыһы ла бер-береһенә нығ итеп бәйләнгәйне. «Яҡтырғас, ҡырҡ сажинға төшөргән ҡармаҡ ебен дә алырға тырышырмын, уны киҫеп, запас йомғаҡтарҙы тоташтырып бәйләрмен. Дөрөҫ, ҡармаҡ менән батырмыстарҙан, өҫтәүенә, ике йөҙ сажин каталон ебенән ҡолаҡ ҡағам инде. Ярар, уларын яңынан да алып булыр. Ә бына ҡармаҡҡа башҡа берәй балыҡ ҡабып, быныһын өҙһә, кем миңә яңы балыҡ таба?! Әле нимә ҡапҡайны икән? Бәлки, марлиндыр, бәлки, ҡылыс балыҡ йәки акулалыр. Хатта һиҙеп тә өлгөрмәнем, тиҙерәк ҡотола һалырға кәрәк ине».

— Их, янымда малай булһасы! — тип ҡуйҙы ул тағы үҙ-үҙенә.

«Тик малай юҡ, — тип уйланы. — Һин бары үҙеңә генә иҫәп тота алаһың. Шуға күрә, әле ҡараңғы булһа ла, теге һыу-

ҙа ҡалған һуңғы ҡармағыңды ла алырға тырышһаң ине. Уны киҫеп, запас йомғаҡтарҙы бер-береһенә бәйләргә кәрәк».

Уйлағанын эшләне. Ҡараңғыла маташыу ҡыйын ине, бер тапҡыр балыҡ епте шул тиклем нык тартты, ҡарт, йөҙтүбән йығылып, күҙе аҫтындараҡ сикәһен сыйып ебәрҙе. Яңағы буйлап ҡан аҡты, тик эйәккә етмәйенсә уҡмашып туҡтаны. Ә ҡарт яңынан кәмәнең моронона шыуышты һәм ял итер өсөн һөйәлеберәк ултырҙы. Ул арҡаһындағы тоҡто рәтләне, иңендәге бауҙы яңы, ауыртмағанырак ергә күсерҙе һәм, балыҡтың ниндәй көс менән тартыуын белер өсөн, бауҙың бөтә ауырлығын яурынына һалды ла, кәмәнең тиҙлеген билдәләргә теләп, ҡулын һыуға тыҡты.

«Ҡыҙыҡ, ни өсөн ул былай ҡапыл тартты икән? — тип уйланы ҡарт. — Ҡармаҡ тағылған тимерсыбыҡ, моғайын, арҡаһындағы ҙур түңгәктән шыуып төшкәндер. Уның арҡаһы минеке кеүек ауыртмай шул. Ярар, ни тиклем ҙур булһа ла, кәмәне һөйрәп йөрөтә алмаҫ әле! Хәҙер мин үҙемә зыян итерҙәй нәмәләрҙән ҡотолоп бөттөм, запас бауҙарым күп — балыҡсыға тағы ни кәрәк?»

— Балыҡ, — тип шым ғына өндәште ҡарт, — мин иҫән саҡта барыбер ҡотола алмаҫһың.

«Шулай уҡ мин дә һинән ҡотола алмам, ахыры», — тип уйланы ул һәм яҡтырғанды көтөргә булды.

Таңға табан һалҡынайтты. Ҡарт, саҡ ҡына булһа ла йылынырға теләп, таҡталарға һыйынды: «Ул түҙгәнде, мин дә түҙермен».

Таң яҡтыһы, диңгеҙ тәрәнлегенә үтеп, кереш кеүек тартылған ҡармаҡ бауын яҡтыртты. Кәмә туҡтауһыҙ алға йөҙә. Бер аҙҙан офоҡта ҡояштың бер ҡырыйы күренде һәм үҙенең тәүге нурын ҡарттың уң яурынына төшөрҙө.

— Ул төньяҡҡа йөҙә, — тине ҡарт. — Ә ағым беҙҙе, моғайын, көнсығышҡа алып киткәндер. Ағым ыңғайына боролһон ине, был уның арығанын белгертер ине.

Әммә ҡояш юғарыраҡ күтәрелгәс, ҡарт балыҡтың әле арырға йыйынмағанын күрҙе. Бер нәмәгә һөйөндө: ҡармаҡ ебенең ауышлығын самалап, ул балыҡтың өҫтәрәк йөҙөүен

төшөндө. Әлбиттә, был уның мотлаҡ өҫкә күтәрелеүен аңлатмай, шулай ҙа сығыуы ла ихтимал.

— Йә раббым, өҫкә сығырға мәжбүр ит! — тине ҡарт. — Уны еңер өсөн бауым етерлек.

«Нығыраҡ тартһам, бәлки, ауыртыуға сыҙашмай һикереп тә сығыр, — тип фекерләне ҡарт. — Инде яҡтырҙы бит, әйҙә һикерһен. Ул саҡта һыртындағы ҡыуыҡтарына һауа тулыр ҙа, үлер өсөн төпкә төшөп китә алмаҫ ине».

Ул ҡармаҡ ебен нығыраҡ тартырға маташып ҡараны, тик бау былай ҙа ныҡ тартылғайны. Уны нығыраҡ тартмаҡ булып артҡа аушайғайны, еп, ауырттырып, арыҡ арҡаһын ҡырҡып ингәс, ҡарт былай ныҡышыуынан бер ниндәй ҙә фәтеүә сыҡмаҫына инанды.

«Тик һелкетә тартырға ярамай, — тип уйланы ул. — Сөнки ҡапыл тартҡан һайын ҡармаҡ һалған яра киңәйә. Әгәр балыҡ кинәт һикерһә, ҡармаҡтың бөтөнләй ысҡыныуы бар. Ярай, һәр хәлдә, ҡояш яҡтыһында үҙемде яҡшыраҡ тоям. Әлегә күҙгә төшөп тә йонсотмай».

Ҡармаҡ ебенә һарғылт ылымыҡтар сорналды, быға ҡарт ҡыуанды ғына, сөнки улар кәмәнең барышын әкренәйтә. Төндә ялтырап күренгән һыу үҫемлектәре ине былар.

— Балыҡ, — тине ҡарт, — мин һине яратам һәм ихтирам итәм. Шулай ҙа мин һине кискә тиклем үлтерәсәкмен!

«Булдыра алырмын тип өмөтләнәйек!» — тип уйланы ул.

Төньяҡтан кәмәгә бәләкәй генә ҡошсоҡ яҡынлашты. Ул һыу өҫтөнән генә оса ине. Ҡарт уның арығанын аңланы.

Ҡошсоҡ кәмә ҡойроғона ял итергә ултырҙы. Унан ҡарттың баш осонда өйөрөлдө лә ҡармаҡ ебенә ҡунды.

— Нисә йәш һиңә? — тип һораны унан ҡарт. — Моғайын, был һинең тәүге сәйәхәтеңдер әле?

Ҡош яуап урынына ҡартҡа ҡараны. Ептең ныҡлығын тикшерергә хәле юҡ ине, нәфис тәпәйҙәре менән йәбешкән килеш сайҡалып ҡына торҙо.

— Ҡурҡма, бау ныҡ тартылған, — тип ышандырҙы уны ҡарт. — Хатта үтә ныҡ. Елһеҙ төндә һиңә был тиклем арырға ярамаҫ ине. Их, элекке ҡоштар юҡ шул хәҙер!

«Ә бына ҡарсығалар диңгеҙгә һеҙҙең ҡаршыға сыға, — тип уйланы ул. Тик ҡошҡа был турала әйтмәне, хәйер, бисара уны барыбер аңламаҫ ине. — Ярай, ҡарсығалар хаҡында тиҙҙән үҙе бөтәһен дә белер».

— Яҡшылап ял ит, кескәй ҡошсоҡ, — тине ул. — Унан ярға ос та, һәр кеше, һәр ҡош йәки балыҡ кеүек үк, йәшәү өсөн көрәш.

Ҡош менән һөйләшеү унының күңелен күтәреп ебәрҙе, юғиһә, төн сыҡҡансы ағас кеүек ҡатҡан арҡаһы ныҡлап ауырта башлағайны.

— Әгәр теләһәң, минең янда әҙерәк бул әле, ҡошсоҡ, — тине ул. — Йәл дә ул, тик еңелсә генә ел сығып торһа ла, һине, елкән ҡуйып, ҡороға алып сыға алмайым. Сөнки бындағы дуҫымды ташлап булмай.

Шул саҡ балыҡ ҡапыл тартылды ла ҡартты моронға табан йыҡты. Әгәр ҙә ул, кәмә ситенә терәлеп, ҡулындағы бауҙы бушатып өлгөрмәһә, һыуға ла һөйрәп төшөргән булыр ине.

Бау тартылыу менән, ҡошсоҡ осоп китте, ҡарт хатта унының нисек юҡҡа сыҡҡанын да абайламай ҡалды. Ул уң ҡулы менән епте ҡапшап ҡарағайны, усынан ҡан аҡҡанын күрҙе.

— Балыҡтың да яраһы ауыртҡандыр, күрәһең, — тине ҡарт һәм, юлын үҙгәртеп булмаҫмы тип, бауҙы тартып ҡараны. Бауҙы мөмкин тиклем ныҡ тартып, элеккесә яурынына һалды.

— Һиңә ҡыйынмы, балыҡ? — тип һораны ул. — Хоҙай шаһит, минең үҙемә лә еңел түгел.

Ул күҙе менән ҡошсоҡто эҙләне, сөнки берәйһе менән һөйләшкеһе килде. Тик ҡошсоҡ бер ерҙә лә юҡ ине.

«Минең янда бигерәк аҙ булдың шул, — тип уйланы ҡарт. — Тик һин осҡан тарафта ел күпкә көслөрәк, хәҙер ул ҡоро ергә еткәнсе иҫәсәк. Нишләп мин был балыҡҡа шулай ҡапыл тартылып ҡулымды яраларға ирек бирҙем һуң әле? Моғайын, бөтөнләй алйып барамдыр. Бәлки, ҡошсоҡҡа ҡарап донъямды онотҡанмындыр. Хәҙер мин тик эш тураһында ғына уйлаясаҡмын. Көс өҫтәлһен өсөн тунецты ашап алайым».

— Их, малай менән тоҙҙоң булмауы йәл, — тип ҡуйҙы ҡарт.

Ул балыҡтың ауырлығын һул иңенә күсерҙе лә, һаҡ ҡына тубыҡланып, ҡулын һыуға тыҡты. Ҡаршы ағымдың ҡулды йыуғанын, бармағынан аҡҡан ҡандың йәйелгәнен тойҙо.

— Хәҙер балыҡ күпкә яйыраҡ йөҙә, — тип ҡуйҙы.

Ҡулын тоҙло һыуҙа оҙағыраҡ тоторға теләһә лә, балыҡтың йәнә ҡапыл ырғылыуынан ҡурҡты; шуның өсөн аяғына баҫты, епте арҡаһы менән тартып, ҡулын ҡояшҡа тотто. Ҡармаҡ бауы уң ҡулының һум итен ярып ебәргән икән. Бер урындан ғына, тик эштә иң кәрәк ере йәрәхәтләнгән. Ҡулдары бөгөн бер тапҡыр ғына кәрәкмәйәсәк әле, шуның өсөн әле баштан уҡ йәрәхәтләнеүенә ҡарттың кәйефе ҡырылды.

— Ә хәҙер, — тине ул ҡулы кипкәс, — мин тунецты ашарға тейешмен. Уны багор менән тартып алып, һәйбәтләп тамаҡ туйҙырырға...

Ҡарт, йәнә теҙләнеп, багор менән ҡойроҡтағы тунецты эҙләп тапты. Бауҙың йомғаҡтарына ҡағылмаҫҡа тырышып, тунецты үҙенә табан тартты.

Ҙур балыҡтың бар ауырлығын һул яурынына күсереп, кәмә ситенә һул ҡулы менән таянып, тунецты ҡармаҡтан ысҡындырҙы ла багорҙы урынына һалды. Балыҡты ике тубығы араһына ҡыҫып, һырт буйынан телем-телем итеп ҡарағусҡыл-ҡыҙғылт ит киҫеп алды. Алты киҫәк ҡырҡып алғандан һуң, уларҙы кәмәнең морононидағы таҡтаға теҙҙе, бысаҡты салбарына һөрттө, ҡойроғонан эләктереп, тунецтың һөлдәһен диңгеҙгә ырғытты.

— Мин быны бер юлы ашап бөтә алмам, ахыры, — тип киҫәктең береһен уртаға ҡырҡты.

Ҡарт балыҡтың һаман да бирешмәйенсә, ҡеүәтле тартыуын тойҙо, ә һул ҡулы бөтөнләй ойоно. Ауыр бауҙы тартышҡан кеүек ныҡ итеп ҡыҫып барған ҡулына ҡарт йәне көйөп ҡарап ҡуйҙы.

— Шул да булдымы ҡул, валлаһи! — тине ул. — Ярай, бик теләйһең икән, ойо әйҙә, ҡош тәпейе кеүек күгәреп ҡат. Тик был һиңә барыбер ярҙам итмәйәсәк.

«Аша, — тип уйланы ул ҡарайып торған һыуға һәм уға ҡырын төшкән бауға ҡарап, — ашаһаң ҡулыңа көс инер.

Унының ни ғәйебе бар? Нисә сәғәт инде балыкты тотоп бараһың. Тик һин унан аҙаҡҡа тиклем айырылмаясаҡһың. Шулай булғас, аша».

Ул бер киҫәк ит алып ауыҙына һалды ла яй ғына сәйнәй башланы. Тәме бик үк ытырғандырғыс түгел икән.

«Һәйбәт итеп сәйнә, — тип уйланы ул, — бер тамсы һуты ла әрәм булмаһын. Лимон менән ашағанда йәки, исмаһам, тоҙ һипкәндә насар булмаҫ ине лә бит».

— Йә, ҡул, үҙеңде нисек тояһың, ҡул? — тип һораны ул үлектеке кеүек ҡатып ҡалған ҡулынан. — Һинең хаҡыңа тағы бер киҫәк ашайым әле.

Ҡарт уртаға теленгән киҫәктең икенсе өлөшөн дә ашаны. Уны тырышып сәйнәне лә тиреһен төкөрҙө:

— Йә, нисек, ҡул? Әллә һин әлегә бер нимә лә тоймаһыңмы?

Тағы бер киҫәк алып ашаны.

«Был таҙа, һутлы балыҡ, — тип уйланы ул. — Ярай әле миңә макрель түгел, ә тунец эләккән. Макрель үтә баллы. Ә бының бөтөнләй тиерлек таты юҡ, үҙе һәйбәт һаҡланған. Әммә юҡ-барға мауығып, ҙур балыкты онотоорға ярамай. Исмаһам бер семтем генә тоҙ булһа икән. Был телемде ҡалдырһам, ҡояшта киберме, әллә һаҫырмы, белеп булмай. Шулай булғас, ас булмаһам да, хәҙер үк ашайым да ҡуяйым. Ҙур балыҡ үҙен тыныс, ипле тота. Тунецты ашап бөтһәм, барыһына ла әҙер булырмын».

— Түҙ инде, ҡул, — тип өндәште ул. — Күрәһеңме, һинең хаҡыңа тырышам.

«Ҙур балыҡты ла ашатып алырға кәрәк ине лә, — тип уйланы ул. — Ул да минең туғаным бит. Тик мин уны үлтерергә тейешмен, ә бының өсөн миңә көс кәрәк».

Ҡарт ашыҡмай ғына, тырышып-тырышып, тунец телемдәрен берәм-берәм ашап бөтөрҙө. Ҡулдарын салбарына һөртә-һөртә турайҙы.

— Үәт, — тине ул. — Хәҙер һиңә, ҡулым, һиңә әйтәм, епте ысҡындырһаң да була. Һинең йүләрлегең бөткәнгә тиклем, уны мин уң ҡулым менән дә тота алам.

Ул әлегә тиклем һул ҡулы тотоп килгән йыуан бауҙы һул аяғы менән ҡыҫты ла, балыҡтың ауырлығын арҡаһына күсереп, артҡа аушайҙы.

— Эй, хоҙайым, был көҙән йыйырыу үтә һалһын ине, — тине ул. — Балыҡтың башына нимә килерен кем белә.

«Әлегә тыныс күренә, — тип тә уйланы ул. — Уйлап эш итә. Тик нимә уйлай икән? Ә мин нимә эшләргә йыйынам? Мин үҙемдең ниәтемде уның ниәтенә яраҡлаштырырға тейеш булам, сөнки ул — ифрат ҙур. Әгәр ҙә ул өҫкә ҡалҡһа, уны үлтерә алам. Ә инде һаман тәрәндә ҡалһа? Ул саҡта мин дә уның менән ҡаласаҡмын».

Ул, көҙән йыйырған ҡулын салбарына ышҡып, бармаҡтарын яҙмаҡсы булды. Тик ҡулы хәрәкәтһеҙ ҡалды. «Бәлки, ҡояшҡа яҙылыр, — тип уйланы ул. — Бәлки, ашҡаҙан сей тунецты эшкәрткәс, иҫ белеп китер. Әгәр ҙә бик кәрәк булһа, мин уны нисек булһа ла эшләтәм инде. Тик хәҙергә көс ҡулланғым килмәй. Әйҙә ул үҙ ихтыяры менән яҙылһын. Төндә бөтә ҡармаҡ бауҙарын ҡырҡып, бер-береһенә ялғаған саҡта уға минән нык ҡына эләкте шул».

Ҡарт алыҫҡа ҡараны ла үҙенең ни тиклем яңғыҙ икәнен аңланы. Әммә ул ҡараңғы тәрәнлектә төрлө төҫкә инеп сағылған ҡояш нурҙарын, ҡырынайып аҫҡа киткән ҡармаҡ ебен һәм күҙгә кеүек диңгеҙ өҫтөнөң сәйер тулҡыныуын күрҙе. Тиҙҙән пассат еле башланасағын белдереп, күк йөҙөндә болоттар ҡуйырҙы. Ҡарт, алға ҡарап, һыу өҫтөнән осоп барған ҡыр өйрәктәрен күрҙе. Уларҙың көтөүе бер аҙға ғына күҙҙән юғалып торҙо ла, тағы ла асығыраҡ булып, яңынан килеп сыҡты. Шул саҡта ҡарт әҙәм балаһының диңгеҙҙә бер ваҡытта ла яңғыҙ булмағанын төшөндө.

Ҡайһы бер кешеләрҙең асыҡ диңгеҙҙә бәләкәй кәмәлә яңғыҙ ҡалыуҙан ҡурҡҡаны хаҡында уйланы ла, был ҡурҡыу бары тик ҡапыл көн боҙолоп китә торған айҙарҙа ғына урынлы, тигән фекергә килде. Тик әле дауыллы миҙгел, ә дауыл булмаған саҡта был мәл — йылдың иң матур ваҡыты.

Дауыл яҡынайыуын диңгеҙҙә, уның күктә күренгән билдәләренә ҡарап, әллә нисә көн алдан белергә була. Ерҙә уны

күрмәйҙәр, тип уйлай ҡарт, сөнки нимәгә ҡарарға белмәйҙәр. Ҡорола болоттар ҙа үҙенә башҡа бит. Әлегә дауыл көтәһе юҡ әле. Ҡарт күккә ҡараны һәм үҙе яратҡан туңдырмаға оҡшаш һәм мамыҡтай ҡабарып ағылған аҡ болоттарҙы күрҙе. Ә улар-ҙан да өҫтәрәк ҡаурый һымаҡ болоттар киҫәк-киҫәк булып аҫылынып тора ине.

— Оҙаҡламай еңел бриз күтәреләсәк, — тине ҡарт. — Ә ел, балыҡ, һиңә ҡарағанда миңә ҡулайыраҡ.

Һул ҡулы һаман көҙән йыйырған килеш ҡалды, әммә ҡарт уны яйлап ҡына ҡыбырҙата ала ине инде.

«Ҡулымды көҙән йыйырғанды йәнем һөймәй, — тип уйланы ул. — Үҙ тәнең үҙеңә этлек яһаһын әле! Балыҡҡа ағыуланып, кеше алдында ҡоҫа йәки эсең китә башлаһа, ныҡ уңайһыҙ була. Әммә яңғыҙ сағыңда көҙән йыйырһа (ҡарт уны күңеленән генә calambre тип атаны) айырыуса хурлыҡ».

«Әгәр ҙә янымда малай булһа, — тип уйланы ул, — ойоған ҡулымды терһәктән суғына тиклем ыуыр ине. Ярай, былай ҙа иҫ белә башлар әле».

Һәм ҡапыл, ул үҙе ҡармаҡ ебенең ҡырынайыбыраҡ китеүен абайлағанға тиклем үк, уң ҡулы ептең бушаңҡырауын һиҙҙе. Ҡарт кәүҙәһен артҡа ташланы ла һул ҡулы менән йән көсөнә янбашына һуға башланы, шул уҡ ваҡытта ҡармаҡ ебенең яй ғына өҫкә күтәрелеүен күрҙе.

— Күтәрелә, — тине ул. — Йәле, ҡул, яҙыл! Йә инде!

Ҡармаҡ ебе оҙонайғандан-оҙоная барҙы һәм, ниһайәт, кәмә алдында океан өҫтө ҡабарынды ла балыҡ һыу өҫтөнә ҡалҡты.

Сыҡты ла сыҡты, хатта уның осо-ҡырыйы юҡтыр кеүек тойола башланы. Һыу арҡаһынан ташҡын кеүек булып шабырлап ағып төшә, ә ул ҡояшҡа йылҡылдап яна, башы менән арҡаһы ҡарағусҡыл-миләүшә төҫөндә, ә ян-яҡтарындағы буй-буй таҫмалары ҡояш нурында бик киң булып нәфис сирень төҫөндә күренә ине. Танау урынында бейсбол таяғы кеүек оҙон һәм рапира кеүек осло ҡылыс тырпайып тора.

Балыҡ һыу өҫтөнә бөтөн кәүҙәһе менән күтәрелде лә, оҫта йөҙөүсе кеүек, тауышһыҙ ғына ҡабат һыуға сумды. Ураҡҡа



*Балыҡ һыу өҫтөнә бөтөн кәүҙәһе менән күтәрелде лә, оҫта йөҙөүсе кеүек, тауышһыҙ ғына ҡабат һыуға сумды.*

оҡшаған дәү ҡойроғо тәрәнгә китеү менән, ҡармаҡ ебе, яңынан тартылып, тиҙ-тиҙ генә һауыла башланы.

— Ул минең кәмәмдән ике футҡа оҙонораҡ, — тине ҡарт.

Ҡармаҡ ебе тиҙ булһа ла үҙ яйы менән генә һүтелә, тимәк, балыҡ ҡурҡмаған. Ҡарт бауҙы ике ҡуллап бар көсөнә тартты, сөнки шулай ҡаршылыҡ күрһәтеп, тиҙлеген кәметә алмаһа, балыҡтың бөтә запас йомғаҡтарҙы һүтеп бөтөп, ысҡынып та китеүе ихтимал.

«Бигерәк дәү балыҡ икән! Мин уға үҙемдең көсөмдө танытырға тейешмен, — тип уйланы ҡарт. — Көсһөҙлөгөмдө тойоп, йән-фарманға китһә, минең менән ни теләй, шуны ҡыла алғанын аңлап ҡуймаһын. Уның урынында булһам, нимә булһа булыр, тип берәй нәмә шартлап өҙөлөп сыҡҡансы барыр ҙа барыр инем. Аллаға шөкөр, балыҡтар етеҙерәк һәм хуш күңеллерәк булһалар ҙа, үҙҙәрен үлтергән кешеләр кеүек аҡыллы түгелдәр».

Ҡарт үҙ ғүмерендә ҙур балыҡтарҙы күп күрҙе. Мең фунттан артығыраҡ тартҡандары ла осраштырҙы, ваҡытында үҙе лә шундай ике балыҡ ҡаптырҙы. Тик ул саҡта былай яңғыҙ түгел ине. Әле иһә ул һис ҡасан да күрмәгән, хатта ишетмәгән дәү балыҡҡа ныҡлап бәйләнгән килеш диңгеҙҙә япа-яңғыҙ, ә һул ҡулы һаман бөркөт тырнағы кеүек ҡатҡан килеш.

«Ҡулым яҙылыр, — тип уйланы ул. — Уң ҡулыма ярҙам итерлек кенә булһа ла иҫ белһә, еткән. Йәшәгән, ти, өс туған: балыҡ һәм ике ҡулым... Яҙылыр, мотлаҡ яҙылыр. Ойоуы ҡайһылай оят инде!»

Балыҡ йөҙөүен әкренәйтте лә әүәлге тиҙлеге менән бара башланы.

«Ҡыҙыҡ, ни өсөн ҡапыл өҫкә сығырға булды икән? — тип уйланы ҡарт. — Әйтерһең дә, миңә үҙенең ҡайһылай ҙур икәнен күрһәтер өсөн генә сығырға булған. Бына хәҙер беләм инде. Ҡыҙғаныс, тик мин үҙемдең ниндәйерәк кеше икәнемде күрһәтә алмайым. Хәйер, ул саҡта балыҡ минең көҙән йыйырған ҡулымды күрер ине. Ярай, әйҙә минең хаҡта һәйбәтерәк уйлаһын, ул саҡта мин дә яҡшыраҡ булырға тырышырмын. Әгәр ихтыяр көсөм менән зирәклегем үҙемдә

ҡалып, башҡа сифаттарҙы унан алырға мөмкин булһа, мин был минутта үҙем да балыҡ булырға риза булыр инем».

Ул кәмәнең йомро таҡтаһына һөйәлгән килеш, үҙен ғазаплаған ауыртыуға күнеп, тыныс ҡына ултыра бирҙе. Ә балыҡ ныҡышмал рәүештә алға йөҙҙө, кәмә лә ҡарағусҡыл диңгеҙ өҫтөнән әкрен генә барыуын дауам итте. Көнсығыштан иҫкән ел ваҡ тулҡындар күтәрҙе.

Төшкә табан ҡарттың һул ҡулы ла иҫ белә башланы.

— Хәҙер һиңә ҡыйынға тура киләсәк, балыҡ, — тине ул арҡаһындағы бауҙы яңы урынға күсереп.

Ҡармаҡ бауы арҡаһын уйып ҡырҡһа ла, ҡарт иғтибар итмәҫкә тырышты.

— Аллаға ышанмайым, — тине ул. — Әммә был балыҡты тотор өсөн ун тапҡыр «Тәңребеҙ» һәм шул тиклем үк «Изге Әсә» доғаһын уҡыйым. Әгәр ҙә уны ысынлап та тотһам, Ҡобрендағы Алла әсәһенә ғибәҙәткә барыр инем. Әйтеү итеп әйтәм.

Ҡарт доға уҡый башланы. Ваҡыт-ваҡыт ул үҙенең шул тиклем йонсоғанын һиҙә, һүҙҙәрҙе онота, шуға күрә, үҙҙәренән-үҙҙәре иҫкә төшһөн өсөн, доғаны тиҙерәк уҡырға тырышты.

— Изге Әсәбеҙ, һөйөн! Тәңребеҙ күңелебеҙҙе ҡотҡарыусыны тыуҙырырға мөмкинлек биргән. Амин! — Унан өҫтәне. — Изге Алла әсәһе, балыҡ үлһен тип доға ҡыл. Хатта ул бик аҫыл булһа ла.

Ауыртыу аҙыраҡ баҫылыу ғына түгел, бәлки көсәйә төшһә лә, доға уҡығас, еңелерәк булып китте. Ҡарт, кәмә моронондағы таҡтаға һөйәлеп, һул ҡулының бармаҡтарын бер асып, бер йомоп, күнекмә яһай башланы.

Ел яйлап ҡына көсәйә барыуға ҡарамаҫтан, ҡояш ҡурып алып бара.

— Бәләкәй ҡармаҡты тағы ла емләп һалырға тура килер, — тине ҡарт. — Әгәр балыҡ бөгөн төндә лә ҡалҡмаһа, миңә тағы ашарға кәрәк буласаҡ. Шешәлә һыу ҙа аҙ ғына ҡалған. Был тирәлә макрелдән башҡа нәмә ҡапмаҫтыр, моғайын. Тотҡас та ашаһам, ул тиклем үк тәмһеҙ булмаҫ. Төндә осар

балыҡ кәмәгә килеп төшһә, яҡшы булыр ине. Тик уны әүрәтер өсөн утым юҡ шул. Осар балыҡ — бына тигән ризыҡ. Эсен таҙаларға ла кәрәкмәй. Ә миңә хәҙер көстө һаҡларға кәрәк. Хоҙайым, уның шул тиклем ҙур икәнен мин ҡайҙан беләйем!.. Тик мин уны барыбер еңәсәкмен, — тине ҡарт. — Ни тиклем генә ғәйрәтле һәм мөһабәт булһа ла!

«Ғәҙел түгел-түгелен, — тип өҫтәне ул уйынан ғына, — әммә мин уға кешенең нимәгә һәләтле икәнен һәм ҡайһылай түҙемле булғанын иҫбат итәсәкмен».

— Мин ғәҙәти ҡарт түгелмен, тип малайға әйткәйнем бит. Хәҙер шуны иҫбатларға ваҡыт етте, — тине ул.

Уның быны мең ҡабат иҫбат иткәне бар. Булһа ни! Хәҙер шуны яңынан раҫларға кәрәк. Һәр ваҡыт иҫәп яңынан башлана: шуға күрә ҡарт, нимә генә эшләһә лә, элеккене иҫкә алып тормай.

«Йоҡлаһын ине ул, мин дә серем итер, төшөмдә арыҫландарҙы күрер инем, — тип уйланы ҡарт. — Ни өсөн арыҫландар күңелемдә иң матур хәтирә булып һаҡлана икән?»

— Һин күп уйланма, ҡартлас, — тине ул үҙенә. — Кәмәгә һөйәл дә тыныс ҡына ял ит. Бер нимә лә уйлама. Хәҙергә ҙур балыҡ тырыша, ә һин көсөңдө һаҡла.

Ҡояш көнбайышҡа һалыуланы, ә кәмә һаман әкрен генә алға бара. Көнсығыштан иҫкән ел уны ҡыуалай, ҡарт бауҙың арҡаһын ҡырҡҡанына түҙеп, тулҡындарҙа талғын ғына тирбәлеп бара.

Төштән һуң бер ваҡыт бау күтәрелә башлаған кеүегерәк булды. Әммә балыҡ сак ҡына өҫкәрәк ҡалҡып йөҙөүен дауам итте. Ҡояш хәҙер ҡарттың арҡаһын, һул яурынын һәм ҡулын ҡыҙҙырҙы. Шуға ҡарап ҡарт балыҡтың төньяҡ-көнсығышҡа боролоуын самаланы.

Балыҡты бер тапҡыр күргәс, ҡарт уның һыу аҫтында, күкрәгендәге фиолет төҫтәге йөҙгөстәрен ҡанат кеүек киң йәйеп, кеүәтле ҡойроғо менән ҡараңғылыкты телеп барғанын күҙ алдына килтерә ала. «Ҡыҙыҡ, ундай тәрәнлектә һәйбәт күрә микән? — тип уйланы ҡарт. — Уның күҙҙәре ҙур, ә бит ат, күҙҙәре күпкә бәләкәйерәк булһа ла, ҡараңғыла күрә. Ҡасан-

дыр мин дә ҡараңғыла һәйбәт күрә торғайным. Әлбиттә, дөм-ҡараңғыла түгел, шулай ҙа бесәй кеүек тиерлек».

Ҡояш йылыһы һәм бер туҡтауһыҙ күнегеүҙәр яһау үҙенекен итте: көҙән йыйырған ҡулы бөтөнләй яҙылды. Ҡарт, ептең ауырттырыуын саҡ ҡына булһа ла еңеләйтергә тырышып, арҡаһындағы мускулдарын ҡуҙғатып, балыҡтың ауырлығын һулғараҡ күсерҙе.

— Әгәр ҙә һин һаман да арымаһаң, — тип ҡуйҙы ул, — ысынлап та ғәжәйеп балыҡһың.

Ә ул үҙенең ҡот осҡос арығанын тойҙо, төн яҡынлығын шәйләне, шуға күрә башҡа нәмәләр тураһында уйларға тырышты. Күренекле бейсбол лигалары тураһында уйлай башланы. Уларҙы ҡарт, Gran Ligas тип йөрөтә ине. «Бөгөн Нью-Йорктың «Янки»ҙары Детройттың «Юлбарыҫ»тары менән уйнарға тейеш».

«Бына икенсе көн инде мин juegos* һөҙөмтәләрен белмәйем, — тип уйланы ул. — Әммә мин үҙемдең көсөмә ышанырға, бөйөк Ди Маджиоға лайыҡ булырға тейешлемен. Ул ниндәй генә эшкә тотонһа ла бына тигән итеп эшләй, хатта үксә һөйәгенә тоҙ ултырған булһа ла уйынын ташламай. Һөйәк һөйәле нимә ул? Un espuelo de hueso. Беҙ балыҡсыларҙа ул булмай. Һуғышсан әтәстең шпоры менән үксәгә ҡаҙаған кеүек ауырта микән? Мин ундай ауыртыуға ла, һуғышсан әтәстәр кеүек бер йәки хатта ике күҙем сыҡҡансы һуғышыуға ла сыҙамаҫ инем. Һоҡланғыс йәнлектәр һәм ҡоштар янында кеше әллә кем дә түгел инде. Ә мин әле тегендә — диңгеҙ тәрәнлегендә йөҙгән балыҡ булырға теләр инем».

— Эйе, тик акулалар һөжүм итмәһә, — тине ул. — Әгәр ҙә акулалар ташланһа инде, уны ла, мине лә Алла һаҡлаһын!

— Бөйөк Ди Маджио ла балыҡҡа һинең кеүек үк сат йәбешер ине, тип уйлайһыңмы? — тип һораны ул үҙенән.

— Эйе, ул нәҡ минең кеүек үк, хатта яҡшыраҡ та көрәшер ине, сөнки ул минән йәшерәк тә, көслөрәк тә. Өҫтәүенә, атаһы ла балыҡсы булған... Ә уның үксәһе ныҡ ауырта микән?

---

* Juegos *(исп.)* — спорт уйындары.

— Белмәйем, — тине ул үҙ-үҙенә. — Минең үксәмә тоҙ ултырғаны юҡ.

Ҡояш байығас, бер аҙ күңелен күтәрер өсөн, ҡасандыр Ҡасабланка тавернаһында Сьенфуэгостан килгән ҡеүәтле бер негр менән (ул портта иң көслө кеше һанала ине) көс һынашҡанын иҫенә төшөрҙө.

Улар, терһәктәрен аҡбур менән һыҙылған һыҙыҡҡа терәп, ҡулдарын бөкмәй, устарын усҡа ҡыҫып, тотош бер тәүлек буйы ултырҙылар. Һәр береһе икенсеһенең ҡулын өҫтәлгә йығырға тырышты. Тирә-яҡта, кем еңер, тип бәхәсләшәләр, кешеләр кәрәсин шәме һүрән генә яҡтыртҡан бүлмәгә инеп-сығып тора, ә ул негрҙың ҡулынан, терһәгенән һәм йөҙөнән бер секундҡа ла күҙен алмай. Тәүге һигеҙ сәғәт үткәс, судьялар йоҡлап алыр өсөн сәғәт һайын алмашына башланы. Көрәшселәрҙең икеһенең дә тырнаҡ аҫтарынан ҡан һарҡый, ә улар һаман бер-береһенең күҙенә, ҡулына һәм терһәгенә текләгән. Бәхәсләшкән кешеләр бүлмәгә бер инеп, бер сығып йөрөй, стена эргәһендәге бейек ултырғыстарға терәлешеп, көрәштең һөҙөмтәһен көтә. Асыҡ-зәңгәр төҫкә буялған ағас стеналарға шәмдән күләгәләр төшә. Негрҙың ифрат ҙур күләгәһе ел шәмде тирбәткән һайын ҡыбырҙап ҡуя.

Төнө буйы өҫтөнлөк әле береһенә, әле икенсеһенә күсте. Негрға ром эсерәләр, сигарет ҡаптыралар. Ром эсеп алғас, негр йән көсөнә тырышып ҡарай, хатта бер тапҡыр ҡарттың ҡулын бөгә башланы, тик өс дюймдан үткәрә алманы. Тик ҡарт (уны Сантьяго El Campeon* тип йөрөтәләр ине) ҡулын яңынан турайтты. Ошонан һуң уның был һәйбәт күңелле көслө негр егетен еңеренә шиге ҡалманы. Ә таң һыҙылғас, кешеләр судьянан, бер кем дә еңмәне, тип һөҙөмтә яһауын талап итә башланы. Сөнки күбеһенә Гавана күмер компанияһына күмер йәки шәкәр тоҡтары тейәр өсөн эшкә сығырға ваҡыт еткәйне. Судья аптырап, иңбаштарын йыйырып торған саҡта, ҡарт, ҡапыл бөтә ҡеүәтен йыйып, негрҙың ҡулын аҫҡа табан йыға башланы һәм ҡул һырты өҫтәлгә тейгәнсе туҡтаманы.

---

* El Campeon *(исп.)* — чемпион.

Көрәш йәкшәмбе көндө иртәнсәк башланды ла дүшәмбе иртәнсәк тамамланды. Әммә ҡарт еңеүгә эшселәр эшкә киткәнсе үк өлгәште.

Ошонан һуң бик оҙаҡ уны чемпион тип йөрөттөләр. Яҙ көнө ул негрға «ҡон ҡайтарырға» мөмкинлек бирҙе. Әммә был юлы ҙур суммаға бәхәс тотоусы аҙ ине һәм ҡарт негрҙы еңде. Сөнки Сьенфуэгос негрының үҙ көсөнә ышанысы тәүге матчта уҡ һынғайны инде. Унан һуң Сантьяго тағы бер нисә алышта ҡатнашты, тик тиҙҙән был шөғөлөн ташланы. Ул, бик теләһә, кемде лә еңерен аңланы, әммә бындай көрәштәрҙең балыҡ тотор өсөн кәрәк булған уң ҡулына зыян килтергәнен һиҙҙе. Бер нисә тапҡыр һулаҡайы менән көрәшеп ҡараны. Тик һул ҡулы уға буйһонорға теләмәйенсә һәр саҡ уңайһыҙ хәлгә ҡалдыра, шуға күрә ҡарт уға ышанмай ине.

«Ҡояш әле уны һәйбәт кенә итеп ҡыҙҙыра, — тип уйланы ҡарт. — Бынан һуң ул ойомаҫҡа тейеш. Тик төндә бик үк һалҡын булмаһа ғына инде. Был төн нимә юрай икән миңә? Белергә ине».

Баш осонан ғына Майамиға китеп барған самолет үтте. Ҡарт самолеттың шәүләһе осар балыҡтарҙың тотош көтөүен һауаға өркөтөп күтәреүен күрҙе.

— Был тирәлә осар балыҡтарҙың күп булыуы яҡшы, тимәк, яҡын-тирәлә макрель дә булырға тейеш, — тине ул. Ҙур балыҡты саҡ ҡына булһа ла яҡыныраҡ тартып булмаҫмы икән тип, арҡаһы менән бауҙы этеп ҡараны. Тик бау, скрипка ҡылы кеүек зыңғылдап, ваҡ ҡына тамсыларҙы сәсрәткәс, фәтүә юҡлығын аңланы. Ҡәмә яй ғына алға йөҙҙө. Ҡарт күктәге самолетты күҙҙән юғалғанса ҡарап ҡалды.

«Моғайын, өҫтән бөтәһе лә сәйер күренәлер, — тип уйланы ул. — Ҡыҙыҡ, ундай бейеклектән диңгеҙ ни рәүешле икән? Ул тиклем бейектән осмаһалар, минең ҙур балығымды һәйбәт күрерҙәр ине. Балығымды өҫтән ҡарар өсөн ике йөҙ сажин бейеклегенән яй ғына осоп әйләнергә теләр инем. Гөбөргәйел тоторға йөрөгәндә, мачта башына менеп, унан да байтаҡ ҡына нәмә күрә торғайным. Макрель унан йәшелерәк күренә һәм фиолет төҫтәге буй-буй таҫмалары менән таптарын

абайларға, бөтөн көтөүҙең йөрөгәнен күрергә була. Ни өсөн диңгеҙҙең ҡараңғы тәрәнлегендә тиҙ йөҙөүсе балыҡтарҙың буй-буй һыҙыҡтары һәм таптары фиолет төҫөндә була икән? Макрель дә йәшел булып күренә генә бит, ә ысынында иһә ул алтынһыу төҫтә. Әммә ныҡ ас булып балыҡтарға ташланғанда уның да яҡ-яғында марлиндыҡы кеүек фиолет һыҙыҡтар пәйҙә була. Асыуҙан шулай була микән ни? Ә, бәлки, ғәҙәттәгенән етеҙерәк хәрәкәт иткәнгәлер?»

Эңер төшөр алдынан ҡарттың кәмәһе саргасс үҫемлектәре утрауы янынан үтте. Ылымыҡтар һалмаҡ ҡына тулҡын өҫтөндә күпереп тирбәлеп тора, гүйә океан һары ебәк юрған аҫтында кем менәндер ҡосаҡлаша. Шул саҡ бәләкәй ҡармаҡҡа макрель эләкте. Ҡарт уны ҡояштың һуңғы нурҙарында саф алтын кеүек йылҡылдап һауаға һикергән сағында күрҙе. Ҡурҡышынан икегә бөгөлөп, йөҙгөстәрен ҡоторған кеүек болғап, оҫта акробат кеүек һикеренде балыҡ. Ҡарт ҡойроҡҡа күсеп сүкәйҙе лә, йыуан бауҙы уң ҡулы һәм терһәге менән тотҡан килеш, яңы тартып сығарған ҡармаҡ ебенә яланғас һул аяғы менән баҫты. Унан һулаҡай ҡулы менән макрелде тартты. Макрель кәмә эргәһендә алйып һикерә, уңға-һулға ташлана ине. Ҡарт ҡойроҡ аша үрелеп, фиолет һыҙыҡлы алтын кеүек ҡайнар макрелде кәмәгә тартып алды. Балыҡтың ҡармаҡ ҡапҡан ауыҙы көҙән йыйырған кеүек ҡыҫылғайны. Ҡарт алтын кеүек башына һуҡҡансы, ул яҫы оҙон кәүҙәһе, башы һәм ҡойроғо менән кәмә төбөнә бәргеләнде. Һуҡҡас ҡына бер ҡалтыранды ла тынды.

Ҡарт, балыҡты ысҡындырып алғас, ҡармаҡты сардина менән емләп яңынан һыуға ырғытты. Шунан яй ғына кәмә моронона күсте. Һул ҡулын йыуып, салбарына һөрттө, ауыр бауҙы уң яурынынан ҡулына күсерҙе һәм киске ҡояштың океанға байып барыуын, һыуға һуҙылған бауҙың ауышлығын күҙәтә-күҙәтә уң ҡулын йыуҙы.

— Барыһы ла элеккесә, — тине ул. Ләкин ҡулын һыуға тығып ҡарағас, кәмәнең ярайһы ғына әкренәйеүен тойҙо.

— Ишкәктәрҙе бер-береһенә бәйләп, ҡойроҡҡа арҡыры тағайым. Төндә кәмәне аҙ булһа ла тотҡарлап торор, — тине

ул. — Был балыҡтың төн оҙоно йөҙөргә лә ғәйрәте етер. Минеке лә.

«Ҡаны аҡмаһын өсөн макрелде һуңынаныраҡ таҙалаһам яҡшы булыр, моғайын, — тип уйланы ул. — Унан кәмәнең тиҙлеген аҡрынайтыр өсөн ишкәктәрҙе бәйләп ҡуйырмын. Әлегә ҡояш байыған ваҡытта балыҡты борсомай тороу хәйерлерәк. Ҡояш байышы ниңәлер бөтә балыҡтарға ла насар йоғонто яһай».

Ул, еүеш ҡулын елдә киптергәс, ҡармаҡ бауын уға ураны ла, балыҡҡа үҙен кәмәнең ситенә үк тартып килтерергә ирек бирҙе, шулай итеп, балыҡтың ауырлығы бортҡа күсте.

«Ҡайһы бер нәмәгә өйрәндем инде, — тип уйланы ул. — Әлегә уға бирешмәйем әле. Шуны ла иҫтән сығармаҫҡа кәрәк: ҡармаҡҡа эләккәне бирле уның бер нәмә лә ашағаны юҡ. Ә бит шул тиклем дәү балыҡҡа күп ашарға кәрәк. Мин иһә бер тунецты йыпырҙым. Иртәгә макрель ашармын. — Ҡарт макрелде dorado тип атай ине. — Хәйер, таҙартҡанда бер киҫәк ашармын. Ярар, был донъяла бер нимә лә еңел генә бирелмәй».

— Кәйефең нисек, балыҡ? — тип ҡысҡырып һораны ҡарт. — Минеке бик яҡшы. Һул ҡулым яҙылды, ризығым да төнө буйына һәм көндөҙгөләккә етерлек. Ярай, кәмәне тарт, балыҡ.

Ҡарттың хәле бик шәптән түгел ине, сөнки ҡармаҡ бауының ауырттырыуы, һыҙланыу ғына булыуҙан үтеп, бөтөн тәнен ҡыйратып алып барған кеүек. Ҡартты был хәүефләндерҙе. «Бынан да насарыраҡ хәлдә ҡалғаным бар, — тип йыуатты ул үҙен. — Ҡулымдың йәрәхәте тәрән түгел, икенсеһен көҙән йыйырмай. Аяҡтарым иҫән-һау. Ашау яғым да балыҡтыҡына ҡарағанда яҡшыраҡ».

Ҡараңғыланғайны инде. Сентябрҙә, ғөмүмән, ҡараңғы ҡапыл, ҡояш байыу менән үк, төшә. Ҡарт тоҙло һыу ашаған бортҡа терәлеп ятып, мөмкин тиклем ял итергә тырышты. Күктә тәүге йондоҙҙар ҡабынды. Ҡарт Ригель йондоҙоноң исемен белеүен-белмәй ине, әммә был йондоҙ ҡалҡҡас, оҙаҡламай башҡалары ла күренәсәген аңланы. Ул саҡта был алыҫ дуҫтары тағы уның менән бергә буласаҡ.



*— Кәйефең нисек, балыҡ? — тип ҡысҡырып һораны ҡарт. — Минеке бик яҡшы. Һул ҡулым яҙылды, ризыҡым да төнө буйына һәм көндөҙгөләккә етерлек. Ярай, кәмәне тарт, балыҡ.*

— Балыҡ та минең дуҫ, — тине ҡарт. — Бындай балыҡты күреү түгел, ишеткәнем дә юҡ ине. Тик мин уны үлтерергә тейешмен. Ярай әле беҙгә йондоҙҙарҙы үлтерергә тура килмәй!

«Әйтәйек, кеше көн һайын айҙы үлтерергә маташа ти! Ә ай унан ҡаса. Йәки кешегә ҡояшты ауларға тура килһә? Юҡ, ни генә тимә, даланыбыҙ бар әле», — тип уйланы ул.

Инде ҡартҡа бер нимә лә ашамаған балыҡ йәл булып китте. Әммә уны хәстәрләү үлтереү теләгенә һис тә ҡамасауламаны. Күпме кешенең тамағын туйҙырасаҡ ул! Тик кешеләр уны ашарға лайыҡмы һуң? Әлбиттә, юҡ. Үҙен ниндәй сабыр ғорурлыҡ менән тотоуына ғына ҡарағыҙ, — был донъяла берәү ҙә уны ашарға лайыҡ түгел.

«Мин күп нәмәне аңламайым, — тип уйланы ҡарт. — Ярай әле беҙгә ҡояшты, айҙы һәм йондоҙҙарҙы үлтерергә кәрәкмәй. Беҙгә, үҙ туғандарыбыҙҙы үлтереп, диңгеҙҙән ризыҡ талап итеүебеҙ ҙә еткән.

Хәҙер миңә ишкәктәрҙән тормоз яһау тураһында уйларға кәрәк. Быны яҡшы яғы ла, насары ла бар. Әгәр балыҡ тартылып ысҡынырға уйлаһа, мин бик күп бауҙы, тимәк, балыҡты ла әрәм итәсәкмен. Сөнки ишкәк-тормоз кәмәнең барышын ауырайтасаҡ. Кәмәнең еңеллеге балыҡтың да, минең дә ғазаптарҙы оҙонайта, әммә минең ҡотолоуыма өмөт тә шунда бит. Теләһә, был балыҡ тағы ла шәберәк йөҙә ала. Нисек кенә булмаһын, еҫләнгәнсе макрелде таҙартып, тәнгә көс ҡунһын өсөн аҙыраҡ ҡапҡылап алырға кәрәк.

Әлегә саҡ ҡына булһа ла ял итәйем. Унан, балыҡ тағы берәй хикмәт уйлап сығармаһа, ҡойроҡҡа күсеп, ишкәктәр тураһында бер фекергә килермен. Уға тиклем балыҡтың үҙен нисек тотоуын күҙәтәйем. Ишкәктәрҙән тормоз, тип яҡшы уйланым, тик хәҙер яңылышмаҫҡа кәрәк. Балыҡ көслө әле, ҡармаҡ уның ауыҙ ситенә генә эләккән, быны мин асыҡ күрҙем, ә ауыҙын нык ҡымтыған. Ҡармаҡ уны бик үк йонсотмай. Ул күберәк аслыҡтан һәм үҙе аңламаған хәүеф тойғоһонан ғазаплана. Ҡарт, һин ял ит. Һиңә сират еткәнсе, әйҙә, балыҡ эшләһен.

Уға үҙе ике сәғәт тирәһе ял иткән кеүек тойолдо. Ай хәҙер һуң ҡалҡа, шуға күрә ваҡытты белә алманы. Дөрөҫ, ял тигәне

лә ҡоро һүҙ генә инде. Ул һаман арҡаһы менән балыҡтың ауырлығын тоя, тик һул ҡулы менән морондоң планширына таяныл, ауырлыҡтың күберәген кәмәгә күсерергә тырыша.

«Бауҙы кәмәгә бәйләһәм, йәтеш булыр ине лә бит! — тип уйланы ул. — Ләкин балыҡ саҡ ҡына алға ырғылһа ла ул өҙөләсәк. Мин тартыу көсөн үҙемдең кәүҙәм менән кәметергә һәм кәрәк ваҡытта бауҙы ике ҡуллап ысҡындырырға әҙер торорға тейешмен.

— Тик һин һаман йоҡламаның бит әле, ҡартлас, — тине ул үҙ-үҙенә. — Ярты көн, бер төн, тағын бер көн үтте, ә һин йоҡламайһың да йоҡламайһың. Балыҡ шаярмайынса тыныс ҡына йөҙгән арала аҙ ғына булһа ла йоҡлап алырға әмәлен тап. Йоҡламаһаң, зиһенең сыуалыр.

«Әлегә зиһенем саф, — тип уйланы ул. — Хатта артыҡ саф. Һеңлеләрем-йондоҙҙар кеүек. Шулай ҙа йоҡлап алырға кәрәк. Йондоҙҙар ҙа йоҡлай, ай ҙа йоҡлай, ҡояш та йоҡлай, хатта ағым булмай һил торғанда океан да йоҡлап ала».

— Йоҡларға онотма, — тип ҡабатланы ул. — Үҙеңде йоҡларға мәжбүр ит; бауҙы ҡарауһыҙ ҡалдырыу өсөн берәй ябай ғына, ышаныслы ғына хәйләһен тап. Хәҙер, ҡойроҡҡа барып, макрелде таҙарт. Ә ишкәк-тормоз, йоҡлап китһәң, ҡурҡыныс нәмә.

— Мин йоҡламай ҙа түҙә алам, — тине ул үҙенә. — Эйе, алаһың, тик был да ҡурҡыныс.

Ул, балыҡты борсомаҫҡа тырышып, мүкәйләп кенә ҡойроҡҡа күсә башланы. «Бәлки, ул да йоҡомһорай торғандыр, — тип уйланы ул. — Тик мин уның ял итеүен теләмәйем. Ул кәмәне үлгәнсе һөйрәргә тейеш».

Ҡойроҡҡа барып еткәс, боролдо ла балыҡтың ауырлығын һул ҡулына күсерҙе, ә уңы менән ҡынынан бысағын тартып сығарҙы. Морондағы таҡта аҫтында ятҡан макрель йондоҙ яҡтыһында яҡшы күренә. Ҡарт уны башына бысаҡ ҡаҙап тартып сығарҙы ла, аяғы менән ҡыҫып, ҡойроғонан алып аҫҡы яңағына тиклем ҡорһағын ярып ебәрҙе. Унан, бысағын һалып, уң ҡулы менән эсен таҙартты. Макрелдең ашҡаҙаны ауыр һәм шылғаҡ ине; уны ярғас, эсенән ике осар балыҡ сыҡты. Икеһе

лә боҙолмаған, ҡаты килеш кенә. Ҡарт уларҙы кәмә төбөнә һалды, эсәк-бауырын һыуға ташланы. Улар, үҙ арттарынан ялтыр эҙ ҡалдырып, төпкә китте. Йондоҙҙарҙың бөләңгерт яҡтыһында макрель ҡаралы-аҡлы булып күренде. Ҡарт, балыҡтың башына баҫып, бер яҡтан тиреһен тунаны. Шунан һуң әйләндереп, икенсе яҡ тиреһен дә һыҙырҙы. Аҙаҡтан баштан алып ҡойроғона саҡлы иттәрен юнып алды.

Макрелдең һөлдәһен кәмәнән ташлағас, ҡарт, һыуҙа дүңгәләктәр күренмәйме, тип үрелеп ҡарап торҙо. Тик һыуҙа яй ғына төшөп киткән һөйәктәрҙең яҡты эҙе генә ҡалды. Ҡарт боролоп, ике осар балыҡты макрель телемдәре араһына һалды, бысағын ҡынына йәшереп, йәнә һаҡ ҡына моронға күсте. Арҡаһын бауҙың ауырлығы баҫып килә, ә балыҡты ул уң ҡулында алып бара ине.

Моронға килгәс, балыҡ телемдәрен таҡтаға теҙҙе лә, улар янына осар балыҡтарҙы һалды. Шунан һуң ҡармаҡ бауын арҡаһының ауыртмағаныраҡ еренә шыуҙырып, ауырлыҡты планширға таянған һул ҡулына күсерҙе. Борт аша үрелеп, осар балыҡты йыуҙы. Бер ыңғайҙан кәмәнең тиҙлеген дә тикшерҙе. Макрелдең тиреһен һыҙырғанда фосфорланған ҡулы һыуҙа ялтырап күренде. Ҡулы буйлап аҡҡан һыуға ҡарағанда, кәмәнең тиҙлеге, көндөҙгө менән сағыштырғанда, ярайһы ғына әкренәйгәйне.

— Ҙур балыҡ йә бик арыған, йә ял итә, — тип һығымта яһаны ҡарт. — Тиҙ генә ашарға ла аҙыраҡ йоҡлап алырға кәрәк.

Ул йондоҙҙар яҡтыһында осар балыҡтың эсен таҙартҡан саҡта, төндөң еләҫләнә барғанын тойҙо. Ашыҡмай ғына макрель итенең бер телеменең яртыһын һәм бер осар балыҡты ашап бөттө.

— Бешереп ашағанда макрель итенән дә тәмлеһе юҡ, — тине ҡарт. — Ә бына сей көйө ауыҙға ҡапҡыһыҙ. Инде бер ваҡытта ла диңгеҙгә тоҙ менән лимонһыҙ сыҡмаясаҡмын.

«Әгәр башым булһа, көнө буйы кәмәнең моронондағы таҡтаға һыу ҡойоп киптерер инем дә — кискелеккә тоҙом булыр ине. Шулай, тик мин бит макрелде ҡояш байыр алдынан

тоттом. Шулай ҙа бик күп нәмәне хәстәрләмәгәнмен. Ярар, бына бер телемде ашап бөттөм, ә күңелем болғанманы бит».

Көнсығышта күк йөҙөн ҡалын-ҡалын болоттар ҡаплай барып, ҡартҡа таныш йондоҙҙар бер-бер артлы күҙҙән юғала башланы. Кәмә тау-тау болоттар араһынан тәрән тарлауыҡҡа инеп барғандай тойолдо. Ел тынды.

— Өс-дүрт көндән көн боҙолорға тейеш. Тик был ике көндә үҙгәрмәҫ әле, — тип самаланы балыҡсы. — Балыҡ үҙен тыныс тотҡанда бер аҙ серем итеп алырға ине, ҡартлас.

Ул ҡармаҡ бауын уң ҡулына тотто ла, бөтөн кәүҙәһе менән бортҡа һыйынып, ҡул өҫтөнә ҡырын ятты. Яурынындағы бауҙы түбәнерәк төшөрөп, һул ҡулына тотто.

«Уң ҡулым бушаймаһа, ҡармаҡ бауын ебәрмәҫ. Әгәр йоҡлағанда һул ҡулым бушап, бау һыуға тағатыла башлаһа, уң ҡулым быны һиҙеп, мине уятырға тейеш. Билдәле, уң ҡулыма ауырлыҡ төшәсәк. Ләкин ул ундай ғына ауырлыҡҡа күнеккән инде. Бер егерме-утыҙ минут серем итһәм дә, яҡшы ял булыр».

Ҡарт, ҡармаҡ бауының бөтөн ауырлығын уң ҡулына күсереп, янтаҡтаға һөйәлгән килеш, шунда уҡ йоҡоға талды.

Уның төшөнә тәүҙә арыҫландар инмәне. Ул бик ҙур диңгеҙ сусҡаларының һигеҙ-ун милгә һуҙылған көтөүен күрҙе. Туй осоро булғанға, улар сөңгөлдәрҙән бер-бер артлы атылып килеп сығалар ҙа, һауала һикергеләп, яңынан сөңгөлгә сумалар, имеш. Артабан ул ауылда үҙ карауатында ята, имеш. Аласығына төньяҡ еле үтеп инә, имеш. Ул туңа, ә уң ҡулы аҫтына һалғанға ойоған, имеш.

Шунан һуң ғына уның төшөнә оҙон, ҡомло һайлыҡ инде. Ул эңерҙә һайлыҡҡа сыҡҡан беренсе арыҫланды күрҙе, уның артынан башҡалары ла сығып килә, имеш. Ул яҡорҙа торған караптың палуба ситенә эйәген ҡуйған да тағын бүтән арыҫландар күренмәҫме тип көтөп тора. Ҡоро ерҙән киске ел иҫә. Ул үҙен бик бәхетле һиҙә, имеш.

Ай күптән ҡалҡты, ҡарт һаман йоҡлай ине. Ҙур балыҡ иһә кәмәне тыныс ҡына болоттар араһына алып инде.

Ҡарт ҡармаҡ бауының ҡапыл тартылыуына һиҫкәнеп уянды. Уң йоҙроғо шап итеп битенә килеп бәрелде. Бау, уның ус



*Ул эңерҙә һайлыҡҡа сыҡҡан беренсе арыҫланды күрҙе, уның артынан башҡалары ла сығып килә, имеш.*

төбөн яндырып, һыуға һауыла башланы. Һул ҡулы бер нәмә лә тоймай ине. Шуға күрә ул бауҙы уң ҡулы менән тотмаҡсы булды, тик бау, уға буйһонмайынса, һыуға ағылыуын дауам итте. Ниһайәт, һул ҡулы ла бауҙы тоя башланы. Хәҙер ҡыҙыу шыуған ҡармаҡ бауы яурыны менән һул ҡулын яндырҙы. Ҡарт запас йомғаҡтарына ҡарап ҡуйҙы. Уларҙың бер-бер артлы бик тиҙ тағатыла барыуын күрҙе. Шул саҡ ҙур балыҡ океан өҫтөн ярып атылып сыҡты ла, тау кеүек кәүҙәһе менән дуға яһап, тағы һыуға сумды, ләкин шунда уҡ ҡабат һикерҙе. Тағы ырғылды. Ҡармаҡ бауы тотҡарлыҡһыҙ ағылыуға ҡарамаҫтан, кәмә ҙур тиҙлек менән бара башланы. Ҡарт, бауҙы тотҡарларға теләп, бөтөн көсө менән үҙенә табан тартты, йәнә ебәрҙе, йәнә тартты. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатланғас, бауҙың өҙөлөүенән ҡурҡмайынса, йән көсөнә тартҡайны, бау уның үҙен кәмә моронона табан өҫтөрәне. Ҡарт еүеш макрель өҫтөнә йөҙтүбән барып төштө.

«Ярай, беҙ шуны ғына көткәйнек, — тине ул. — Хәҙер һаҡлан, балыҡ. Мин бының өсөн һинән үс алмайынса ҡалмам!»

Ул ҙур балыҡтың ырғып сыҡҡанын күрмәһә лә, шапылдап һыуға төшкәс, тулҡындың кәмәне һелкетеүен яҡшы тойҙо. Аҫҡа шыуған ҡармаҡ бауы ҡулдарын ныҡ ауырттырһа ла, иғтибар итмәне. Шулай буласағын алдан белгәнгә күрә, ул, ҡулын яраламаҫ өсөн, бауын күберәк усының һөйәлле еренән уҙҙырырға тырыша ине.

«Их, янымда малай булһа, бауға һыу һибер ине, — тип уйланы ҡарт. — Миңә лә был тиклем ҡыйынға тура килмәҫ ине. Их, малай булһасы!»

Ә ҡармаҡ бауы һыуға ағылды ла ағылды. Дөрөҫ, аҙлап ҡына әкренәйә төштө. Ҙур балыҡҡа уның һәр дюймын тартып алырға тура килде. Ҡартҡа хәҙер, макрель итенә буялған йөҙөн ҡалҡытып, артҡа шыуырға мөмкинлек тыуҙы. Ул тәүҙә тубыҡланды, унан аяғына баҫты. Ҡармаҡ бауын аҙлап-аҙлап ҡына һаман ебәрә барҙы. Йомғаҡтарҙы ҡараңғыла аяҡтары менән ҡапшап, күпме ҡалғанын самаланы: запас бау етерлек әле. Ә һыуҙағы өлөшө шул тиклем оҙон, балыҡҡа уны өҫтөрәп йөрөү, әлбиттә, еңел булмаясаҡ.

«Бына булды. Балыҡ хәҙер ун тапҡырҙан артыҡ һикергәндер. Уның ҡыуыҡтарына һауа тулды, — тип уйланы ҡарт. — Тимәк, тартып сығарып булмаҫлыҡ тәрәнгә төшөп үлмәйәсәк. Тиҙҙән ул әйләнә башлар. Бына шунда миңә эш буласаҡ. Ул нишләп һикерҙе икән? Белһәң ине. Аслыҡ микән, әллә берәй нимәнән ҡурҡканмы? Улай тиһәң, һис бер ҡурҡыуҙы белмәҫ көслө балыҡ кеүек тойолғайны, сәйер!»

— Һин дә, ҡартлас, үҙеңдең көсөңә ышанып, ҡурҡыуҙы онотторға тырыш, — тине ул. — Һин ҙур балыҡты ҡулыңда тотоуын тотоп тораһың, тик бер дюйм да үҙеңә яҡын килтерә алмайһың. Тиҙҙән ул кәмәң тирәһендә йөрөй башлаясаҡ.

Ҡарт ҡармаҡ бауын, яурыны аша үткәреп, һул ҡулына күсерҙе. Унан, диңгеҙгә эйелеп, уң усына һыу алды, иҙелеп битенә һылашҡан макрель итен йыуып төшөрҙө. Сөнки макрель еҫенә күңеле болғана ҡалһа, хәле бөтөр тип ҡурҡты. Йыуынғас, ҡулын тоҙло һыуға тығып торҙо. «Балыҡ хәҙер көнсығышҡа табан йөҙә башланы, — тине ул яҡтыра барған күк йөҙөнә ҡарап. — Тимәк, ул арыған, шуға күрә ағым ыңғайына йөҙә. Тик тиҙҙән уға әйләнеп йөрөргә тура килер. Бына шул саҡта ысын эш башланасаҡ».

Ҡарт уң ҡулын һыуҙан сығарып ҡарап алды:

— Зыян юҡ. Ир кешегә ындай ғына ауыртыу бер нимә лә түгел.

Ул, йәрәхәтенә тейҙермәҫкә тырышып, ҡармаҡ бауын уң ҡулына күсерҙе. Унан, һул ҡулын йыуыр өсөн, кәүҙәһе менән кәмәнең икенсе яҡ бортына ауышты.

— Ғәрип булһаң да, бөгөн ярайһы ғына эшләнең, — тип маҡтаны ҡарт һул ҡулын. — Дөрөҫ, мине тишек кәмәгә ултыртта яҙған минуттарың да булғыланы.

«Ни өсөн был ҡулдарҙың икеһе лә бер төрлө булып яралманы икән? — тип уйланы ул. — Һулын ваҡытында эшкә күнектермәгәнгә, бәлки, мин үҙем ғәйеплелер. Теләһә, ул үҙе лә өйрәнә ала ине инде! Дөрөҫөн әйткәндә, төндә ҡулым мине ул тиклем хурлыҡҡа төшөрмәне, көҙән дә бер тапҡыр ғына йыйырҙы. Әгәр ҙә тағы көҙән йыйырһа, үҙен ҡармаҡ бауы бөтөнләй өҙөп алып китһә лә, бер һүҙем юҡ!»

Ошолай уйлағас, ҡарт үҙенең зиһене сыуала башлауын тойҙо. Уға тағы бер телем макрель ите ашарға кәрәк. «Юҡ, батмай, — тине ул. — Ҡоҫоп көсөмдө бөтөргәнсе, башым томаланһын. Йөҙтүбән ҡапланғандан һуң, ул сей балыҡты күңелем болғанмайынса ашай алмаҫымды беләм. Боҙолғансы тороп торһон. Яңынан көс йыйырға һуң инде. Туҡта, һинең запаста осар балығың бар ҙа инде! Бына тиле тимә инде!» — тип әрләне ул үҙен.

Эсе таҙартылған осар балыҡ алдында ята ине. Ул уны, һул ҡулы менән алып, ашыҡмай ғына, ҡылсыҡтарына тиклем тырышып сәйнәй-сәйнәй ашап бөттө.

«Осар балыҡтың ите бөтәһенекенә ҡарағанда ла туҡлыҡлы, — тине ҡарт. — хәйер, нисек кенә булмаһын, унда миңә кәрәк матдәләр бар. Хәҙер мин ҡулымдан килгәндең барыһын да эшләнем. Әгәр балыҡ кәмәне уратып йөрөй башлаһа — беҙ көрәшкә әҙер».

Ул балыҡ тоторға сыҡҡаны бирле, ҡояштың өсөнсө тапҡыр күтәрелеүе ине. Шул саҡта ғына балыҡ әйләнеп йөрөй башланы.

Ҡармаҡ бауының йүнәлешенә ҡарап ҡына балыҡтың әйләнә-тулғана башлауын билдәләп булмай. Әле иртәрәк. Саҡ ҡына бушауын һиҙеп, уң ҡулы менән бауҙы һыуҙан сығарырға кереште ҡарт. Ләкин бау яңынан тартылып, бына-бына өҙөләм тигәндә генә, ҡапыл тағы бушай төштө. Ҡарт, алға табан эйелеп, яурынына батып килгән бауҙы алды ла ашыҡмайынса кәмәгә һалмаҡ ҡына тартып сығара башланы.

Ул ике ҡуллап алмаш-тилмәш тартты. Ҡулдарына аяғы менән яурыны ла ярҙамлашты.

— Балыҡ бик алыҫтан урай, — тине ҡарт. — Әммә урата башлауына шик юҡ.

Бау кинәт кенә һәлмәгәйә төштө. Ләкин ҡарт, бауҙың өҫтөндә ҡояш нурҙары ялтырап, тамсылар һикергеләй башлағансы тартып сығарыуын дауам итте. Бау тағы ла нығыраҡ тартылды һәм ҡарт, тубыҡланып, ҡармаҡ бауын теләр-теләмәҫ кенә ҡараңғы һыуға табан кире ебәрә башланы.

— Балыҡ хәҙер иң ҙур түңәрәкте әйләнә, — тине ул.

«Бауҙы мөмкин тиклем ныҡыраҡ тоторға кәрәк. Тартылған бау әйләнеште ҡыҫҡарта барасаҡ. Бәлки, берәй сәғәттән уны күрермен дә әле. Тәүҙә мин уға үҙемдең көсөмдө танытырға тейешлемен. Шунан һуң инде уны еңәсәкмен».

Әммә ике сәғәт тә үтеп китте, ә балыҡ һаман кәмә тирәләй әкрен генә әйләнеүен дауам итте. Ҡарт ҡара тиргә батты, хәлдән тайҙы. Дөрөҫ, түңәрәктең тарая, ә ҡармаҡ ебенең йүнәлеше үҙгәрә барыуын самалап, ҡарт балыҡтың әкренләп кенә өҫкә күтәрелә барыуын аңланы.

Бына бер сәғәт инде ҡарттың күҙ алдынан таптар һикергеләй, тоҙло тир күҙҙәрен һәм ҡаш өҫтөндәге яраларын әсеттереп әрнетә. Тик ҡара таптар ҡартты ҡурҡытманы. Ҡармаҡ бауын ҡайһылай көсөргәнеп тартҡанды уйлағанда, быньң һис тә ғәжәбе юҡ. Әммә ике тапҡыр ул хәлһеҙлек тойҙо, бына шул уны ысынлап хафаландырҙы.

«Ниндәйҙер бер балыҡ арҡаһында хәлдән тайып үлеп ҡалырмынмы икән ни? — тип һораны ул үҙ-үҙенән. — Етмәһә, хәҙер, бөтәһе лә һәйбәт барғанда. Йә, хоҙай, түҙемлек бирсе! Йөҙ тапҡыр «Тәңребеҙ» доғаһын, йөҙ тапҡыр «Изге Әсә» доғаһын уҡырмын. Тик хәҙер түгел. Хәҙер булдыра алмайым».

«Уҡыным икән тип һана, — тип уйланы ул. — Һуңынан уҡырмын!»

Ошо мәлдә ул үҙе ике ҡуллап тартҡан бауға нимәнеңдер һуғылғанын һиҙҙе. Ҡармаҡ бауы ҡапыл алға тартылды. Тартылыу бик киҫкен һәм ифрат көслө булды.

«Балыҡ ҡылысы менән ҡармаҡ бәйләнгән тимерсыбыҡҡа һуға, — тип уйланы ҡарт. — Аптырарлығы юҡ, ул шулай эшләргә тейеш тә. Тик хәҙер өҫкә һикереп сығыуы ла ихтимал. Ә миңә уның һаман уратып йөрөүе кәрәк. Ҡыуығына һауа тултырыу өсөн уның һикереүе кәрәк ине, ә хәҙер һәр һикереш ҡармаҡ ҡаҙалған яраны киңәйтәсәк тә, балыҡтың ысҡынып китеүе бар».

— Һикермә, балыҡ! — тип инәлде ул. — Һикерә күрмә инде, зинһар!

Балыҡ тимерсыбыҡҡа тағы, тағы һуҡты. Ҡартҡа башын сайҡай-сайҡай бауҙы әкрен генә бушатырға тура килде.

«Уны артыҡ һыҙландырырға ярамай, — тип уйланы ул. — Минең әрнеүҙәрем бит үҙемдә. Уларға ғына баш булырмын. Ә бына балыҡтың ауыртыуҙан туҙынып китеүе бар».

Күпмелер ваҡыттан һуң балыҡ, тимер сымға һуғыуҙан туҡтап, яй ғына уратып йөрөй башланы. Ҡарт, һәлмәк кенә тартып, бауҙы һыуҙан сығара. Тик тағы хәле хөртәйҙе. Ул, һул ҡулы менән һыу услап, башына ҡойҙо, елкә, муйындарын сылатты.

— Уның ҡарауы мине көҙән йыйырмай, — тине ул. — Балыҡ тиҙҙән өҫкә сығасаҡ, ә мин түҙәм әле. Һин ныҡ тор, ҡарт. Башҡаны башыңа ла килтермә.

Ҡарт тубыҡланып ҡармаҡ бауын яңынан арҡаһы аша ташланы. «Ул уратып йөрөгән арала ял итеп алайым. Яҡыныраҡ килһә, бауҙы тағы тарта башлармын».

Уның кәмәморононда оҙағыраҡ ял иткеһе, ҡармаҡ ебен тартмайынса балыҡҡа күберәк әйләнеп йөрөргә мөмкинлек биргеһе килде. Тик бауҙың бушауынан балыҡтың, ярым түңәрәк яһап, кире боролоуын, кәмәгә яҡынайыуын һиҙеп торҙо, кәүҙәһе менән әле бер, әле икенсе яҡҡа ҡыйшайып, ҡулдарын болғап, ҡармаҡ бауын мөмкин тиклем күберәк тартып сығарырға тырышты.

«Ғүмеремдә лә был тиклем арығаным булмағандыр, — тип уйланы ҡарт, — ә бит ел көсәйә бара. Дөрөҫ, балыҡты алып ҡайтҡанда ел миңә ыңғай буласаҡ. Миңә бик кәрәк буласаҡ был ел».

— Балыҡ яңы әйләнешкә киткәндә ял итермен, — тине ул. — Хәлем ҡәҙимге һәйбәт әле. Тағы ике-өс тапҡыр әйләнеп сыҡһа, балыҡ минеке буласаҡ.

Ҡарттың һалам эшләпәһе елкәһенә шыуып төшкәйне. Балыҡ кире боролоп, яңынан тарта башлағас, ҡарт хәле бөтөп кәмә моронона ауҙы.

«Инде һин эшлә, балыҡ, — тип уйланы ул. — Кире боролһаң, мин һиңә шул саҡта тотонормон».

Диңгеҙ өҫтөндә эре тулҡындар күтәрелде. Әммә һыуҙы аяҙ көндөң юлдашы булған игелекле ел ҡыуҙы. Ул ҡартҡа өйгә ҡайтып етер өсөн кәрәк ине.



*Әммә балыҡ ысынлап та ғәләмәт ҙур ине. Өсөнсө әйләнешенең аҙағында ул кәмәнән утыҙ ғына ярд ерҙә өҫкә сыҡты һәм ҡарт диңгеҙ өҫтөнә уның ҡойроғо күтәрелгәнен күрҙе.*

— Ҡөньяҡҡа һәм көнбайышҡа ҡарап ишермен, — тине ул. — Бары шул ғына. Диңгеҙҙә аҙашып буламы ни? Етмәһә, беҙҙең утрау оҙон бит.

Балыҡты ул өсөнсө әйләнеш ваҡытында күрҙе.

Тәүҙә ул кәмә алдынан шул тиклем оҙаҡ үткән ҡара күләгәне абайланы, тик үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы.

— Юҡ, — тине ул. — Уның шул хәтле ҙур булыуы мөмкин түгел.

Әммә балыҡ ысынлап та ғәләмәт ҙур ине. Өсөнсө әйләнешенең аҙағында ул кәмәнән утыҙ ғына ярд ерҙә өҫкә сыҡты һәм ҡарт диңгеҙ өҫтөнә уның ҡойроғо күтәрелгәнен күрҙе. Ул иң ҙур ураҡтан да ҙурыраҡ булып, ҡарағусҡыл зәңгәр төҫтәге һыу өҫтөндә ақһыл-сирень төҫтә күренә ине.

Балыҡ тағы сумды, тик был юлы тәрәнгә китмәне. Ҡарт уның фиолет таҫмалар менән уратылған дәү кәүҙәһен асыҡ күрҙе. Балыҡтың арҡа йөҙгөсө һәленеп төшкән, ә киң күкрәк йөҙгөстәре яҡ-яҡҡа йәйелгәйне.

Балыҡ яңынан әйләнеш яһағанда ҡарт уның ҙур күҙҙәрен һәм йәнәшәһендә генә йөҙгән ике көрән йәбешкәк балыҡты абайлап ҡалды. Йәбешкәктәр ваҡыт-ваҡыт балыҡтың тәненә йәбешә, унан күҙ асып йомғансы ситкә китә. Ҡайһы ваҡыт улар шаярышып ҙур балыҡтың күләгәһендә йөҙә. Йәбешкәктәрҙең һәр береһе өс футтан да оҙонораҡ ине. Улар етеҙ йөҙгән саҡта йылан кеүек бөтөн кәүҙәләре менән борғоланды.

Ҡарттың битенән бер туҡтауһыҙ тир аға, тик хәҙер ҡояш ҡыҙҙырғанға ғына түгел. Балыҡ тыныс ҡына, хатта үҙенә бер ниндәй ҙә хәүеф янамағандай әйләнеп йөрөй, ҡарт ҡармаҡ бауын күберәк тартып сығарҙы һәм ике түңәрәктән һуң балыҡҡа гарпун менән сәнсеренә шикләнмәне.

«Тик уны яҡынираҡ, нык яҡынға тартып килтерергә кәрәк, — тип уйланы ул. — Шунан башына түгел, йөрәгенә ҡаҙарға кәрәк».

— Ҡарт, һин тыныс һәм көслө бул, — тине ул үҙенә.

Икенсе әйләнеш ваҡытында һыуҙан балыҡтың арҡаһы күренде. Тик ул һаман да кәмәнән алыҫ йөҙә ине. Балыҡ тағы бер әйләнде. Был юлы һыу өҫтөнән ҡалҡа төштө, әммә бары-

бер алыҫ ине әле. Ҡарт, бауҙы тағы ла тарта бирһә, балыҡты бөтөнләй яҡынайтаһын белә ине. Ул гарпунды күптән әҙерләгәйне: нәҙек трос бәйләме кәрзин эсендә ята, уның осон ҡарт морондағы битенгҡа бәйләп ҡуйҙы.

Балыҡ, дәү ҡойроғо менән һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә ишеп, тыныс ҡына йәнә бер урап сыҡты ла кәмәгә яҡыная төштө. Үҙе шундай тыныс һәм мәғрүр! Ҡарт уны мөмкин тиклем яҡынайтыр өсөн бауҙы бөтөн көсөнә тартты. Балыҡ бер секундҡа ғына тартылғандай итте, әммә йәнә элекке хәленә ҡайтты һәм яңы әйләнешен башланы.

— Әһә, уны ҡуҙғата алдым, — тине ҡарт. — Шулай ҙа мин уны янтайырға мәжбүр итә алдым бит.

Ҡарттың йәнә башы әйләнә башланы, әммә ул дәү балыҡлы бауҙы йән көсөнә тартыуҙан туҡтаманы.

«Шулай ҙа мин уны ҡыйшайта алдым. Икенсе юлы уны, бәлки, салҡан әйләндерә алырмын, — тип уйланы балыҡсы. — Тартығыҙ, — тип бойорҙо ул ҡулдарына. — Аяҡтарым, ныҡ тороғоҙ! Башым, миңә ярҙам ит! Ярҙам ит. Һинең мине һынатҡаның юҡ бит. Был юлы мин уны салҡан әйләндерәм».

Балыҡ кәмәгә яҡынлашмаҫ борон уҡ, ҡарт, барлыҡ ҡеүәтен туплап, ҡармаҡ бауын тартырға керешә. Әммә балыҡ саҡ ҡына янтая бирҙе лә, яңынан турайып, яй ғына йөҙөп китте.

— Тыңла әле, балыҡ! — тине уға ҡарт. — Һиңә бит барыбер үлергә. Шулай булғас, минең үлемем һиңә ниңә кәрәк?

«Былай бер ни ҙә ҡылып булмай», — тип уйланы ҡарт. Уның ауыҙы кипте, инде һөйләшерлек кенә түгел, хатта һыулы шешәгә үрелерлек тә хәле ҡалманы. «Был юлы мин уны кәмәгә тартып килтерергә тейешлемен, — тип уйланы ул. — Юҡһа, оҙаҡҡа сыҙай алмам». Унан: «Юҡ, сыҙайһың, — тип үҙ-үҙенә ҡаршы төштө. — Һин, ҡартлас, мәңге лә сыҙарһың».

Икенсе әйләнеш ваҡытында ҡарттың буйы саҡ-саҡ ҡына етмәй ҡалды, тик балыҡ, яңынан турайып, яй ғына кәмәнән йыраҡлашты.

«Һин һәләк итәһең мине, балыҡ, — тип уйланы ҡарт. — Әлбиттә, быға хаҡың бар. Һиндәй мөһабәт, гүзәл, тыныс һәм

киң күңелле йән эйәһен ғүмерҙә лә күргәнем юҡ ине. Йә, улайһа мине үлтер. Ҡем кемде үлтерә, миңә барыбер инде».

«Йәнә башың бутала, ҡарт! Ә бит һинең башың салт булырға тейеш. Уйҙарыңды рәткә килтер. Ғазаптарҙы әҙәмсә күтәрергә тырыш. Йәки анау балыҡ кеүек...» — тип өҫтәне ул күңеленән генә.

— Йә әле, баш, эшлә, — тине ул шым ғына, хатта үҙенең тауышын үҙе лә саҡ ишетте. — Эшлә, тиҙәр һиңә!

Балыҡ тағы ике тапҡыр әйләнеп сыҡты, әммә барыһы ла элеккесә ҡалды.

«Нишләргә? — тип уйланы ҡарт. Балыҡ әйләнгән һайын, ул үҙенең һушын юғалта барғанын тоя ине. — Нимә эшләргә? Тағы бер маташып ҡарайым әле».

Ул ҡармаҡ бауын тарта башлағайны, иҫен юя барғанын һиҙҙе, шулай ҙа балыҡты салҡатан һала алды. Тик балыҡ шунда уҡ кире әйләнде һәм, һауала ҡеүәтле ҡойроғон болғап, китеп барҙы.

Ҡулдарының бөтөнләй көсө бөтөп, күҙ алдары томаланһа ла, ҡарт үҙ-үҙен: «Тағы бер тапҡыр тырышып ҡарайым», — тип өгөтләне.

Ул тағы тартты, тик балыҡ йәнә китте.

«Ә-ә-ә, шулаймы әле? — тип уйланы ҡарт һәм шунда уҡ тәнендәге йәненең һүрелә башлағанын тойҙо. — Тағы бер тартып ҡарайым».

Бөтөн әрнеүен, аҡтыҡ көсөн, үҙенең күптән юғалтҡан ғорурлығын бергә туплап, ҙур балыҡ кисергән ғазаптар менән алышырға ташланы. Шул саҡ балыҡ янтайып китте һәм бүтән тороя алманы, ҡырынайған килеш йөҙә башланы. Ҡылысы кәмәгә саҡ етмәй ҡалды. Көмөш кеүек ялтырап торған тәнле, яҡ-яҡтары фиолет таҫмалар менән уратылған ифрат ҙур балыҡ кәмә янынан саҡ үтеп китмәне. Ҡартҡа уның осо-ҡырыйы булмаҫ кеүек тойолдо. Ул ҡармаҡ бауын ташланы ла, уға аяғы менән баҫып, гарпунды булдыра алған тиклем күтәрҙе, шунан, ошо минутта туплай алған барлыҡ көсө менән киҙәнеп, балыҡҡа сәнсте. Гарпун балыҡтың һыу өҫтөнән балыҡсының күкрәге тәңгәлендәрәк күтәрелеп торған йөҙгөсөнән саҡ ҡына

артҡараҡ ҡаҙалды. Ҡарт тимерҙең нисек итеп йомшаҡ иткә батып инеүен тойҙо, тәрәнгәрәк батһын өсөн гарпун һабына кәүҙәһенең бөтөн ауырлығын һалды.

Шул саҡ әжәле еткән балыҡҡа ҡапыл йән ингән кеүек булды. Ул, үҙенең мөһабәтлеге, матурлығы һәм ҡеүәте менән ҡупайғандай, һыу өҫтөнә юғарыраҡ ҡалҡты. Әйтерһең дә, ул ҡарт менән кәмә өҫтөндә һауала аҫылынып тора ине. Унан балыҡ, ҡартты ла, уның кәмәһен дә һыуға ҡойондороп, гөрһөлдәп диңгеҙгә барып төштө.

Ҡарттың хәле бөттө, күҙҙәре күрмәҫ булды. Шулай ҙа ул гарпундың бауын ебәреп өлгөрҙө. Ә инде күҙ алды бер аҙ яҡтырғас, ул балыҡтың көмөш ҡорһағын өҫкә ҡаратып салҡан ятҡанын күрҙе. Ҡырын ҡаҙалған гарпундың һабы уның арҡаһында тырпайып тора.

Ә диңгеҙ өҫтө балыҡтың йөрәгенән аҡҡан ҡанға буялған. Тәүҙә был тап ҡарайып торҙо, әйтерһең дә, зәңгәр һыуҙа бер миль тәрәнлегендә балыҡ көтөүе йыйылғайны. Унан ҡанлы тап йәйелде лә болотҡа оҡшап ҡалды. Ә һыуҙа көмөшһыу балыҡ тын ғына тирбәлә ине.

Ҡарт күҙ алды яңынан ҡараңғыланғанға тиклем балыҡтан ҡараштарын айырып ала алманы. Унан гарпун бауын битенгҡа ике ҡат ураны ла башын ҡулдарына һалды.

«Нимә булды был башыма? — тине ул, йөҙө менән кәмә моронона терәлеп. — Ҡарт инде мин, ныҡ арылды ла. Шулай ҙа туғанымдан да яҡын балыҡты үлтерҙем. Хәҙер иһә ҡара эште теүәлләйһе генә ҡалды.

Хәҙер мин балыҡты кәмәгә тағыр өсөн бау әҙерләргә һәм уны элмәк кеүек итеп бәйләргә тейешмен. Әгәр ҙә беҙ икәү булып, балыҡты һалыр өсөн кәмәне батырһаҡ, унан бөтөн һыуын тотош түккән хәлдә лә кәмә барыбер уны күтәрә алмаҫ ине. Кәрәк-яраҡты әҙерләгәс, балыҡты кәмәгә тартып килтерермен дә, ныҡлап бәйләрмен, унан елкәнде ҡуйып, ҡайтыу яғына ыңғайларға кәрәк булыр».

Ҡарт, бауҙы балыҡтың айғолағы менән ауыҙы аша үткәреп, башын моронға бәйләп ҡуйыр өсөн, уны бортҡа яҡынайта башланы.



*— Нимә булды был башыма? — тине ул, йөҙө менән кәмә моро-нона терәлеп.*

«Туйғансы бер ҡарап, ҡапшап ҡараһаң ине: был ниндәй балыҡ икән? — тип уйланы үҙе. — Ул минең байлығым бит. Гарпун йөрәгенә ҡаҙалды, шикелле. Ярай, яҡыныраҡ тартып, кәмәгә бәйлә лә ҡойроғона элмәк кейҙер. Уны кәмәгә нығытыр өсөн, уртанан алырға тура килер».

— Йә, ҡарт, эшкә тотон, — тине ул үҙ-үҙенә, шешәнән бер йотом һыу эскәс. — Хәҙер, көрәш тамамланғас та, бик күп ҡара эш ҡалды әле.

Ҡарт тәүҙә күккә, унан балыҡҡа ҡарап ҡуйҙы. Ҡояшҡа айырыуса ныҡ иғтибар итте. «Әле саҡ төш ауып бара. Ә пассат көсәйә. Ҡармаҡептәрен бәйләп тороп булмаç инде. Малай менән бергәләп өйҙә йүнәтербеҙ әле».

— Йә, балыҡ, бында кил әле!

Тик балыҡ уны тыңламаны, тулҡында яй ғына тирбәлеүен белде. Ҡарттың үҙенә кәмәне уға яҡынайтырға тура килде. Яҡыныраҡ килеп, балыҡтың башы кәмәнең мороно менән тигеҙләнгәс, ҡарт уның мөһабәтлегенә тағы бер хайран ҡалды. Ул гарпун бауын битенгтан ысҡындырып алды. Уның бер осон балыҡтың айғолағынан индереп, ауыҙы аша үткәрҙе, шунан ҡылыс моронона уратты, йәнә айғолаҡ аша үткәрҙе, тағы ҡылысҡа ураны, унан битенгҡа диңгеҙ төйөнө менән бәйләне. Бауҙың ҡалған өлөшөн ҡырҡып алып, балыҡтың ҡойроғонан нығытып бәйләр өсөн, кәмәнең ҡойроғона күсте. Ҡукшел-көмөш төçтәге балыҡ саф көмөшкә әйләнде, ирҙәр усы киңлегендәге фиолет таçмалары иһә аҡһыл сирень төçөнә инде. Уның перископ көҙгөһө кеүек күҙҙәре тәре походына юлланған изге кешеләрҙеке кеүек күндәм һәм сабыр ине.

— Мин уны башҡа төрлө үлтерә алмаç инем, — тине ҡарт.

Һыу эскәс, хәл инеп киткәндәй булды. Хәҙер ҡарт һушын юғалтмаçын белә ине, зиһене лә асылды. «Был ярты тоннанан да кәм тартмай, — тип самаланы ҡарт, — Ә, бәлки, күберәктер ҙә. Әгәр ҙә өстән ике өлөшө ит булып, ҡаҙағын утыҙар центтан ғына һатҡанда ла күпме табыш килтерер икән?»

— Ҡәләмһеҙ осона сығып булмаç, — тине ҡарт. — Быньң өсөн баштың саф булыуы кәрәк. Шулай ҙа бөйөк Ди Маджио бөгөн минең менән ғорурлана алыр ине. Дөрөç, үксәмдә

һөйәк сөйәле юҡ. Әммә арҡам менән ҡулдарым ныҡ ауыртты. Белергә ине, һөйәк сөйәле нисек була икән? Бәлки, ул беҙҙә лә барҙыр, тик беҙ белмәйбеҙ генәлер?

Ҡарт балыҡты кәмә моронона, ҡойроғона һәм ултырғысҡа бәйләне. Балыҡ шул тиклем мөһабәт ине, хатта ҡартҡа кәмәһен ҙур караптың бортына бәйләп ҡуйғандай тойолдо. Балыҡтың асылып торған ауыҙы кәмәгә йөҙөргә ҡамасауламаһын өсөн, ҡарт бау менән уның аҫҡы яңағын морон ҡылысына тарттырып бәйләне. Шунан һуң мачтаны ҡуйып, гафель урынына бер таяҡты яйланы ла шкотты тарттырып бәйләне. Ямаулы елкәнгә һауа тулыу менән үк кәмә алға ҡуҙғалды. Ҡарт, ҡойроҡҡа ҡырын ятҡан килеш, көньяҡ-көнбайышҡа йөҙҙө.

Көньяҡ-көнбайышты билдәләр өсөн уға компастың кәрәге юҡ ине. Пассаттың ҡайһылай иҫкәнен һәм елкәндең нисек ҡабарыуын тойоу ҙа етә. «Ҡармаҡ һалырға кәрәктер, моғайын, ялтыратып берәй балыҡ ҡаптырмаммы? Юғиһә, ашарға бер нәмәм дә юҡ бит». Тик ул ялтырма тапманы, ә сардиналар еҫләнгәйне. Шул саҡ ул, һыу үҫемлектәре янынан үтеп барышлай, багор менән бер услам һары тәлгәште эләктереп алды ла һелкетеп ҡараны. Унан кәмәгә бәләкәй генә креветкалар ҡойолдо. Улар тиҫтәнән артыҡ ине, бөрсә кеүек кескәй генә аяҡтарын ҡыймылдатып һикрәндәргә тотондолар. Ҡарт уларҙы ике бармағы менән генә тотоп баштарын өҙөп ырғытты ла, ҡабығы-ние менән тотошлай сәйнәп йотто. Креветкалар ваҡ ҡына, әммә ҡарт уларҙың туҡлыҡлы икәнен белә, етмәһә, үҙҙәре иҫ киткес тәмле лә. Шешәлә саҡ ҡына һыу ҡалғайны әле. Креветка ашағас, ҡарт шуның дүрттән бер өлөшөн эсте.

Балыҡтың ауыр булыуына ҡарамаҫтан, кәмә еңел бара. Ҡарт румпелде терһәге менән генә тотоп, кәмәне тейешле йүнәлешкә бора. Уға балыҡ һәр саҡ күренеп бара, ә үҙенең ҡулдарына ҡараһа йәки арҡаһы менән кәмәгә тейһә, быны төш түгеллегенә ышана.

Һуңғараҡ хәле мөшкөлләнә төштө һәм ҡартҡа барыһы ла төштә булған кеүек тойолоп китте. Быға тиклем, балыҡ һыуҙан ырғып сыҡҡас, диңгеҙгә ҡабат ҡолағансы һауала аҫылынып торғанда ла ҡартҡа ныҡ ғәжәп тойолғайны. Ул хат-

та күҙҙәренә ышанмай торҙо. Хәйер, ул саҡта ҡарт бөтөнләй насар күрә башлағайны, әле иһә күҙҙәре тағы һәйбәтләнде. Хәҙер ул балыҡтың ысын икәнен, арҡаһы менән ҡулдарының ауыртыуы ла төш түгеллеген белә. «Ҡулдар тиҙ уңала ул, — тип уйланы ҡарт. — Яраларға бысраҡ инмәһен өсөн ҡанын етерлек ағыҙҙым, ә тоҙло һыу дауалар. Диңгеҙ ҡултығының ҡара һыуы — донъяла иң һәйбәт табип. Тик бына зиһенем генә сыуала күрмәһен ине! Ҡулдарым үҙҙәренә тейешлене эшләне, кәмә һәйбәт бара. Балыҡтың ауыҙы йомоҡ, ҡойроғон тура тота, беҙ туғандар кеүек йәнәш йөҙәбеҙ».

Уның аңы тағы аҙыраҡ томалана төштө: «Ә беҙҙең ҡайһыбыҙ тартып бара һуң — мин унымы, әллә ул минеме, — тип икеләнде. — Әгәр мин уны һөйрәтеп барһам, аңлашылыр ине. Йәки ул, үҙенең абруйын төшөрөп кәмәлә ятһа, бөтәһе лә аңлашылыр ине. Әммә беҙ, бер-беребеҙгә нык итеп сырмалған килеш, йәнәш йөҙәбеҙ. Әгәр ҙә уға шулай оҡшай икән, мине тартып барһын әйҙә. Мин бит уны хәйлә менән генә еңдем, ә уның миңә ҡарата бер ниндәй ҙә мәкере булманы».

Улар шулай йөҙә бирҙе. Ҡарт ҡулдарын тоҙло һыуҙа сайҡаны: уйҙарын сыуалтмаҫҡа тырышты. Күк йөҙөндә төркөм-төркөм аҡ болоттар ағыла, уларҙан өҫтәрәк ҡауырый болоттар йөҙә: ҡарт уларға ҡарап елдең төнө буйы иҫәсәген тоҫмалланы. Ул әленән-әле балыҡҡа ҡарап ала, уның ысынлап та төш кенә булмағанын тикшерә. Ҡайтыр юлға сығып, бер сәғәт ваҡыт үткәс, уны беренсе акула ҡыуып етте.

Акуланың ҡыуып етеүе осраҡлы түгел ине. Балыҡтың ҡаны тәүҙә ҡара болот кеүек ҡуйырып торҙо, унан тотош миль тәрәнлегендә һыуға таралды. Тәрәндә йөҙгән акула, ҡан еҫен һиҙеп, тиҙ генә өҫкә ҡалҡты һәм, һис бер ҡурҡыуһыҙ, диңгеҙҙең зәңгәр киңлеген ярып ҡояшҡа сыҡты. Унан тағы һыуға сумды, йәнә ҡан еҫен тойҙо һәм кәмә менән балыҡ үҙҙәренең артынан ҡалдырған эҙ буйынса йөҙҙө. Ҡайһы ваҡыт ул эҙҙе юғалтып торҙо, әммә яңынан тапты, йә уның һиҙелер-һиҙелмәҫ еҫен тойоп туҡтауһыҙ эҙәрлекләне. Был диңгеҙҙә иң етеҙ йөҙгән балыҡтар кеүек үк йөҙөр өсөн яратылған ҙур мако акулаһы ине. Ауыҙын иҫкә алмағанда, ул ғәйәт матур. Арҡаһы

ҡылыс балыҡтыҡы кеүек үк зәңгәр, эсе көмөш, тиреһе шыма һәм күркәм, ғөмүмән, ныҡ ҡымтылған oлoғара яңаҡтарын күрмәгәндә, уны ҡылыс-балыҡҡа оҡшатырға була. Ул, һыуҙы үҙенең бейек арҡа йөҙгөсө менән еңел ярып, диңгеҙ өҫтөнән тиерлек йөҙә ине. Ныҡ ҡымтылған ике ҡатлы ирендәре артында һигеҙ рәт үткер тештәре ҡыйышыраҡ булып теҙелеп киткән. Улар күпселек акулаларҙыҡы кеүек ғәҙәти пирамида рәүешендә түгел, ә януар тырнаҡтары кеүек тырпайған кеше бармаҡтарына оҡшаған. Оҙонлоғо менән ул ҡарттың бармаҡтарынан һис тә кәм түгел, өҫтәүенә, ике яҡтан бәке йөҙө кеүек үткер. Акула диңгеҙҙәге бер ниндәй дошманға ла бирешмәгән етеҙ, көслө һәм яҡшы һаҡлана белгән балыҡтарҙы ла ашарлыҡ итеп яратылған. Ул табыштың яҡынлығын тойоп ашыға, күк төҫтәге арҡа йөҙгөсө һыуҙы ҡылыстай ҡырҡып бара.

Ҡарт, күреү менән, был акуланың теләһә ниндәй мәкергә барасағын аңланы. Ул гарпунын әҙерләне, уның бауын битенгҡа бәйләп, йыртҡыстың яҡынайғанын көттө. Бау ҡыҫҡа ине, сөнки балығын бәйләгән ваҡытта байтаҡ ҡына өлөшө киҫеп алынғайны.

Ҡарттың зиһене яңынан яҡтырҙы, үҙен өмөт менән артыҡ йыуатмаһа ла, көрәшергә әҙер ине. «Эшем үтә уңай киткәйне шул, гел генә улай бармаҫы билдәле ине», — тип уйланы ҡарт.

Акуланың яҡынайыуын көткән саҡта ҡарт балығына ҡарап алды. «Былар барыһы ла төш кенә булһа, яҡшыраҡ булыр ине, моғайын. Мин уға үҙемә һөжүм итергә ҡамасаулай алмайым, бәлки, исмаһам, үлтерә алырмын. Dentuso*, — тип уйланы ул. — Инәңде үләт һуҡҡыры!»

Акула ҡойроҡҡа яҡын уҡ килде, балыҡҡа ырғылғанында ҡарт уның ҙур итеп асылған ауыҙын һәм сәйер күҙҙәрен абайлап ҡалды, ҙур балыҡтың ҡойроғонан өҫтәрәк тештәрҙең иткә батып шаҡылдауын ишетте. Акуланың башы һыу өҫтөнән ҡалҡып тора. Бына башы артынан арҡаһы ла күренде. Ҡарт, акуланың яңаҡтары ҙур балыҡтың итен шытырҙатып ҡайырғанын ишетеп, осло гарпунын акуланың күҙе менән морон

---

* Dentuso *(исп.)* — акуланың төрө.

һыҙығы киҫешкән еренә ҡаҙаны. Асылда акуланың башында ундай һыҙыҡтар юҡ. Ослайып торған ауыр зәңгәрһыу башы, ҙур күҙҙәре һәм убырҙыҡы кеүек туймаҫ имәнес ауыҙы ғына бар. Әммә ошо урында акуланың мейеһе урынлашҡан. Ҡарт гарпунын шунда сөйҙө. Ҡанһырап ҡатҡан яралы ҡулдары менән гарпунын ҡыҫып тотҡан килеш, бер нимәгә лә өмөт итмәйенсә, барлыҡ көсөн йыйып, ярһыу тәүәккәллек менән нәҡ баш мейеһе тәңгәленә сәнсте.

Йыртҡыс шунда уҡ арҡаһы менән әйләнеп төштө, ҡарт уның тонған күҙҙәрен күрҙе. Унан акула йәнә бер тапҡыр әйләнде һәм гарпундың бауы кәүҙәһенә ике тапҡыр уралды. Ҡарт уның үле икәнен аңланы. Тик акула үҙе генә быны менән килешкеһе килмәне. Арҡаһында ятҡан килеш ҡойроғо менән һуға, тештәрен шаҡылдата һәм уҙыш кәмәһе кеүек һыуҙы күбекләндерә ине. Диңгеҙҙең акула ҡойроғо шапылдатҡан ере ап-аҡ булды.

Акула кәүҙәһенең дүрттән өс өлөшө менән һыу өҫтөнә күтәрелде, гарпун бауы тартылды, ҡалтыранды һәм, ниһайәт, шартлап өҙөлдө. Акула бер мәлгә һыу өҫтөндә сайҡалып ятты, ҡарт унан күҙен алманы. Шунан һуң ғына йыртҡыстың үле кәүҙәһе диңгеҙгә батты.

— Ул үҙе менән балыҡтың бер ҡаҙаҡтай итен алып китте, — тине ҡарт.

«Гарпуным менән ҡалған епте лә диңгеҙ төбөнә алып китте, — тип өҫтәне уйынан ғына. — Ә балыҡтан йәнә ҡан аға башланы. Был акула артынан башҡалары ла килеп етәсәк».

Ҡарттың ғәрипләнгән балыҡҡа ҡарағыһы ла килмәне. Акула балыҡҡа ырғылғанда, уны үҙенә ташланғандай тойғайны.

«Шулай ҙа мин балығыма ташланған акуланы үлтерҙем, — тип уйланы ул. — Был мин күргән dentusoларҙың иң ҙуры ине. Ә бит мин үҙ ғүмеремдә акулаларҙы аҙ күрмәнем.

Эшем гел уңып торҙо шул. Артабан былай дауам итә алмай ине. Быларҙың барыһы ла төш кенә булһа, ҡайһылай һәйбәт булыр ине: бер ниндәй ҙә балыҡ тотмағанмын, ә гәзит түшәлгән карауатымда яңғыҙым ғына йоҡлап ятам».

— Әммә әҙәм балаһы еңелер өсөн яратылмаған, — тине ул. — Кешене юҡ итеп була, ә еңеп булмай.

«Шулай ҙа был балыҡты үлтереүем йәл, — тип уйланы ул. — Миңә бик ауырға тура киләсәк, етмәһә, гарпунымдан да яҙҙым. Dentuso — етеҙ һәм аяуһыҙ, аҡыллы һәм көслө мәхлүк. Әммә мин унан аҡыллыраҡ булып сыҡтым. Ә, бәлки, бары тик яҡшыраҡ ҡоралланған ғына булғанмындыр».

— Уйланырға ярамай, ҡартлас, — тип ҡысҡырып әйтеп ҡуйҙы ул. — Ел ыңғайына йөҙ ҙә, бәлә-ҡаза килһә — ҡаршыла.

Үҙен ағымдың уртаһына ингәс нимә көткәнен дә яҡшы белә ине. Тик бер ниндәй ҙә сараһы юҡ.

— Дөрөҫ түгел, сара бар, — тине ул. — Бысағыңды ишкәк һабына бәйләйһең — бына тигән ҡорал була.

Елкән бауына аяғы менән баҫып, румпелде ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырҙы ла эшкә тотондо.

— Бына бит, — тине. — Ҡарт булһам да, исмаһам, ҡоралһыҙ түгелмен.

Ел көсәйгәс, кәмә етеҙерәк китте. Ҡарт балыҡтың башына ғына ҡарап барҙы. Һәм күңелендә өмөт сатҡылары ҡабынды.

«Өмөттө юғалтыу — алйотлоҡ, — тип уйланы ул. — Етмәһә, был гонаһ та булһа кәрәк. Ярай, гонаһмы, түгелме, уйлап тороуҙың кәрәге юҡ. Донъяла бынан башҡа ла уйлар нәмә күп. Дөрөҫөн әйткәндә, мин гонаһ тигәндәрен аңлап та етмәйем. Аңламайым да, ышанмайым да, буғай. Бәлки, балыҡты үлтереү гонаһ булғандыр. Тамаҡ аҫрау һәм башҡа байтаҡ кешене туйҙырыр өсөн үлтерһәм дә, гонаһтыр, моғайын. Ул саҡта, һин нимә генә эшләһәң дә, гонаһ булып сыға. Шулай булғас, нимә гонаһ, нимә гонаһ түгел, тип уйлауҙың кәрәге юҡ. Хәҙер был хаҡта уйлау һуң да инде. Әйҙә гонаһ менән шуның өсөн аҡса алғандар буталһын. Гонаһ нимә була, тип улар уйлаһын. Балыҡ донъяға балыҡ булып яралған кеүек, һин балыҡсы булып тыуғанһың. Изге Петр ҙа, бөйөк Ди Маджионың атаһы кеүек үк, балыҡсы булған».

Әммә ҡарт үҙен уратып алған бөтә нәмәләр тураһында ла фекер йөрөтөргә ярата ине. Уҡырға гәзите лә, радиоһы ла булмағас, ул күп нәмә, шул иҫәптән гонаһ тураһында ла уйлай.

«Һин балыҡты үҙең астан үлмәҫ йәки кешеләргә һатыр өсөн генә үлтермәнең. Һин уны үҙеңдең ғорурлығың арҡаһында һәм балыҡсы булғаның өсөн үлтерҙең. Тере саҡта һин уны ярата инең, хәҙер ҙә яратаһың. Әгәр ҙә берәүҙе ратһаң, уны үлтереү гонаһ түгел. Ә, бәлки, киреһенсә, тағы ла ҙурыраҡ гонаһтыр?»

— Һин артыҡ күп уйлайһың, ҡарт, — тине ул үҙ-үҙенә.

«Әммә һин dentusoны рәхәтләнеп үлтерҙең, — тип уйланы ҡарт. — Ә ул, һинең кеүек үк, балыҡты үлтереп тамаҡлана. Ул башҡа акулалар кеүек емтеккә ташланмай, бирән тамаҡ та түгел. Ул — ҡурҡыуҙың нимә икәнен белмәгән матур һәм мөһабәт йыртҡыс».

— Уны мин үҙ йәнемде яҡлап үлтерҙем, — тип ҡысҡырып әйтте ҡарт. — Һәм мин уны бик оҫта үлтерҙем.

«Етмәһә, — тип уйланы ул, — һәр кем теләһә, теләмәһә лә кемделер, нимәнелер үлтерә. Балыҡ тотоу миңә үлергә ирек бирмәй, шул уҡ ваҡытта үлтерә бара, — тип уйланы ҡарт. — Малай — бына кем миңә үлергә ирек бирмәй. Үҙ-үҙеңде алдаштырма, ҡартлас».

Ул, борт аша үрелеп, балыҡтың акула умырған еренән ит йолҡоп алды ла сифаты һәм тәмен белер өсөн сәйнәп ҡараны. Ит, һыйыр ите кеүек ҡыҙыл булмаһа ла, ҡаты һәм һутлы. Ҡарт уны баҙарҙа ҡиммәткә һатып буласағын төшөнә ине. Тик диңгеҙ балыҡтың еҫен үҙе менән алып китә, ә ҡарт быға бер нисек тә ҡамасаулай алмай. Ул үҙенә еңел булмаясағын аңлай.

Ел һаман баҫылманы, төньяҡ-көнсығышҡа табан боролдо. Был уның оҙаҡҡа һүҙыласағын күрһәтә ине. Ҡарт алыҫҡа күҙ һалды, әммә елкән дә, берәй судноның төтөнөн йәки корпусын да күрмәне. Бары тик осар балыҡтар ғына диңгеҙҙән һикереп сыға һәм уның кәмәһенең морононан ике яҡҡа оса. Ара-тирә һыу үҫемлектәренең һары утрауҙары күренә. Хатта ҡоштар ҙа юҡ ине.

Ике акуланың береһен абайлағанда ҡарт кәмә ҡойроғона ярым ятҡан килеш, тиҙерәк көс йыйыр өсөн ит сәйнәй-сәйнәй ике сәғәттәй йөҙгәйне.

— Ай, — тине ҡарт, әйтерһең дә осло ҡаҙау ҡулын үтә тишеп ағасҡа ҡаҙалды.

— Galanos*! — тип ҡысҡырып ҡуйҙы.

Ҡарт беренсе йөҙгөстөң артынан һыуҙа икенсеһен дә абайланы. Өс мөйөшлө көрән йөҙгөстәренә һәм ҡойроҡтарын киң-киң болғап йөҙөүҙәренә ҡарап, уларҙың йәйенке моронло акулалар икәнен аңланы. Улар, балыҡтың еҫен тойоп, аслыҡтан аҡылдан шашҡан кеүек ҡыланалар һәм был илерткес еҫте бер юғалтып, бер табып киләләр ине.

Ҡарт, елкәндең бауын бәйләп, рулде нығытты. Унан бысаҡ беркетелгән ишкәген ҡулына алды. Ишкәкте еңелсә генә күтәрҙе, сөнки устары түҙгеһеҙ һыҙлай ине. Бармаҡтарын бер асып, бер йомоп яҙырға тырышты. Шунан һуң, ҡулдары бөтөн әрнеүҙе бер юлы тойһон да эштән ҡасып маташмаһын өсөн, ишкәкте ҡыҫып тотто — акулаларҙың йөҙөп килеп етеүен көттө. Ҡарт уларҙың киң моронло йәлпәк баштарын һәм аҡтан ҡаймаланған күкрәк йөҙгөстәрен күрҙе. Былар иң ҡәбәхәт, йән ҡыйғыс, асыҡҡанда теләһә ниндәй үләкһәнән дә ерәнмәгән, хатта ишкәктәрҙе һәм кәмәнең рулен тешләргә лә әҙер торған акулалар ине. Улар диңгеҙ өҫтөндә йоҡоға талған гөбөргәйелдәрҙең тәпәйҙәрен тешләп өҙә, ә ныҡ асыҡҡанда, хатта бер ниндәй балыҡ ҡаны йәки балыҡ лайлаһы еҫе сыҡмаһа ла, һыуҙа кешегә лә ташлана.

— Ай! — тине ҡарт. — Йәле, бындараҡ йөҙөгөҙ, galanos.

Улар яҡынлашты. Тик улар мако кеүек килмәне. Береһе һыу өҫтөндә ялт итеп күренде лә кәмә аҫтына сумды. Ҡарт акула балыҡты йолҡҡолағанда кәмәнең ҡалтыраныуын тойҙо. Икенсеһе, үҙенең ҡыҫыҡ һары күҙҙәре менән ҡартты күҙәтеп тора бирҙе лә, ярым түңәрәк ауыҙын иләмһеҙ ыржайтып, балыҡтың мако йолҡҡолаған еренә ташланды. Ҡартҡа уның көрән башынан арҡаһына табан һуҙылған һыҙығы асыҡ күренә ине. Ул ишкәктең башына беркетелгән бысағын акуланың мейеһе умыртҡаға тоташҡан ергә генә ҡаҙаны. Унан бысаҡты тартып сығарып, акуланың бесәйҙеке кеүек һары күҙенә сәнсте.

---

* Galanos *(исп.)* — акуланың төрө.

Акула балыҡ өҫтөнән шыуып төштө лә ауыҙындағы ит киҫәген йота-йота үлер өсөн аҫҡа батты.

Икенсе акуланың балыҡты йолҡҡолауына кәмә һаман дер һелкенеп тора ине. Ҡарт, елкән бауын ысҡындырып, кәмәгә боролорға ирек бирҙе. Аҫтан акула күренеү менән, борт аша үрелеп, бысаҡты сәнсте. Ҡорһаҡ тирәһенә тура килтерҙе, ләкин тире бысаҡҡа тәрән ҡаҙалырға бирмәне. Ҡаҙағанда ҡарттың ҡулдары ғына түгел, яурындары ла ауыртты. Ә акула ыржайған ауыҙын һыуҙан сығарҙы ла йәнә балыҡҡа ташланды. Шул саҡ ҡарт бысағын уның йәлпәк башының уртаһына ғына сәнсте. Тағы тартып сығарҙы, тағы сәнсте. Акула урттарын ҡыҫҡан килеш һаман балыҡта аҫылынып тора ине. Ҡарт бысағы менән уның һул күҙенә ҡаҙаны. Әммә акула балыҡты һаман ысҡындырманы.

— Ах, һин шулаймы? — тине ҡарт, бысаҡты мейе менән умыртҡа һөйәгенең уртаһына ҡаҙап. Быны эшләү ҡыйын булманы һәм ҡарт йыртҡыстың умыртҡалығын һындыра сәнскәнен тойҙо. Унан ишкәкте икенсе яғына әйләндереп, акуланың ауыҙына тыҡты, ҡайырып тештәрен асырға маташты. Ишкәкте борғосланы ла, акула балыҡты ысҡындырғас:

— Бар, бер миль тәрәнлегенә олаҡ. Унда дуҫыңды осратырһың. Ә, бәлки, ул һинең әсәйең булғандыр әле, — тине.

Ул, бысаҡтың йөҙөн һөрткөләп, ишкәкте кәмәгә һалды, елкәнде ҡуйҙы, уны ел ҡабарҡас, кәмәне ҡайтыр юлға борҙо.

— Улар балыҡтың, моғайын, дүрттән бер өлөшөн, өҫтәүенә, иң һәйбәт итләс ерен алып китте, — тине ул ауыҙ эсенән генә. — Быларҙың барыһы ла төштә генә булһын ине лә мин балыҡты тотмаһам икән. Былай килеп сығыуы үҙемә лә бик ҡыҙғаныс, балыҡ.

Ҡарт тынып ҡалды, хәҙер уның балыҡҡа ҡарағыһы ла килмәне. Һыуҙа йыуылып, ҡаны ағып барған балыҡ көҙгө артына буялған амальгама төҫөнә инә башлағайны инде.

— Миңә яр буйынан был тиклем үк алыҫҡа китмәҫкә кәрәк булған, — тине ул. — Былай хөрт килеп сығыуы йәл, балыҡ. Минең өсөн дә, һинең өсөн дә насар. Ярар, ауыҙ асып ултырма! — тип ҡырт киҫте ул үҙен. — Бысаҡты бәйләгән бау



*Ә акула ыржайған ауыҙын һыуҙан сығарҙы ла йәнә балыкҡка ташланды. Шул саҡ ҡарт бысағын уның йәлпәк башының уртаһына ғына сәнсте. Тағы тартып сығарҙы, тағы сәнсте.*

ҡырҡылмағанмы икән? Ҡулыңды рәткә индер, эшең бөтмәгән бит әле.

— Йәл, ҡайраҡты алмағанмын, — тине ҡарт ишкәк һабына бәйләнгән епте тикшереп. — Бысаҡ үткерләр өсөн ҡайраҡты алырға кәрәк булған.

«Һиңә бик күп нәмә алырға кәрәк булған, ҡартлас, — тип уйланы ул. — Алмағанһың шул. Хәҙер булмағанды уйларға ваҡыт юҡ. Булғаны менән ҡотолоу юлын эҙлә».

— Һай туйҙырҙың һин мине үҙеңдең кәңәштәрең менән, — тине ҡарт, үҙ-үҙенә ҡысҡырып.

Ул, румпелде ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, ике ҡулын да һыуға тыҡты.

Кәмә һаман алға йөҙҙө.

— Һуңғы акуланың күпме итте тәләфләгәнен бер Алла ғына белә, — тине ҡарт. — Тик балыҡ байтаҡ еңеләйҙе.

Ҡарттың балыҡтың йолҡҡоланған ҡорһағы тураһында уйлағыһы килмәне. Бая кәмә һелкенгән һайын балыҡтың ите умырылғанын һәм хәҙер диңгеҙҙә шоссе юлы кеүек киң ҡанлы эҙ ҡалғанын, уның донъялағы барлыҡ акулалар өсөн дә туптура юл икәнлеген ҡарт аңлай ине.

«Бындай балыҡ бер кешегә ҡыш буйына етер ине... Был турала уйлама, ҡарт! Ял ит, балығыңдың ҡалғанын иҫән-аман алып ҡайтып еткерер өсөн ҡулдарыңды дауала. Ҡулыңдан килгән ҡан еҫе, балыҡтың һыуға аҡҡан ҡаны менән сағыштырғанда, юҡ дәрәжәһендә. Хәйер, ҡулымдан ҡан аҡмай тиерлек. Яралары ла артыҡ тәрән түгел. Бер аҙ ҡаны аҡҡан икән — һул ҡул өсөн файҙаға ғына: көҙән йыйырмаҫҡа йәтеш.

Хәҙер нимә тураһында уйлайым икән? Бер нимә тураһында ла уйламай ғына бүтән акулаларҙы көтөүем яҡшыраҡ. Их, быларҙың барыһын да төшөмдә генә күргән булһамсы! Хәйер, ҡайҙан беләһең?! Бәлки, аҙағы яҡшы бөтөр».

Сираттағы акула яңғыҙы ғына килде. Быныһы ла киң моронлолар нәҫеленән ине.

Йыртҡыс кәмәгә үҙ утлыҡсаһына килгән сусҡа кеүек яҡынлашты. Тик сусҡаның бер ҡапҡанда кеше башын йоторлоҡ ауыҙы булмай.

Ҡарт уға балыҡҡа йәбешергә ирек бирҙе, шунан һуң ишкәк һабындағы бысағы менән башына ҡаҙаны. Әммә акула ҡапыл салҡан әйләнеп артҡа ташланғанда бысаҡ һынып сыҡты.

Ҡарт рулгә һырыҡты. Хатта акуланың бәләкәсәйгәндән-бәләкәсәйә барып батып барыуын да ҡарап торманы. Был күренеш уға оҡшай торғайны, әммә әле ҡарағыһы килмәне.

— Багорым ҡалды, — тине ул. — Тик унан ни файҙа? Унан башҡа ике ишкәк, румпель менән күҫәк бар.

«Бына хәҙер улар мине еңде, — тип уйланы ҡарт. — Акуланы күҫәк менән үлтерер өсөн мин бик ҡартмын. Шулай ҙа ишкәктәр, күҫәк менән румпель барҙа улар менән алышасаҡмын әле».

Ул тағы ҡулдарын тоҙло һыуға тыҡты. Ҡис яҡынлаша, тирә-яҡта тик күк йөҙө лә диңгеҙ генә күренә. Ел элеккенән көслөрәк иҫә, шуға күрә ҡарт тиҙҙән ерҙе күрергә өмөтләнде.

— Һин арының, ҡарт, — тине ул. — Йәнең арыны.

Ҡояш байыр алдынан уға акулалар тағын һөжүм итте. Ҡарт балыҡ ҡалдырған киң эҙ буйынса килгән көрән төҫтәге йөҙгөстәрҙе күрҙе. Улар эҙ юллап уңға-һулға ташланмай, туп-тура кәмәгә ҡарап, бер-береһе менән йәнәш килә.

Ҡарт румпелде нығытты, елкән бауын бәйләне лә ҡойроҡтағы таҡта аҫтынан күҫәген тартып сығарҙы. Был һынған ишкәктән ҡырҡып алынған ике фут ярымлыҡ күҫәкте ҡарт һыңар ҡуллап ҡына ныҡлап тота ала ине. Уң ҡулына ҡыҫып, акулаларҙың яҡынайғанын көттө. Улар икәү һәм икеһе лә galanos ине.

«Миңә тәүҙә алдағыһының балыҡҡа ныҡлап йәбешкәнен көтөргә кәрәк булыр, — тип уйланы ҡарт, — шул саҡта уның морон осона йәки маңлай һөйәгенә ҡундырырмын».

Ике акула ла бергә йөҙөп килде. Береһе, ауыҙын ҙур асып, тештәрен балыҡтың көмөш һымаҡ янбашына батырғас, ҡарт, күҫәген өҫкә күтәрҙе лә, йыртҡыстың йәлпәк башына ҡундырҙы. Ҡулы һығылмалы ҡатылыҡты тойҙо, әммә шул уҡ ваҡытта һөйәктең ҡатылығы ла һиҙелде. Ҡарт күҫәген яңынан күтәреп, акуланың морон осона һуҡты. Акула һыуға шыуып төштө. Икенсе акула, балыҡтың итен умырып алып,

ситкә тайпылырға өлгөргәйне. Хәҙер ауыҙын киң асып яңынан яҡынлашты. Балыҡҡа ташланғанда, ҡарт уның тештәре араһына ҡыҫылып ҡалған аҡ ит киҫәктәрен күрҙе. Ҡарт киҙәнде, тик башына ғына эләктерҙе.

— Йәле, galano, яҡыныраҡ кил, — тине ҡарт. — Тағы бер тапҡыр кил!

Акула йәнә балыҡҡа ташланды. Шапылдатып ауыҙын япҡан саҡта ғына ҡарт уға ҡундырҙы. Көсәгеҙ мөмкин тиклем өҫкәрәк күтәреп, йән көсөнә һуҡты. Был юлы күсәк баш һөйәгенең төбөнә тура килде. Ҡарт шул урынға ҡабат тондорҙо. Акула балыҡ итен һүлпән генә өҙөп алды ла төпкә китте.

Ҡарт, өҫкә сыҡмаҫтармы, тип көтөңкөрәп торҙо, ләкин улар башҡаса күренмәне. Бер аҙҙан ул акулаларҙың береһенең кәмә тирәһендә уралғанын абайланы. Ә икенсе акуланың йөҙгөсө юҡҡа сыҡҡайны.

«Уларҙы үлтерә алырмын тип уйламаған да инем, — тип уйланы ҡарт. — Элек алыр инем. Әммә икеһенә лә ярайһы ғына тамыҙҙым. Хәлдәре хәҙер бик шәптән түгелдер. Әгәр ҙә күсәкте ике ҡуллап тота алһам, тәүгеһен һис шикһеҙ үлтергән булыр инем. Хатта хәҙер, ошо йәшемдә лә».

Уның балыҡҡа ҡарағыһы килмәне, яртыһы ғына ҡалғанын белә ине. Ул акулалар менән алышҡан арала ҡояш байып өлгөргәйне.

— Тиҙҙән ҡараңғы төшәсәк, — тине ул. — Шул саҡ, моғайын, Гавана уттарының яҡтыһын күрермен. Әгәр көнсығышҡараҡ киткән булһам, яңы курорттарҙың береһенең утын шәйләрмен.

«Ярҙан үтә алыҫ түгелмендер, — тип уйланы ҡарт. — Халыҡ унда юҡҡа борсолмай микән? Хәйер, малайҙың ғына борсолоуы ихтимал. Тик ул минең көсөмә шикләнмәй бит! Өлкәнерәк балыҡсылар хәүефләнәләр, моғайын. Йәштәре лә... Мин бит һәйбәт кешеләр араһында йәшәйем».

Ҡарт башҡаса балыҡ менән һөйләшә алманы: ул бигерәк һеңгәҙәгәйне шул. Әммә башына ҡапыл яңы фекер килде.

— Ярты балыҡ, — тип өндәште уға. — Элекке балыҡ! Диңгеҙҙә шул тиклем алыҫҡа киткәнемә үҙем дә үкенәм. Ике-

беҙҙе лә һәләк иттем. Әммә беҙ һинең менән бик күп акулаларҙы дөмөктөрҙөк, яраланғандары тураһында әйтеп тә тормайым. Үҙ ғүмереңдә һиңә лә уларҙы бик күп үлтерергә тура килгәндер, ә, ҡарт балыҡ?! Башыңдағы ҡылыс юҡҡа ғына тырпайып тормайҙыр бит инде.

Ҡартҡа балыҡ тураһында, әгәр ҙә үҙ иркендә йөҙөп йөрөһә, акулаларҙы нимә эшләтә алыуы тураһында уйлау оҡшай ине.

«Акулалар менән алышыр өсөн уның ҡылысын ҡырҡып алырға кәрәк ине», — тип уйланы ул. Тик уның балтаһы, ә хәҙер инде бысағы ла юҡ.

«Әгәр ҙә балыҡтың ҡылысы миндә булһа, уны ишкәк һабына бәйләгәндә, бына тигән ҡорал булыр ине! Ул саҡта беҙ ысынлап та йыртҡыстар менән бергәләп һуғышыр инек. Әгәр ҙә улар төндә килһә, хәҙер ни эшләйһең инде? Нимә эшләй алаһың?»

— Һуғыша алам, — тине ул, — үлгәнсе һуғыша алам.

Әммә ҡараңғыла уттар ҙа, күк йөҙөндә уларҙың сағылышы ла күренмәне. Ел дә ул ҡабартҡан елкән генә бар ине.

Ҡарт үҙен үлгән кеүек хис итте. Ул, устарын бер-береһенә ҡыҫып, ауыртыу тойҙо. Тимәк, улар иҫән, асып-йомоп ҡараны, ауырталар, тимәк, иҫәндәр. Ул кәмә ҡойроғона һөйәлде лә үҙенең әлегә тере икәнен тойҙо.

«Ҙур балыҡты тотһам, уҡырмын, тигән барлыҡ доғаларҙы ла уҡырға кәрәк. Тик әлегә мин ныҡ арығанмын, — тип уйланы ул. — Тоҡто алып, яурыныма ябайым әле. Шунан да яҡшыһы булмаҫ».

Ул ҡойроҡта ятҡан килеш кенә кәмә менән идара итте һәм Гавана уттарының яҡтыһы күренгәнен көттө. «Әле балыҡтың яртыһы ҡалды, — тип уйланы ул. — Бәхетем булһа, бәлки, өйгә, исмаһам, уның алғы өлөшөн генә булһа ла алып ҡайтып еткерә алырмын. Минең дә юлым бер уңырға тейеш тәһә! Юҡ, — тине ул үҙ-үҙенә. — Ярҙан шул тиклем алыҫлашып, һин үҙеңдең бәхетеңә үҙең балта саптың».

«Юҡты һөйләмә, ҡартлас! — тип үҙен-үҙе бүлде ул. — Йоҡлама, рулде ҡара. Бәхетең йылмайыуы ла бик ихтимал әле».

— Әгәр берәй ерҙә һатһалар, ул бәхет тигәнен үҙемә саҡ ҡына булһа ла алыр инем дә бит, — тине ҡарт.

«Ә ниндәй аҡсаға алмаҡсы булаһың һуң? — тип һораны үҙенән. — Юғалған гарпунға, һынған бысаҡҡа йәки йәрәхәтләнгән ҡулдарыңамы?

Кем белһен инде! Һин бит бәхетте диңгеҙҙә уткәргән һикһән дүрт көнөңә һатып алырға теләгәйнең. Ысынлап та һатып ала яҙҙың бит...

Йыйын туҙға яҙмағанды уйламаҫҡа кәрәк. Бәхет кешегә төрлө ҡиәфәттә килә, уны танып буламы ни? Мин ул бәхеттең теләһә ниндәйен һатып алыр инем дә, күпме һораһалар, шул тиклем түләр инем. Гавана уттарын күрергә теләр инем, — тип уйланы ул. — Һин, ҡарт, бер юлы бик күпте теләйһең. Тик миңә хәҙер Гавана уттарынан башҡа һис ни кәрәкмәй».

Руль эргәһенә йәтешләберәк ултырғанда тәненең һыҙланыуы артҡанын тойғас, ысынлап та һаман иҫән икәнен аңланы.

Ҡала уттарының яҡтыһын ҡарт киске ундар тирәһендә күрҙе. Тәүҙә ул, ай ҡалҡыр алдынан була торғанса, күк йөҙөндә бөләңгерт яҡтылыҡ кеүек кенә күренде. Унан уттар көсәйгәндән-көсәйә барған ел ҡабартҡан тулҡындар өҫтөнән ап-асыҡ күренә башланы. Ҡарт кәмәһен ошо уттарға табан йүнәлтте һәм тиҙҙән Гольфстримға инергә өмөтләнде. «Бына шулай, бөтәһе лә бөттө, — тип уйланы ул. — Әлбиттә, улар миңә тағы һөжүм итәсәк. Әммә был ҡараңғыла ҡоро ҡул менән кеше нимә эшләй алһын?»

Уның бөтә тәне ҡыйралып килә, ә төнгө һыуыҡ йәрәхәттәрен һәм арыған аяҡ-ҡулдарының һыҙлауын көсәйтте. «Миңә бүтән һуғышырға тура килмәҫ, тип уйлайым, — тине ул. — Башҡаса һуғышырға тура килмәһә генә ярар ине!»

Әммә төн уртаһында ул тағы акулалар менән алышты һәм был юлы көрәштең файҙаһыҙ икәнен белә ине. Улар көтөүҙәре менән ябырылды, ә ҡарт һыу өҫтөндә уларҙың йөҙгөстәре һыҙған һыҙыҡтарҙы һәм балыҡты йолҡҡоларға ташланғанда ялтырап киткән яҡтылыҡты ғына күрҙе. Ул күҫәге менән йыртҡыстарҙың баштарына тондора һәм акулалар,

тештәрен шаҡылдатып, балыҡ итен аҫтан өҙгөләгәндә кәмәнең һелкенеүен тоя. Ул күҫәге менән күҙенә күренмәгән, бары тик ишетелгән һәм тойолған йыртҡыстарҙы ярһый-ярһый дөмбәҫләне. Шул саҡ ҡулынан уныһы ла ысҡынып китте.

Ҡарт румпелде уйынтыһынан йолҡоп алды ла, уны ике ҡуллап аймап, йәнә акулаларҙы туҡмарға тотондо. Әммә акулалар кәмәнең морононда ине инде. Улар балыҡҡа бер-бер артлы ла, барыһы бер юлы ла ташланып, һыуҙа яҡтырып күренгән ит киҫәктәрен йолҡҡослай. Китеп торалар ҙа, кире боролоп, балыҡҡа тағы, тағы ырғылалар.

Ниһайәт, акулаларҙың береһе балыҡтың башына уҡ йөҙөп килде. Шул саҡ ҡарт ҙур балығынан бер нәмә лә ҡалмағанын аңланы. Ул румпель менән акуланың моронона, балыҡтың баш һөйәгенә тештәре батҡан еренә генә ҡундырҙы. Бер ике, өс тапҡыр һуҡты. Румпелдең ярылып сыҡҡанын ишеткәс, акуланы уның һыныҡ һабы менән төйҙө. Ҡарт ағастың иткә ҡаҙалғанын тойҙо һәм, һаптың осло икәнен белеп, уны яңынан тартып сығарҙы ла йәнә һуҡты. Акула, балыҡты ташлап алыҫҡараҡ йөҙөп китте. Был көтөүгә менән һөжүм иткән акулаларҙың һуңғыһы ине. Балыҡтың башҡа ашарлыҡ ере ҡалмағайны.

Ҡарт саҡ-саҡ тын ала ине, ауыҙында сәйер бер тәм тойҙо. Ул тәм баллы ла кеүек, баҡыр тәме лә сыҡҡандай. Ҡарт бер аҙға ҡурҡып ҡалды. Әммә тиҙҙән барыһы ла уҙҙы. Ҡарт һыуға төкөрҙө.

— Ашағыҙ, galanos, тығынығыҙ! Төшөгөҙҙә, кешене үлтерҙек, тип күрегеҙ.

Ҡарт үҙенең хәҙер инде ысынлап та еңелгәнен төшөндө. Яңынан ҡойроҡҡа килгәс, румпелдең һынығы уйынтыһына ингәнен һәм һис юғында шуның менән дә кәмәне алып ҡайтасағын аңланы.

Ҡарт, яурынын тоҡ менән ябып, кәмәне ҡайтыу яғына йүнәлтте. Кәмә хәҙер еңел генә бара, ә ҡарт бер нимә лә уйламай ҙа, тоймай ҙа. Хәҙер уға барыбер. Тик кәмәне генә тиҙерәк һәм имен-аман тыуған ярҙарына алып ҡайтып еткерәһе ине.

Таң алдынан акулалар, өҫтәлдәге ҡалдыҡҡа ташланған бирәндәр кеүек, балыҡ һөлдәһенә йәнә ташланды. Әммә ҡарт

уларға иғтибар итмәне. Ул үҙенең кәмәһенән башҡа бер нәмәгә лә диҡҡәт бирмәне. Ҙур балыҡтың ауырлығы тотҡарламағас, кәмәнең еңел һәм иркен барғанын тойҙо.

«Яҡшы кәмә, — тип уйланы ул. — Румпелде иҫәпләмәгәндә, бөтә ере лә төҙөк. Ә румпелде яңынан ҡуйырға була».

Ҡарт йылы ағымға килеп ингәнен тойҙо. Уға яр буйындағы ҡасабаларҙың уттары күренә башлағайны инде. Үҙенең ҡайҙалығын белә, хәҙер өйгә ҡайтып етеүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡ.

«Ел генә ысын дуҫ, — тип уйланы ул. Унан өҫтәне: — Хәйер, һәр ваҡыт түгел. Мөһабәт диңгеҙ ҙә — унда ла дуҫтарыбыҙ ҙа, дошмандарыбыҙ ҙа тулы. Ә түшәк... Түшәк — минең дуҫ. Эйе, эйе, ғәҙәти түшәк. Түшәккә ятыу — бөйөк эш! Ә еңелһәң, ҡайһылай еңел булып китә! Былай еңел икәнен белмәгән дә инем мин...»

— Кем һине еңде һуң, ҡарт? — тип һораны ул үҙенән. — Бер кем дә еңмәне, — тип яуапланы. — Бары тик диңгеҙгә генә артыҡ алыҫ киткәнмен.

Кәмә бәләкәй ҡултыҡҡа ингәндә, Террасалағы уттар һүнгәйне инде. Ҡарт бөтәһенең дә йоҡлағанын аңланы. Ел, көсәйгәндән-көсәйә барып, хәҙер бик ҡаты иҫә ине. Әммә гавандә бик тыныс. Ҡарт кәмәһен ҡая төбөндәге ваҡ таштар янына алып килеп туҡтатты. Ярҙам итерлек кеше булмағанлыҡтан, ул ярға мөмкин тиклем яҡыныраҡ килергә тырышты. Шунан кәмәнән төштө лә уны ҡая ташҡа бәйләп ҡуйҙы.

Мачтаны алғас, уға елкәнде урап бәйләне. Унан мачтаны яурынына һалып, тауға атланы. Бына шул саҡта үҙенең ни тиклем ныҡ арығанын тойҙо. Аҙға ғына туҡтап, артына боролоп ҡараны. Урам фонары яҡтыһында ул балыҡ һөлдәһенең кәмә артындағы мөһабәт ҡойроғон күрҙе. Уның ҡараштары балыҡтың умыртҡа һөйәгенең яланғасланып ҡалған аҡ һыҙығына, ҙур башына һәм тырпайып торған ҡылыс морононоң ҡараңғы шәүләһенә төштө.

Ҡарт йәнә өҫкә үрмәләй башланы. Ҡалҡыулыҡты үткәс, ергә ҡоланы һәм иңбашына мачтаны һалған килеш бер аҙ ята бирҙе. Унан аяғына баҫырға теләне, тик был еңел түгел ине,

шуға юлға ҡарап ултыра бирҙе. Юлдан үҙ мәшәҡәттәре менән китеп барған бесәй юрғалап үтте. Ҡарт уны ҡарашы менән оҙатты, унан буш юлға текләне.

Ниһайәт, ул, мачтаны ергә ташлап, тороп баҫты. Мачтаны алып, тағы яурынына һалды ла өҫкә табан атланы. Аласығына еткәнсе биш тапҡыр туҡтап ял итергә тура килде.

Өйөнә ингәс, мачтаны стенаға һөйәне, ҡараңғыла һыулы шешәне табып эсте. Унан карауатына ятты. Одеялын тартып, яурынына, арҡаһына һәм аяҡтарына япты ла, башын гәзиткә төрәп, ҡулдарын устарын өҫкә ҡаратҡан килеш һуҙып, йоҡлап китте.

Иртәнсәк аласыҡҡа малай килгәндә йоҡлай ине әле ул. Ел көслө булғанға кәмәләр диңгеҙгә сыҡманы. Шуға малай һуң уянды. Унан, көндәгесә, ҡарттың аласығына килде. Ҡарттың тын алғанына ышанғас, уның ҡулдарын күреп, илап ебәрҙе. Кофе алып килер өсөн шым ғына аласыҡтан сыҡты ла юл буйы илап барҙы.

Кәмә эргәһенә бик күп балыҡсылар йыйылғайны. Бөтәһе лә кәмәгә бәйләнгән һөлдәне ҡарай, береһе, салбар балаҡтарын төрөп, һыуға уҡ ингән, бау менән һөлдәне үлсәй.

Малай улар янына төшөп торманы, сөнки унда булғайны инде. Бер балыҡсы уға кәмәне ҡарап торорға вәғәҙә итте.

— Ҡарттың хәле нисек? — тип ҡысҡырҙы балыҡсыларҙың береһе.

— Йоҡлай, — тине малай. Бөтәһе лә уның илағанын күрһәләр ҙә, уға барыбер ине. — Уны борсомаҫҡа кәрәк.

— Морононан алып ҡойроғона тиклем ун һигеҙ фут! — тип ҡысҡырҙы уға балыҡты үлсәгән балыҡсы.

— Кәм булмаҫ, — тине малай.

Ул, Террасаға инеп, бер банка кофе һораны.

— Эҫе кофе менән күберәк шәкәр һәм һөт бирһәгеҙ ине.

— Тағы берәй нәмә ал.

— Кәрәкмәй. Уға нимә ашарға ярар икән, һуңынан ҡарармын.

— Үәт балыҡ, исмаһам, — тине Хужа. — Кеше ышанмаҫлыҡ, ә! Һин дә кисә ике яҡшы ғына балыҡ тотҡанһың.



*Ҡәмә эргәһенә бик күп балыҡсылар йыйылғайны. Бөтәһе лә кәмәгә бәйләнгән һөлдәне ҡарай, береһе, салбар балаҡтарын төрөп, һыуға уҡ ингән, бау менән һөлдәне үлсәй.*

— Эй, ул балыҡтарҙы! — тине малай һәм тағы ла илап ебәрҙе.

— Берәй нимә эскең килмәйме? — тип һораны хужа.

— Рәхмәт, — тине малай. — Балыҡсыларға әйт әле, Сантьягоны борсомаһындар. Мин тағы килермен.

— Ҡартҡа әйт, миңә бик йәл.

— Рәхмәт, — тине малай.

Малай аласыҡҡа эҫе кофе алып барҙы ла ҡарт уянғансы уның янында ултырҙы. Бер тапҡыр малайға ҡарт уяна башлаған кеүек тойолғайны, ләкин ул шунда уҡ ауыр йоҡоға талғас, кофены йылытыр өсөн күршенән үтескә утын һорарға китте.

Ниһайәт, ҡарт уянды.

— Торма, ят, — тине уға малай. — Бына, эс!

Ул стаканға кофе ҡойҙо.

Ҡарт, стаканды алып, кофе эсте.

— Мин бирештем, Манолин, — тине ул. — Улар мине еңде.

— Ә ул үҙе һине еңә алмаған бит! Балыҡ бит еңә алмаған!

— Юҡ. Уныһы дөрөҫ. Быныһы һуңынан булды.

— Педрико кәмә менән әйберҙәрҙе ҡарап торорға булды. Башын нимә эшләтергә уйлайһың?

— Педрико тураҡлаһын да йәтмәһенә ем итеп алһын.

— Ә ҡылыс?

— Теләһәң, үҙеңә иҫтәлек итеп ал.

— Теләйем, — тине малай. — Ә хәҙер артабан нимә эшләү тураһында һөйләшәйек.

— Мине эҙләнеләрме?

— Әлбиттә. Яр буйы һаҡсылары ла, самолеттар ҙа.

— Океан ҙур шул, ә кәмә бөтөнләй бәләкәс кенә, уны күреп тә булмай, — тине ҡарт. Диңгеҙ менән үҙенән башҡа ла һөйләшер кешең булыуҙың ҡайһылай рәхәт икәнен тойҙо. — Мин һине бик һағындым, Манолин, — тине ул. — Һин берәй нимә тоттоңмо?

— Беренсе көндө бер балыҡ. Икенсе көндө тағы берҙе һәм өсөнсө көндө — икене.

— Бик яҡшы!

— Хәҙер балыҡҡа яңынан бергә йөрөй башларбыҙ.

— Юҡ. Мин — даланһыҙмын. Юлым барыбер уңмаҫ.

— Төкөр һин ул даланға! — тине малай. — Мин үҙем һиңә бәхет килтерермен.

— Ә ата-әсәң ни тиер?

— Тимәгәйҙәре. Кисә ике балыҡ тоттом бит. Инде бергә балыҡсылаясаҡбыҙ, сөнки миңә һинән бик күп өйрәнергә кәрәк.

— Яҡшы сәнскес табып, уны һәр ваҡыт үҙебеҙ менән йөрөтөргә кәрәк булыр. Бысағын иҫке «Форд» рессорынан яһарға була. Уны Гуанабакоала үткерләрбеҙ. Ул бик үткер булырға тейеш, тик утта ҡыҙҙырырға ярамай, юҡһа, тиҙ һыныр. Минең бысағым һынды бит.

— Мин һиңә яңы бысаҡ табырмын, рессорҙы үткерләрмен. Был көслө brisa* тағы нисә көнгә һуҙылыр икән?

— Моғайын, бер өс көнгә барыр. Бәлки, оҙаҡҡараҡ та һуҙылыр.

— Уға тиклем бөтәһе лә тәртиптә булыр, — тине малай. — Ә әлегә ҡулыңды дауала.

— Уларҙы нишләтергә икәнен беләм. Төндә ниндәйҙер сәйер шыйыҡса төкөрҙөм, күкрәгемдә ниҙер шартлағандай булды.

— Уныһын да дауала, — тине малай. — Ә хәҙергә ятып тор. Мин һиңә таҙа күлдәк килтерәм. Ашарыңа ла алып киләм.

— Мин юҡта килгән берәй гәзит тә ал, — тип үтенде ҡарт.

— Һин тиҙерәк дауаланырға тырыш, сөнки миңә һинән бик күп нәмәгә өйрәнергә кәрәк. Ә һин мине донъялағы бөтә нәмәгә лә өйрәтә алаһың. Яраларың нык һыҙланымы?

— Бик тә, — тине ҡарт.

— Тамағыңа ла, гәзит тә алып килермен. Ял ит, ҡарт. Аптекаға инеп ҡулдарыңа берәй дарыу һорармын.

— Педрикоға әйтергә онотма, балыҡтың башын үҙенә алһын.

— Онотмам.

Аласыҡтан сығып, иҫке таш юл буйлап түбән төшкәндә, малай яңынан илап ебәрҙе.

---

* Brisa *(исп.)* — яр еле.

... Был көндө Террасаға бер төркөм туристар килгәйне. Улар бухтаға инә торған урында көнсығыш еле күтәргән бейек-бейек тулҡындарҙың сәсрәүен ҡарап торғанда, бер ханым буш һыра һауыттары, үле медузалар араһында ҙур ҡойроҡло ниндәйҙер бик оҙон аҡ умыртҡа һөйәгенең ярға килеп бәрелгән тулҡындарҙа сайҡалыуын күрҙе.

— Был нимә ул? — тип һораны ул официанттан ҙур балыҡтың умыртҡа һөйәгенә — тиҙҙән тулҡын алып китәсәк ташландыҡҡа — ымлап.

— Tiburon, — тине официант. — Акулалар, — тип ул ханымға нимәләр булғанын аңлатырға теләне.

— Акулаларҙың шундай зифа бөгөлгән ҡойроғо була икән тип белмәгәйнем!

— Эйе, мин дә белмәй инем, — тип килеште уның юлдашы.

Өҫтә, үҙенең аласығында, балыҡсы ҡарт тағы йоҡлай ине. Ул йәнә йөҙтүбән йоҡлай, ә малай уны һаҡлай. Ҡарт төшөндә арыҫландарҙы күрә ине.



## РУХИ НЫҠЛЫҠ ЙЫРСЫҺЫ

Эрнест Миллер Хемингуэй — уҙған быуаттың йәштәше, төп ваҡиғаларының шаһиты ғына түгел, ҡатнашыусыһы ла, бөтә донъяға билдәле яҙыусы-реалист, үҙенә генә хас яҙыу рәүеше булған Америка әҙәбиәте классигы, Нобель премияһы лауреаты.

Хемингуэй — батыр йөрәкле шәхес: Беренсе бөтә донъя һуғышы ваҡытында үҙ ирке менән Ҡыҙыл Тәрегә яҙыла, бер нисә тапҡыр яралана, Италияның «Батырлыҡ өсөн» миҙалы менән бүләкләнә, Испанияла франкосылар менән республикасылар һуғышында ҡатнаша, хәрби хәбәрсе була, үҙ ирке менән Испанияға китеп барған интербригада ағзаларының юл хаҡын түләй һәм Испанияға юлланасаҡ санитар машиналарын үҙ аҡсаһына медицина ҡорамалдары менән йыһазландыра. «Испан республикаһының американ дуҫтары» комитеты рәйесе лә була. Ә Икенсе бөтә донъя һуғышында инде ул Кубала фашистарға ҡаршы контрразведка ойоштороусы хәрби журналист, Кариб диңгеҙендә фашистарҙың һыу аҫты кәмәләрен эҙәрлекләүсе, 1944 йылда икенсе фронт асылғас, Францияла һәм Германияла һуғышта һәм разведкаларҙа ҡатнашыусы, Француз Ҡаршылығының партизандар отряды командиры, «Ҡыйыулыҡ өсөн» миҙалы менән бүләкләнеүсе булараҡ билдәлелек ала.

Хемингуэй ижадында ир-егеттәргә хас ҡыйыулыҡ, героик биография менән ижади талант айырылғыһыҙ бәйләнгән. Яҙыусыны ҡыҙыҡһындырған төп проблема — һәләк итерлек шарттарҙа кешенең үҙ-үҙен тотошо, холоҡ-фиғеле. Хемингуэй фекеренсә, кеше яҙмыштың ҡотолғоһоҙ ҡанундарына буйһона, шул уҡ ваҡытта, был ҡотолғоһоҙлоҡто аңлай барып, йәшәү мәғәнәһенең тәбиғәт менән килешеп йәшәүҙә икәнлеген күреп, тормош ығы-зығыһынан азат булыуға өлгәшә бара.

Хемингуэй әҫәрҙәренең геройҙары ла ошо фәлсәфә яҡлы, улар әхлаҡ кодексына буйһона, иң ҡатмарлы хәл-ваҡиғаларҙа ла кешелек дәрәжәһен төшөрмәй. Улар — ҡыйыу, аҙ һүҙле, изгелекле, күркәм, намыҫ ҡушыуы буйынса эш итә торған шәхестәр. Уларҙың үҙ-үҙенә, донъяға, тормошҡа һәм үлемгә мөнәсәбәтенә трагик батырлыҡ хас. Уларҙы еңеүгә илткән юл еңел түгел, күптәре йыш ҡына үҙҙәре ынтылған үрҙәргә барып та етә алмай. Яҙыусы еңелеүҙән ҡурҡмаған, һәр ваҡыт алға ынтылған, шуның өсөн бер ҡасан да еңелеү белмәгән кешеләрҙе үҙ итә, уларҙың еңелеүҙәрен дә еңеү дәрәжәһенә күтәреп данлай, һыныу белмәҫ рух ныҡышмаллығына дан йырлай.

Хемингуэйҙың бөтә әҫәрҙәренең дә нигеҙендә тормош ысынбарлығы ята, уның ижады яһалма түгел, ә яҙыусының шәхси тормош тәжрибәһе, кисерештәре аша тыуа. Ул уйлап сығарылған әҙәбиәтте ҡабул итмәй, тормош факттарына нигеҙләнгән әҙәбиәт яҡлы, шунлыҡтан йыш ҡына үҙен ижадының журналисы тип билдәләр булған. Ул традицион һүрәтләү алымдарына таянып түгел, ә үҙе кисергән уйҙар, хистәр, ассоциацияларҙы уҡыусы ла кисерә алырлыҡ итеп һүрәтләүгә ынтыла.

Америка яҙыусыларының Икенсе конгресында сығыш яһап, Хемингуэй была тип билдәләй: «Яҙыусының бурысы үҙгәрмәй... Ул — дөрөҫлөктө яҙыу, дөрөҫлөктөң ниҙә икәнен аңлап, уны уҡыусының аңына үҙ тормош тәжрибәһе булып инерлек итеп һүрәтләү». Намыҫлылыҡ, дөрөҫлөк, ғәҙеллек, кешене һәм яҙғаныңды аңлай белеү — был ижадҡа һәм үҙ-үҙеңә ҡуйыла торған төп талаптар. Хемингуэй һүҙ сәнғәтенә, һүрәтләүҙәрҙә әһәмиәтһеҙ нәмәләрҙе төшөрөп ҡалдыра белеү һәләтенә айырым иғтибар бирә, «Айсберг принцибы» тип аталған үҙенең һүрәтләү техникаһын булдыра. «Әҙәби ижад миңә айсбергты хәтерләтә тип әйтер инем, — тип яҙа ул үҙенең ижад итеү үҙенсәлеге тураһында, — уның һигеҙҙән бер өлөшө генә күренә, ә ҡалғаны — һыу аҫтында. Ташлап булған бөтә нәмәне ташларға кәрәк. Был һеҙҙең айсбергты нығыта, ә ҡалғаны һыу аҫтына китә». Хемингуэй артыҡ ҡупырым, артыҡ иркә, артыҡ бөҙрә һүҙҙәрҙе ҡабул итмәй, бөтә нәмә тураһында ла бик ҡыҫҡа һәм ябай итеп яҙа; әҫәрҙәрендә эш-ғәмәлдәрҙе һүрәтләй, хистәр, уйланыуҙар, күңел кисерештәре —юлдар араһында, улар художестволы деталдәр, репликалар, интонация һәм хикәйәләү тоны, кәйефе аша аңлашыла. Хемингуэй үҙ геройҙарының эске кисерештәренә бәйле автор аңлатмаларынан баш тарта, тышҡы һүрәтләүҙәр аша уларҙың эске күңел кисерештәрен аса. Шуның өсөн дә Хемингуэй өсөн һәр

бер әҙәби деталь, хатта осраҡлы тойолғаны ла, бәләкәй генәһе лә, иҫ киткес мөһим.

Яҙыусының яҙыу манераһының камиллыҡҡа еткерелгән теүәллеге һәм ҡыҫҡалығы донъяның бик күп яҙыусыларының ижад стиленә йоғонто яһаны һәм 1930–1950-се йылдарҙағы Америка һәм Европа прозаһының кимәл билдәһе булып танылды.

Хемингуэй әҙәбиәткә Беренсе бөтә донъя һуғышынан һуң килә. Уның тәүге осорҙағы ижады «юғалған быуын» әҙәбиәте ыҙанында үҫеш ала һәм Э.М. Ремарк, Ф.С. Фицджеральд, Р. Олдингтон әҫәрҙәре менән уртаҡ яҡтары күп. «Беҙҙең дәүерҙә» (1925) йыйынтығына ингән хикәйәләрендә, «Һәм ҡояш сыға (Фиеста)» (1926), «Хуш, ҡорал!» (1929) романдарында кисә генә мәктәп уҡыусыһы, студент булған, бөгөн Беренсе бөтә донъя һуғышына килеп эләккән һәм, һуғыштың ҡот осҡос фажиғәһе менән тәрбиәләүселәренең юғары һүҙҙәре араһында ятҡан упҡынды күреп, тетрәнеү кисергән йәштәрҙең донъяны, тормошто ҡабул итеүе, аҡыл-кәйефтәре һүрәтләнә. Был әҫәрҙәрендә яҙыусы «юғалған быуынға» хас булған күңел бушлығын, рух төшөнкөлөгөн һүрәтләй.

Хемингуэйҙың артабанғы ижады Икенсе бөтә донъя һуғышы алдынан булған Испаниялағы Граждандар һуғышы менән бәйле. Хемингуэй был илде, уның халҡын, сәнғәтен, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен айырым бер хөрмәт менән ярата; унда йыш була; тәүге әҫәрҙәрендә тасуирланған күп кенә ваҡиғалар Испанияла башлана. Азатлыҡ өсөн көрәшкән Испанияла йәшәү Хемингуэйҙы рухи яҡтан байыта, «Бишенсе колонна» (1938) пьесаһын, хикәйәләр һәм очерктар циклын, «Испан ере» сценарийын (1938), XX быуат донъя әҙәбиәтенең әһәмиәтле күренеше булған «Ҡемгә төбәп ҡыңғырау ҡыңғырай» (1940) романын ижад итеүгә рухландыра.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа АҠШ-тың эске һәм тышҡы сәйәсәтенән күңеле ҡайтҡан Хемингуэй башлыса Кубала йәшәй. Куба менән уның ижадының һуңғы осоро бәйләнгән. Ошо йылдарҙа ул Америка әҙәбиәтенең үткән быуат уртаһындағы иң мәшһүр әҫәрҙәренең береһе «Ҡарт һәм диңгеҙ» (1952) повесын яҙа.

Америка прозаһының был осорона аллегория, ситләтеп әйтеү тенденцияһы хас, мәҫәлән, Дж. Стейнбектың «Ынйы», «Ожмахтан көнсығышҡа табан», Р. Райттың «Йәшеренеп йәшәүсе кеше», Р. Эллисондың «Күҙгә күренмәгән кеше» әҫәрҙәре — быға миҫал. Әммә, әҙәбиәт үҫешенең дөйөм йүнәлешен дауам итеп, ҡарт һәм диңгеҙ тураһында үҙ легендаһын ижад итеп, Хемингуэй иң тәүҙә Г. Мелвиллдың диңгеҙ тураһындағы һәм шул уҡ ваҡытта фәлсәфәүи-аллегорик

«Моби Дик» романының традицияларына тоғро ҡала, Америка һүҙ сәнғәтенең бөгөнгө һәм үткәне араһында бәйләнеш булдыра.

1950-се йылдар Америка әҙәбиәтендә «Ҡарт һәм диңгеҙ» повесының айырым урын биләүенең тағы ла бер сәбәбе бар: ул, кешегә һәм уның көсөнә ышаныс менән һуғарылған тәрән мәғәнәле әҫәр булараҡ, АҠШ-тағы мәҙәни тормоштоң алсәхнәһен яулаған төшөнкө рухлы әҫәрҙәргә ҡаршы тора. Повесть өҫтөндә нисек эшләгәнен һүрәтләп, Хемингуэй былай тип яҙа: «Бәхеткә күрә, минең һәйбәт кешем һәм һәйбәт малайым булды. Һуңғы ваҡытта яҙыусылар ошондай нәмәләрҙең барлығын онота». Был һүҙҙәрҙә повесҡа һәм үҙ ижадына ҡарата автор мөнәсәбәте менән хәҙерге Америка әҙәбиәтендә үҙенең урынын аңлау кимәле теүәл бирелә. Хемингуэй — яҡшы кешеләрҙе данлаусы шағир, бында уның яҙыусылыҡ бурысын һәм маҡсатын аңлауы күренә.

Һикһән дүрт көн буйы диңгеҙгә сығып та, буш ҡул менән ҡайтҡандан һуң, мөһабәт ҡылыс балыҡ тотоп, уны кәмәһенә бәйләгән, ләкин акулаларҙан һаҡлай алмайынса ярға балыҡтың һөлдәһен генә алып ҡайтҡан Ҡарт балыҡсы тураһындағы үҙенсәлекле тарих ике яҫылыҡта хикәйәләнә: фактографик һәм символик-фәлсәфәүи. Уларҙың үҙ-ара үрелеше был реалистик повестың ҡабатланмаҫ художество үҙенсәлеген билдәләй.

Ярлы Куба балыҡсыһы Сантьяго — Хемингуэйҙың ныҡ, бөгөлмәҫ, әхлаҡлы типик геройы. Тормошоноң иң ауыр осорон кисергән мәлдә, уның бөтә физик һәм рухи көсө асыла. Ҡармаҡҡа эләккән ярты тонналыҡ балыҡты өс көн буйына эҙәрлекләп, уны йөрәгенә гарпун сәнсеп үлтереп, аҙаҡ акулалар менән көрәшеп, уларҙы берәмләп үлтереп, һуңынан уларҙың көтөүе менән алышып, көрәш мәлендә бысағын һәм гарпунын юғалтып, еңеүгә өмөтө өҙөлөп, ләкин аҡтыҡ көсөн йыйып ярға килеп еткән балыҡсы ысын мәғәнәһендә батырлыҡ күрһәтә. Хемингуэй хеҙмәт кешеһенә, һуңғы сиккә тиклем көрәшкә һәләтле кеше батырлығына дан йырлай. Балыҡсының ҡурҡыныс сәйәхәтен, тәүлектең төрлө ваҡытында диңгеҙҙең төрлөсә йымылдағанын, төрлө төҫкә инеп тулҡынланған океан һулышын, Гольфстримдың серле тәрәнлеген теүәл, аныҡ деталдәр ярҙамында шул тиклем ентекле һүрәтләй, һөҙөмтәлә әҫәрҙе уҡыусы үҙен ошо ваҡиғалар уртаһында ҡайнағандай хис итә башлай. Әҫәрҙәге ваҡиғалар ағымы батыр балыҡсыны ҡырыҫ, аяуһыҙ яҙмышҡа ҡаршы торған кеше символына күтәрә, һәм был уны үҙ сиратында символик фәлсәфә менән тығыҙ бәйләй. Беҙҙең алда — ғүмеренең ахырына килеп еткән, тәбиғәт, океан, йондоҙҙар менән

күҙмә-күҙ ҡалған кеше. Был геройына Хемингуэй тормош һәм үлем, кеше һәм донъя, бөтә нәмәнең үҙ-ара бәйләнешле булыуы, бөтә нәмәнең һәм һәр кемдең үҙ тәғәйенләнеше, йәшәү мәғәнәһе тураһындағы иң изге уйҙарын, фекерҙәрен һалған. Шуның өсөн дә күпте күрергә, күпте аңларға мөмкинлек биргән оҙон ғүмеренең аҙағында үҙен йыһан менән бер бөтөн итеп тойған Сантьягоның ябай ер кешеһе итеп һүрәтләнеүе мөһим. Үҙе терелткән тәбиғәт менән ул бер бөтөнгә әйләнә, балыҡтар һәм ҡоштар менән һөйләшә, диңгеҙҙе тере йән эйәһеләй күреп ярата, йәшәйеш ҡанундарын аңлап, ғаләмдең берҙәм картинаһын күҙаллап, тәрән фекер йөрөтә. Кешенең тәҡдире ауыр, донъя аяуһыҙ икәнен Сантьяго аңлай, ләкин уның күңелендә Хемингуэйҙың «юғалған быуын» геройҙарына хас булған ҡурҡыу, юғалып ҡалыу кеүек тойғолар юҡ. Уның рухы ныҡ, ул ысын тормош менән йәшәгәнен белә, шуға күрә яҙмыш һынауҙарын да бөгөлмәй ҡабул итә.

Ҡурҡыныс балыҡҡа бер яңғыҙы сыҡҡан сәйәхәтендә ул кеше тураһында, уның тәбиғәттәге башҡа йән эйәләре араһындағы урыны, кешенең ошо йән эйәләренә ҡарата көс ҡулланыуы хаҡында оҙаҡ уйлана, диңгеҙҙә үҙенең берҙән-бер әңгәмәселәре булған ҡоштарға, балыҡтарға кешенең ни өсөн һунар итергә, балыҡ тоторға мәжбүр икәнен аңлатырға тырыша. Үҙе дәртле, әүәҫ балыҡсы, һунарсы булған, үгеҙҙәр алышын ҡарарға яратҡан Хемингуэйҙы ҡыҙыҡһындырған тема — Сантьягоның балыҡ менән, һуңынан акулалар менән, ғәҙәттә, иң көслөләр генә еңә алған алышы. Океан байлыҡтары менән тукланған диңгеҙ ярында йәшәүселәр өсөн балыҡ тотоу — йәшәү өсөн кәрәк шөғөл, кеше диңгеҙгә сыҡҡанда астан үлмәҫ өсөн, йәшәү өсөн сыға, һәм был аяуһыҙ тормошта йәшәй алыуы уның оҫталығына, таҫыллылығына, батырлығына бәйләнгән.

Хемингуэй халыҡ аҡһаҡалы һүҙҙәре менән афористик формала дөрөҫлөктө еткерә: «кеше еңелер өсөн тыумаған», «кешене үлтерергә мөмкин, ләкин уны еңеп булмай», «ирмен тигән ир кеше ауыртыуҙы тоймай ҙа». Был һүҙҙәрҙә кешенең XX быуат реалистик әҙәбиәтенә хас булған тулы бөтөн концепцияһы ята: кеше, нисек кенә булмаһын, еңеүсе буласаҡ. Һуңғы сиктә «ҙур балыҡ» өсөн көрәштә Сантьяго еңелә, ләкин рухи яҡтан ул еңелерлек түгел.

Был осраҡта повеста Манолин исемле малай менән бәйле сюжет йүнәлеше мөһим. «Ҡарт көнөндә кеше яңғыҙ ҡалырға тейеш түгел, әммә был мөмкин түгел», — ти Сантьяго. Ләкин уның ышаныслы йәш дуҫы, уҡыусыһы бар, балыҡҡа өс көнлөк сәфәр ваҡытында ул эргәлә булһа... Балыҡсы ҡарттың күп тапҡырҙар ҡабатлаған «Малай

бында булһа икән»тигән теләге геройҙың төп фекерҙәренең береһе булып китә. Тыштан ябай ғына булған был һүҙбәйләнеш, «айсберг техникаһы»на ярашлы, төпкөлдә уй йомоуҙы асыҡлай: ҡарт өсөн диңгеҙҙә иң кәрәкле булған Манолин ирҙәрсә дуҫлыҡтың көсөн, быуындар бәйләнешен, рухи туғанлыҡты сағылдыра һәм, иң мөһиме, кешенең һәр саҡ яңғыҙ булыуы хаҡындағы концепцияны яңынан ҡарау ихтыяжын күтәреп сыға. Әҫәрҙең аҙағы ла ошоға бәйле: малай йоҡоға талған ҡарт эргәһендә һәм ул мотлаҡ уның менән диңгеҙгә юлланасаҡ әле.

«Ҡарт һәм диңгеҙ» — Хемингуэйҙың һуңғы китабы, һәм ул уның васыяты һымаҡ ҡабул ителә.

*Галина Ишимбаева*

*Литературно-художественное издание*

**Эрнест Хемингуэй**

**СТАРИК И МОРЕ**

**(на башкирском языке)**


*Гөлсирә Ғиззәтуллина* тәржемәһе

Сығарылыш өсөн яуаплылар *А. Фенин, Г. Белозерова*
Мөхәррире *С. Шәрипов*
Һуңғы һүҙ *Г. Ишимбаева*
Һуңғы һүҙҙең тәржемәһе *Р. Ҡуҙбәкова*
Рәссамы *А. Ҡостин*
Ҡомпьютерҙа версткалаусы *Е. Моисеева*
Ҡорректорҙары *М. Мөхәмәтйәнова, Ә. Аҡбутина*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 12.08.2015. Ҡағыҙ форматы 60x90/16. Офсет ысулы менән баҫылды.
Күләме 6 шартлы баҫма таб. Тиражы 10 000 дана. Заказ № 2.0168.15.

«Инеш» нәшриәте. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2
E-mail: inesh_ufa@mail.ru, www.inesh.ru

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2